ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

24-30 октябрь (ҡарасай) 2020

№43 (929)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аралашып йәшәйек!**



6

**Бөйөктәрҙең бөйөклөгөндә...**

ҡатын-ҡыҙҙың да ҡатнашлығы бар шул



8-9

**Сибайҙарға - мәҙхиә!**



11

**Иң мөһиме - мин тере!**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө" аҙналығына республиканың һәр район-ҡалаһында, ауылында 725 һум 58 тингә яҙылып, дуҫлыҡты дауам итергә саҡырабыҙ. Бер-беребеҙгә кәрәкле, бер-беребеҙгә терәкле фекер уртаҡлашыусылар булайыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ил Президенты Владимир Путин япраҡлы һәм ылыҫлы ағас материалдарын эшкәртелмәгән килеш илдән сығарыуҙы тыйҙы. Ошо хаҡта фекерегеҙ нисек?

***Баязит СОЛТАНҒУЖИН, Йылайыр урман хужалығы Хәйбулла бүлексәһе хеҙмәткәре:*** Беҙҙең илдә урман, ағас темаһы иң киҫкен проблемаларҙың береһе. Дөрөҫөн әйткәндә, урман беҙҙең менталитет аңында - ул аяуһыҙ ҡырыу, урлыҡ объекты, илдең тәбиғи байлығына ҡарата хужаһыҙлыҡ, битарафлыҡ, ҡырағайҙарса мөнәсәбәт сағылышы. Шундай илдәр бар: унда бер төп ағас та ҡәҙерле, иҫәптә һәм контролдә тотола, бер төп ағас ҡырҡҡан өсөн ҙур күләмдә штраф түләтелә, сөнки уларҙа Рәсәйҙәге һымаҡ иҫәпһеҙ-ҡәҙерһеҙ байлыҡ юҡ. Шуға күрә, сит илдәр беҙҙән мөмкин тиклем арзан хаҡҡа йә булмаһа коррупцион юлдар аша сифатлы ағас һәм ағас материалдарын ҡулға төшөрөргә тырыша. Урман байлығына хужа булып алған йылғыр әҙәмдәргә шул ғына кәрәк тә: улар законһыҙ рәүештә урман ҡырҡыу, ил байлығын урлау юлы менән ситкә иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡиммәтле ағас оҙата.

**Миҫал артынан алыҫ йөрөргә лә түгел, был үҙебеҙҙең Башҡортостан урмандарын тәләфләүҙән дә күренә: Йылайырҙан ғына ла көн һайын шалҡандай ағас, бүрәнә, башҡа төр ағас материалдары тейәгән тиҫтәләгән йөк машиналары Ырымбур тарафтарына юл ала. Күрше райондарҙа ла шул уҡ хәл: ағасты нисек тә аҡсаға әйләндереү бар белгәндәре.**

Әлегерәк, исмаһам, 2006-2007 йылдарға - Рәсәй Федерацияһының яңы Урман кодексы сыҡҡанға тиклем, тейелгеһеҙ һаналған урман участкалары була торғайны, әммә урман байлығын ҡулға төшөрөргә хыялланған ҙур чиновниктар йоғонтоһонда яҙылған яңы закон буйынса урман фәҡәт айырым кешеләр өсөн ҡулланыу, байығыу объектына әүерелде. Кем генә хужа түгел хәҙер Башҡортостан урмандарына! Сит компаниялар, айырым бизнесмендар, уларҙан ҡала - арендатор-ҡуртымсылар... Үҙебеҙҙең ҡуртымсылар ҙа аяу белмәй хатта. 49 йылға ҡуртымға алып, аҡса өсөн шул участкаларындағы һуңғы ағасты ла йығып һалырға әҙерҙәр. Улар эшләгән диләнкәләр ҡола яланға әйләнә, ҡырҡылған ағастар урынына яңыларын ултыртыу мәсьәләһе менән әллә ни баш ватып тормайҙар. Өҫтәүенә, быйылғы янғындар ҙа бик ҙур зыянға һалды.

Ағас ултыртыу, тигәндән, БР урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдиновтың был тәңгәлдәге бурысты контролгә алып, урмандарҙы тергеҙеү, ағас ултыртыу мәсьәләһенә айырым иғтибар биреүе күңелгә бер аҙ йыуаныс бирә, әлбиттә. Яңыраҡ Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә министр ҡырҡылғанға ҡарағанда республикабыҙҙа күберәк ағас ултыртыла, тип хәбәр итте. Быны өсөн, йәғни урмандарҙы тергеҙеү һәм был эштәр өсөн махсус техника һатып алыуға федераль бюджеттан 211,2 млн аҡса бүленгән, тине ул. Һөҙөмтәлә был аҡсаға ағас орлоҡтары һәм үҫентеләре запасы тупланған, 23 берәмек янғынға ҡаршы һәм башҡа төр урман техникаһы һатып алынған. Белгестәр фекеренсә, янғындарға ҡаршы көрәштә быйыл тап ана шул яңы техника ярҙамы ныҡ тейгән дә икән, бик хуп. Министр үҙенең күптән түгел "Башҡортостан" гәзитенә биргән интервьюһында ла ошо хаҡта әйтә: быйыл 7440 гектарҙа ағас ултыртыу ҡаралған булһа, шуның 6500 гектарында ултыртылды ла инде, ҡалғаны ошо айҙарҙа тамамланасаҡ, ти ул. Ағас ултыртыу, урмандарҙы тергеҙеү Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың да иғтибар үҙәгендә булыуы был өлкәлә яҡшыға өмөтләндерә. Күпме генә урман ҡырҡылһа ла, уның урынына тағы ла күберәк ағас ултыртылырға тейеш, тигән ҡараштa етәксе. "Быйыл урмандарҙы тергеҙеү күләме 100 проценттан да ашып китергә тейеш. Хужалыҡ эшмәкәрлеге беҙҙән һуң урмандың кәмеүенә килтерергә тейеш түгел", - тине республика етәксеһе әлеге кәңәшмәлә.

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

✓ *Унда йәмғеһе 4 мең кубометр йөк тейәгән 355 берәмек автотранспорт техникаһы тикшерелгән. Шуларҙан урман законын боҙоу юлы менән 120,6 кубометр ағас тейәп сыҡҡан 11 йөк машинаһы тотолған.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ил Президенты Владимир Путин япраҡлы һәм ылыҫлы ағас материалдарын эшкәртелмәгән килеш илдән сығарыуҙы тыйҙы. Ошо хаҡта фекерегеҙ нindәй?

(Башы 1-се биттә).

***Әләм ШӘРИПОВ, биология фәндәре докторы, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының өлкән ғилми хеҙмәткәре:*** Урман илебеҙҙең милли байлығы, ләкин ошоға тиклем йәшәп килгән ошондай ҡараш урмандарыбыҙҙың башына етә яҙҙы, шуға күрә тәбиғи хазинаға ҡарата илдә мөнәсәбәт тамырынан үҙгәрергә тейеш, тип уйлайым. Сөнки ниндәй генә байлыҡ та, әгәр уға һаҡсыл, хәстәрлекле ҡараш юҡ икән, ғүмер буйы бөтмәҫ-төкәнмәҫ булып ҡала алмай. Биолог, урман һәм урман хужалығы өлкәһендә белгес Алексей Ярошенко әйтмешләй, тап бына әлегеләй "Рәсәй урманы бөткөһөҙ" тигән миф илдең урман хужалығына бик ҙур зыян килтерҙе һәм ысын мәғәнәһендә милли хәүеф сығанағына әүерелде. Тап ана шундай яуапһыҙ, вайымһыҙ мөнәсәбәт 2003-2006 йылдарҙа яңы урман кодексын төҙөгәндә ҡатнашҡан йә шуға йоғонто яһаған лоббистар - принципһыҙ әҙәмдәрҙең төп принцибына әйләнде. Һөҙөмтәлә Рәсәй урман хужалығы меңәрләгән эш урындарын юғалтты: уларҙың кәрәге бөттө, тигән һылтау менән лесник-урман ҡарауылсылары һәм урман белгестәре - лесничийҙар штатын ҡыҫҡартырға мәжбүр булды.

Шулай итеп, урмандар ҡарауһыҙ тороп ҡалды һәм уны талауға юл асылды. Һөҙөмтәлә Рәсәй урмандары - еребеҙ, планетабыҙҙың "йәшел үпкәһе" йылдан-йыл ҡаҡшай, юҡҡа сыға бара. Шуныһы үкенесле: бизнес, кеҫә ҡалынайтыу маҡсаты менән күҙҙәре тонған урман ҡырыусылар реликт ағастарҙы ла аяп тормайҙар хатта. Әлеге ғалим-эксперт Ярошенко әйтеүенсә, Рәсәйҙә былай ҙа запасы ҙур булмаған имән, бук (карпат имәне), йәсин (ҡорос ағасы), саған, сәтләүек ағастары тулыһынса юҡ ителеү алдында. Шулай уҡ ҡиммәтле тоҡомло ылыҫ, ҡарағас ағастары запасы ла кәмене. Ә бит былай хәлдә үҙгәртеү өсөн мөмкинлектәр юҡ түгел. Әгәр урман хужалыҡтары эшмәкәрлеген яңынан һөҙөмтәле итеп ойоштороп, яланға әүерелгән ялanғас диләнкәләрҙә, файҙаланылмай ятыуҙан ҡый үләне баҫҡан ташландыҡ ауыл хужалығы ерҙәрендә урман ултыртыуҙы йәнләндергәндә, еребеҙҙең йәшел ҡалҡаны тергеҙелер ине. Үкенескә, был тиҙ генә эшләнә торған эш түгел - ҡырып, юҡҡа сығарыуы ғына тиҙ. Урмандарыбыҙҙы тергеҙеү өсөн кәмендә 20-30, ҡайһы бер ағастар өсөн хатта 50 йыл кәрәк буласаҡ. Шуға күрә булғанды һаҡлау, ҡәҙерен белеп тотоноу фарыз.

Ошо йәһәттән ил Президенты В.Путиндың, ниһайәт, урман хужалығы мәсьәләһенә иғтибар йүнәлтеүе бик хуп. Дөрөҫ, һуңыраҡ булһа ла, уң булһын, тигәндәй, был өлкәлә эштәрҙе тәртипкә һалыу урман мафияһының енәйәтсел шөғөлөнә юлды ябыр, тип өмөтләнге килә. Бөрйән урмандарында ла, тотош илдәге кеүек үк, законһыҙлыҡ күренештәре хөкөм һөрә: сит-ят компаниялар, байҙар хакимлыҡ итә урмандарыбыҙҙа. Бәхеткә күрә, Бөрйән урмандарының байтаҡ өлөшөн Шүлгәнташ (дөйөм майҙаны 22 мең га) һәм Башҡортостан (40 мең га) дәүләт ҡурсаулыҡтары, "Алтын солоҡ" заказнигы (80 мең га) ғына ҡотҡарып тора. Ниндәй генә ылыҡтырғыс "өлөш" булмаһын, был ерҙәргә бер кем дә яҫҡына алмаясаҡ.

Ғөмүмән, Башҡортостаныбыҙ тәбиғәте - ул тотошлайы менән ҡурсаулыҡ итеп танылырға тейешле уникаль төбәк тә бит, аҡса, бизнес үҙенекен итә: байҙарҙыҡы замана. Республикабыҙ урмандары ла аяуһыҙ ҡырҡылып, көнө-төнө ситкә ташыла. Былай хужаһыҙлыҡҡа сик ҡуйылһын, Президент ҡарары закон нигеҙенә һалынып, тейешле һөҙөмтәһен бирһен ине.

***Фәйрүзә ИШДӘУЛӘТОВА, хеҙмәт ветераны:*** Ҡиммәтле ҡарағас һәм ылыҫлы ағастарҙы һәм уларҙан эшкәртелмәгән ағас материалдарҙы илдән ситкә сығарыуҙы тыйыу тураһындағы ҡарар күптән кәрәк ине. Ошоға тиклем күпме законһыҙлыҡ ҡылынды: ҡырылды, урланды, ситкә һатылды урман. Ҡайһы бер белгестәр әйтеүенсә, тиҙҙән урларға ағас та ҡалмясаҡ инде беҙҙә, сөнки фәҡәт файҙаланыу, ҡулланыу мәнфәғәтен генә ҡайырыуҙан урмандар мөсһөҙләнде, хатта тайгаларҙа бушлыҡтар барлыҡҡа килде. Рәсәй ағасы күптән инде яйға һалып алынған шыма юлдар һәм каналдар аша көнө-төнө ситкә ағыла. Ил ҡаҙнаһы урман мафияһы шөғөлөнән миллиардлаған һумдарҙа зыян күрә, меңәрләгән гектар урмандар юҡҡа сыға. Миҫалға һыуҙан да, ҡоро ерҙән дә зыян күреүсе, талау объектына әйләнгән Алыҫ Көнсығышты ғына алайыҡ. Бер яҡтан, Рәсәй территорияһының һыу киңлектәре байлығы - балыҡ, ыуылдырыҡ, кальмар һәм башҡа төр диңгеҙ деликатестары законһыҙ байығыу, контрабанда сығанағы булып хеҙмәт итһә, икенсе яҡтан, уның тайга урманы талаһыуға дусар. Алыҫ Көнсығыш тайгаһы тулыһынса тип әйтерлек ҡытайҙар ҡулында, тиҙәр ине бер заман. Рәсәй Тәбиғәт министрлығы башлығы Дмитрий Кобылкин әйтеүенсә, эшкәртелмәгән ҡиммәтле ағастың 70 проценты Ҡытайға экспортлана икән. Байкал аръяғы, Красноярск, Алтай крайҙары, Свердловск, Киров, Вологда өлкәләре, Бүрәт республикаһы һәм Карелияла урмандар нигеҙҙә криминаль төркөмдәр, бурҙар ҡулында.

Башҡортостан урманы ла көн-төн ситкә ташыла. Ошо йылдың 7 - 27 сентябрендә дәүләт урман инспекторҙары полиция һәм ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре менән берлектә үткәрелгән "Урман" оператив-киҫәтеү операцияһы һөҙөмтәләре лә был хаҡта асыҡ һөйләй. Ошо осор эсендә 300-гә яҡын рейд үткәрелгән. Унда йәмғеһе 4 мең кубометр йөк тейәгән 355 берәмек автотранспорт техникаһы тикшерелгән. Шуларҙан урман законын боҙоу юлы менән 120,6 кубометр ағас тейәп сыҡҡан 11 йөк машинаһы тотолған. Ошо 20 көнлөктә барлығы 88 закон боҙоу осрағы асыҡланған, шуларҙың 31-е 285 кубометр ағасты законһыҙ ҡырҡыуҙа ғәйепләнә. Тикшереү һөҙөмтәһендә 5 енәйәт эше ҡуҙғатылған.Был закон боҙоуҙар арҡаһында урман фондына 3375,5 мең һум зыян килтерелгән. Бынан тыш, ағас ташыуға документтары дөрөҫ тултырылмаған 57 осраҡ административ хоҡуҡ боҙоу булараҡ теркәлгән. Ошондай рейд-тикшереүҙәр йышыраҡ ойошторолһа, урман хужалығында күптән инде ниндәйҙер тәртип урынлашыр ине, моғайын.

Рәсәйҙә урман браконьерҙарына ҡаршы башҡа төрлө көрәш саралары ла ҡулланыла башлаған, имеш. РФ Тәбиғәт министрлығы менән берлектә Рәсәй урман хужалығы берҙәм дәүләт автоматлаштырылған мәғлүмәт системаһы нигеҙендә ағас һәм уның менән эш итеүҙәрҙе иҫәпкә алып, ағасҡа ҡағылышлы бөтөн документацияны электрон күҙәтеүгә алған. Урман массивтарын космостан күҙәтеп мониторлауҙы тиҙләтһәләр, был урман ҡырҡыуҙарҙы оператив тикшереп торасаҡ һәм законһыҙ шөғөлдәргә юлды ябасаҡ, тип көтөлә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**



## БӨРЙӘН ҠАРАҒАЙЫ

*Китеп бара Бөрйән ҡарағайы,*
*Еркәйендә ҡалған тамыры,*
*Китеп бара Бөрйән ҡарағайы,*
*Сайыр йәшен юлға тамыҙып.*

*Барып етер Бөрйән ҡарағайы,*
*Күпме генә йәшең ағыҙма -*
*Иҫән сығыуҙар юҡ был цехтарҙан,*
*Әйләнер ул ап-аҡ ҡағыҙға.*

*Кире ҡайтыр Бөрйән ҡарағайы,*
*Әйләнер ҙә ап-аҡ ҡағыҙға.*
*Ул ҡағыҙға Бөрйән урмандарын*
*Нығыраҡ ҡырырға тип яҙылған.*

**Рауил БИКБАЕВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Пандемия башланғандан алып 23 октябргә республикала COVID-19 йоҡтороуҙың 10089 осрағы теркәлгән. Һуңғы тәүлектә 74 кешелә ошо сир барлығы асыҡланған. Ошо уҡ осорҙа 48 кеше коронавирустан вафат булған. Дауахананан тыш пневмония менән сирләүҙең 272 осрағы асыҡланған. Алдан хәбәр ителгәнсә, быйыл туғыҙ айҙа Башҡортостанда 1505 кеше дауахананан тыш пневмониянан үлгән.

✓21 октябргә мәғлүмәттәр буйынса, ауырығандарҙың күбеһе - Өфөлә (4 144 кеше). Баш ҡаланан һуң Нефтекама (515) һәм Туймазы районы (513) килә. Шартлы өсөнсө урынды Стәрлетамаҡ (420) һәм Бәләбәй районы (410) биләй. Салауат уларҙан бер аҙ ҡалыша - пандемия башланғандан алып 373 осраҡ. Ә Межгорье ҡалаһында һәм Йылайыр районында коронавирус менән сирләгәндәр аҙ - һәр муниципалитетҡа 3-әр кеше тура килә. Ҡыйғы районында улар икеләтә күберәк, Балаҡатай һәм Дыуан райондарында - 9 һәм 10 сирле.

✓Рәсәй властары коронавирус эпидемияһы арҡаһында карантин индерергә йыйынмай. Хәҙер был вариант ҡаралмай, тип хәбәр итте РБК үҙ сығанағына һылтанма менән. "Был мөмкин түгел", - тине РБК әңгәмәселәренең береһе һәм Президенттың белгестәр фекеренә ҡолаҡ һалыуын өҫтәне. Улар әйтеүенсә, локдаун индереүҙең кәрәге юҡ. 14 октябрҙә Владимир Путиндың Хөкүмәт ағзалары менән кәңәшмәһе барышында вице-премьер Татьяна Голикова шулай уҡ карантин индереүҙең кәрәкмәүен әйтте. Уның һүҙҙәренсә, илдә хәлгә "идара итергә мөмкин".

✓Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығына сирле хеҙмәткәрҙәр булған театрҙарҙы ябырға ҡушты. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында сир осраҡтары асыҡланды, шуға күрә коллектив ике аҙнаға үҙизоляцияға китергә ҡарар итте, тине мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

✓Халыҡтар берҙәмлеге көнө уңайынан рәсәйҙәрҙе 4 ноябрҙә өҫтәмә ял көнө көтә. Быйыл байрам шаршамбыға тап килә. Шулай итеп, быйыл ноябрҙең икенсе аҙнаһында рәсәйҙәр дүрт көн эшләй: 2, 3, 5 һәм 6 ноябрҙә. Өҫтәүенә Халыҡтар берҙәмлеге көнө алдынан шишәмбе, 3 ноябрҙә, эш ваҡыты бер сәғәткә ҡыҫҡара.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

**Йорт алдындағы уйын майҙансығынан балалар өҙөлмәй. Бына әле лә 5-6 баланың уйнағанын себеш көткән инәләр кеүек ике өләсәй уяу күҙәтә. Ирекһеҙҙән, уларҙың һөйләшеүенә шаһит булырға тура килде: "Шөкөр, әлдә ошо балалар бар, ни менән көн үткәрмәк кәрәк. Күршеләр ҙә, минең балалар ҙа кескәйҙәрҙе баҡсаға йөрөтмәйбеҙ, сир ваҡыты, хәүефле заман бит. Уларҙы саф һауаға алып сығып, уйнатып индереүҙе үҙ өҫтөмә алдым әле", - ти өләсәйҙәрҙең йәшерәге. Өлкәне лә һүҙгә ҡушыла: "Бер осор бында уйнарға балалар ҙа ҡалмағайны, әле, шөкөр, ҡала ҡатындары ла бала таба башланы. Дөрөҫ эшләйҙәр, ниңә тапмаҫҡа: хөкүмәт күпме аҡса түләй уларға. Беҙҙең заманға эләкмәне шул бындай ярҙам"...**

# АҠСАМЫ?

## Бөгөн бар ул, иртәгә - юҡ!



Эйе, күрер күҙгә хәҙер ҡалала ла балалар етәкләгән, коляска менән йөрөргә сыҡҡан һәм ауырлы ҡатындар аҙым һайын осрай, улар ысынлап та арта бара кеүек. Тик һуңғы ваҡытта ошо йылы тойғоно ҡоро һәм рәсми статистика һандарының һыуындыра төшөүе аптыратып та ҡуйҙы. Башҡортостанда бөтәһе 46305 күп балалы ғаилә иҫәпләнә. Тимәк, беҙҙең республика Дағстан, Чечен республикалары һәм Мәскәү ҡалаһынан һуң Рәсәйҙә дүртенсе урында килә. Быға тиклем дә һәм әлеге көндә лә күп балалы ғаиләләр һәр ваҡыт дәүләт сәйәсәтенең иғтибар үҙәгендә булды һәм булып ҡала. Ул ғына ла түгел, һуңғы йылда, айырыуса пандемия менән бәйле осорҙа балалы ғаиләләргә уғата иғтибар һәм ҡәҙер артты. Һәр төрлө пособиелар тәғәйенләү, Әсәлек капиталы түләүҙәрен арттырыу, иҫәпһеҙ-һанһыҙ социаль ярҙам саралары - балалар баҡсаһына сиратһыҙ ҡабул итеүҙән башлап, бушлай мәктәп формаһы, уҡыу әсбаптары менән тәьмин итеү, торлаҡ алыуҙа ярҙам, мәктәптә түләүһеҙ туҡланыу, транспортта бушлай йөрөү, коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙә ташламалар һәм башҡа бик күп өҫтөнлөктәр ҡаралған. Уйлап ҡараһаң, ҡатындарға бала табып, уларҙы тәрбиәләү менән генә мәшғүл булырға кәрәк тә бит... Юҡ, тотош ил күләмендәге кеүек үк, Башҡортостанда ла тыуым кәмей бара. Ошо араларҙа ғына ла АиФ-Башҡортостан, КП-Башҡортостан, интернет биттәрендә "ҡыҙыу тема" рубрикаһы менән "Демография соҡоро", "Тыуымды арттырыу программаһы хәүеф аҫтында" тигән мәҡәлә баштары был хаҡта тәрәнерәк уйланыуҙарға этәрә. Ысынлап та, әлеге өләсәйҙәрҙең береһе ҡыҙыҡҡан аҡса түләү менән генә арттырып булырмы һуң тыуым кимәлен? Парадокс, ләкин бөгөн кешене ҡыҙыҡтырырлыҡ аҡсанан башҡа тағы ниндәй сара бар икән һуң?

Эйе, тыуым кимәле кәмегәндән-кәмей. Баштаныраҡ төшөп әйткәндә, һуңғы 20 йылда республика халҡы 82 меңгә кәмегән, был үҙе бер ҙур булмаған ҡала хәтлем, тип яҙылғайны был хаҡта. Йыл башында уҡ әле демография проблемаһына иғтибар итеп, "Башинформ" Рәсәйҙә дөйөм тыуым коэффициентының 1,3-кә, йәғни Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы кимәлгә төшөүе хаҡында хәбәр иткәйне. Башҡортостанда иһә был күрһәткес 2014 йылда 1,9 булһа, унан һуң йылдан-йыл шулай уҡ кәмеү күҙәтелә башланы. Башҡортостан Башлығы Радий Хабиров йыл башында уҡ әле: "Әгәр тыуымды арттырыу буйынса комплекслы саралар күрелмәһә, 4 миллионлы республиканың 3 миллионға тороп ҡалыуы ҡурҡыныс төш кеүек буласаҡ", - тигәйне. Былтыр ул 2024 йылға тиклем Башҡортостанды социаль-иҡтисади үҫтереүҙең стратегик йүнәлештәре тураһындағы указға ҡул ҡуйып, мөһим төп йүнәлештәрҙең береһе тип республика халҡын 4,1 млн кешегә тиклем арттырыу бурысын билдәләне.

Тыуымдың кәмеү сәбәптәре күп төрлө һәм улар хаҡында күп яҙыла, шуға күрә, сәбәптәргә туҡталып тормайынса, тыуым кимәлен арттырыу юлдары һәм саралары хаҡында бер нисә һүҙ ҡыҫтырыу урынлы булыр кеүек. Әйтеп кителеүенсә, ил буйынса тыуымды арттырыуҙа аҡсалата дәртләндереү әлегә төп сараларҙың береһе булып тора. Аҙ тәьмин ителгән һәм балалы ғаиләләргә байтаҡ пособие түләнә бөгөн. Ләкин бюджет наҡыҫлығы арҡаһында даими рәүештә аҡса түләүҙәрҙе дауам итеү мөмкинлеге булмаясағына ла ишаралап ҡуя власть эйәләре. "Аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума" тигән һымаҡ, төбәктең Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы эксперттары тарафынан республикаға мигранттар саҡырып, уҡытып, Рәсәй гражданлығы биреп, халыҡ һанын арттырыу кеүек сәйер генә тәҡдим дә яңғырап ҡуйҙы хатта. Ярҙамсы репродуктив технологияларға мөрәжәғәт итеп, ЭКО ысулын күберәк ҡулланыу хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатылды.

Эйе, был тәҡдимдәр барыһы ла аптырағандың көнөнәндер, ләкин төп мәсьәләнең бөтөнләй икенселә булыуы бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Бөтә бәлә илдең социаль-иҡтисади йәһәттән һис кенә лә алға бара алмауында. Бер урында тапаныуҙарҙы пандемия тағы ла ҡатмарлаштырҙы. Һөҙөмтәлә эшһеҙлек артты, фәҡирлек сигендә йәшәүсе ғаиләләр күбәйҙе. Кешеләр иртәгәһе көнгә ышанысын юғалтты, даими стресс, тотороҡһоҙлоҡ шарттарында күптәр өсөн бала табыу түгел, эш табыу ҡайғыһы тәүге урында. Аҡса таратыу юлы менән тыуымды күтәрергә тырышыу - ваҡытлы сара, сөнки аҡса бөгөн бар, иртәгә - юҡ. Ә баланы табыу - тимәк, уның яҙмышы өсөн ғүмерлек яуаплылыҡ алыу, уның ышаныслы киләсәген ҡайғыртыу ул. Ата-әсәнең бит бөгөнгөһөнән бигерәк баланың киләсәге өсөн йөрәге һыҙлай. "Иле ныҡтың биле ныҡ", тигәндәй, эшле, ашлы, иртәләре тотороҡло илдә, әлбиттә, бала үҫтереү - үҙе бер бәхет кенә булыр ине. Ләкин байҙар - байый, ярлылар фәҡирләнә барған һәм улар араһы ике ҡотопҡа әйләнгән бер заманда иң тәүҙә хәйерселекте бөтөрөү, социаль тигеҙлек принциптарын тергеҙеү, мәрхәмәтлек, изгелек төшөнсәләре хаҡында уйланыу, илдең нигеҙен нығытыу саралары күреү иң мөһим бурыс түгелме ни бөгөн? Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, уҡыусыларыбыҙ?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БЕҘ ЮҒАЛМАҪ ЭЛЕК...



**Бер көндө улы атаһынан: "Һеҙ элек интернетһыҙ, компьютерһыҙ, телевизорһыҙ, кондиционерһыҙ, кеҫә телефонһыҙ нисек йәшәнегеҙ?" - тип һорай икән. Атаһы: "Бөгөн һеҙҙең быуын доға-ғибәҙәтһеҙ, кеше хәлен һанламай, намыҫһыҙ, ихтирамһыҙ, оятһыҙ, баҫалҡыһыҙ, китап уҡымай йәшәй ала бит, тимәк, беҙ ҙә һин әйткәндәрҙән тыш та йәшәй алғанбыҙ..." - тип яуап биргән. Һәм артабан шулай тип дауам иткән:**

Беҙ, 1945-1985 йылдар араһында тыуған кешеләр - фатихалыбыҙ. Быға беҙҙең тормош рәүешебеҙ дәлил: уйнағанда йә велосипедта йөрөгәндә беҙ бер ҡасан да шлем кеймәнек. Беҙ яңғыҙыбыҙ мәктәпкә барыуҙан һәм уҡыуҙың тәүге көнөнән ҡурҡманыҡ. Мәктәптән һуң ҡояш байығанса уйнай инек. Беҙ бер ҡасан да яртышар көн буйы телевизор ҡараманыҡ. Интернеттағы виртуаль түгел, ә ысын дуҫтарыбыҙ менән уйнай инек. Һыуһаған саҡтарыбыҙҙа пластик шешәләрҙән түгел, ә шишмәләрҙән һыу эстек. Элек дүрт дуҫ бер стакан һутты бүлешеп эсер булһаҡ та, һирәк сирләй инек. Ауырыған хәлдә, атай-әсәйҙәребеҙ беҙҙе үҙ илебеҙҙә етештерелгән арзан ғына дарыуҙар менән йә булмаһа, халыҡ ысулдары менән дауалар ине. Көн һайын икмәк менән картуфты күп ашаһаҡ та, кәүҙә ауырлығыбыҙ һис бер артып китмәне. Ҡулдарыбыҙҙа үҙебеҙ эшләгән уйынсыҡтар булды, бер-беребеҙҙән уйынсыҡ йә китаптарыбыҙҙы йәлләмәнек. Беҙҙең ата-әсәләребеҙ бай түгелдәр ине. Улар беҙгә үҙҙәренең һөйөүен бүләк итте, улар беҙҙе матди әйберҙәрҙе түгел, ә рухи байлыҡты - намыҫ, тоғролоҡ, ихтирам, хеҙмәт һөйөү кеүек ысын кешелек сифаттарын баһаларға өйрәтте.

Беҙҙең бер ҡасан да кеҫә телефоны, шәхси компьютерыбыҙ ҙа, видеоуйындар ҙа, интернет-чат та булманы. Ләкин беҙҙең ысын дуҫтарыбыҙ бар ине!

Беҙ дуҫтарыбыҙҙың өйөнә саҡырыуһыҙ ҙа барып инә ала инек, бында беҙҙе ябай һәм ҡәҙимге ризыҡ менән һыйларҙар ине.

Беҙҙең иҫтәлектәр аҡлы-ҡаралы фотоһүрәттәрҙә сағылдырылһа ла, улар сағыу һәм матур ине, беҙ ғаилә альбомдарын ләззәт кисереп ҡарай, туған һәм яҡындарыбыҙ портреттарын изге күреп һаҡлай инек.

Беҙ китаптарҙы сүп-сар өйөмөнә ташламаныҡ, уларҙы сираттарҙа тороп һатып алыр һәм донъябыҙҙы онотоп уҡыр инек.

Беҙ шәхси донъябыҙҙы ситтәр иғтибарына сығарманыҡ, кешеләр тормошон әле бына һеҙҙең кеүек ләззәтләнеп тикшермәнек, һеҙ үҙ тормошоғоҙ тураһындағы фотолар, хәбәрҙәрегеҙҙе Инстаграмға һалып, асыҡтан-асыҡ күрһәтәһегеҙ, үҙегеҙҙең ғаилә серҙәрегеҙҙе башҡа кешеләр менән масс-медиа киңлектәрендә тикшерәһегеҙ.

Беҙ уникаль һәм ысынбарлыҡты иң аңлай торған быуын булдыҡ, сөнки:

- беҙ үҙ ата-әсәһен тыңлаған һуңғы быуын, бынан тыш, беҙ үҙ балаларын тыңларға тейеш булған тәүге быуын;
- беҙ барыбер һеҙгә ҡарағанда аҡыллыраҡ һәм һеҙгә ярҙам итәбеҙ;
- беҙ - аҙ һанда ҡалып килгән һуңғы быуын.

Беҙҙең барлығыбыҙҙан ләззәтләнегеҙ! Беҙҙән өйрәнегеҙ! Беҙҙе баһалағыҙ! Беҙ юғалмаҫ элек...

**Интернеттан.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары ярҙамсылары статусын аныҡлап, эшмәкәрлек сиктәрен билдәләйәсәктәр. Парламент рәйесе Константин Толкачев норматив нигеҙҙәрҙе анализлап, депутат ярҙамсыларына ҡағылышлы айырым ҡағиҙәләргә аныҡлыҡ индерергә ҡушты. Был ҡайһы бер депутат ярҙамсыларының был вазифанан артыҡ файҙаланыуына бәйле, тип билдәләнде.

✓Стәрлетамаҡта күренекле хәрби эшмәкәр, Граждандар һуғышында ҡатнашҡан легендар комбриг Муса Мортазинға мемориаль таҡта асылды (Маркс урамы, 103). Саранан һуң Башҡорт дәүләт университеты Стәрлетамаҡ филиалының коворкинг-үҙәгендә Муса Мортазинға арналған түңәрәк ҡор ойошторолдо, "Ашҡаҙар" гәзитенең 30 йыллығы, Ж.Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияның 25 йыллығы, 62-се мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһының 25 йыллығы билдәләнде, шулай уҡ ҡаланың әүҙем граждандары Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнде.

✓Башҡортостан табиптары Абхазия республикаһынан ҡайтты. Башҡорт дәүләт медицина университетынан һәм Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһынан ете табип, ординаторҙар, табип-стажерҙар өс аҙнанан ашыу урындағы табиптарға булышлыҡ итте, коронавирус менән ауырыған пациенттарға медицина ярҙамын күрһәтеүҙе яйға һалды. Республикабыҙ табиптары бынан алда Ҡырғыҙстанда, Ҡарасәй-Черкес Республикаһында һәм Амур өлкәһендә ошондай ярҙам күрһәтеп ҡайтты.

✓Бишенсе саҡырылыш муниципаль район Советы ултырышында Шаран районы хакимиәте башлығы тәғәйенләнде. Тауыш биреү йомғаҡтары буйынса башлыҡ итеп Фидан Ишемғолов һайланды. Ул 2014 йылдан 2019 йылға тиклем Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Аппаратының иҡтисадты модернизациялау бүлеген етәкләй. 2019 йылдың майынан Ағиҙел ҡалаһы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһын башҡара.

✓"Шүлгәнташ" ҡурсаулығы етәкселеге үҙенең сайтында туристарҙы 17 октябрҙән 1 ноябргә тиклем экскурсияларҙы туҡтатыуҙары тураһында иҫкәртте. Ҡунаҡ өйҙәренә бер кем дә урынлаштырылмай, Шүлгәнташ мәмерйәһе лә ябылды. Был саралар пневмония һәм коронавирус менән сирләгәндәрҙең артыуына бәйле ҡабул ителде, тип белдерҙеләр ҡурсаулыҡта.

*✓ Башҡортостан Башлығы халыҡ күп йөрөгән урындарҙа санитар-эпидемиология нормаларын һаҡлау буйынса рейдтарҙы тергеҙергә ҡушты. Йәмәғәт туҡланыуы урындарында ҙур күләмле саралар үткәреү тыйыла.*



ҠЫҪҠАСА

# ТАҒЫ БЕР ДАУАХАНА

✓**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко менән Стәрлетамаҡта 15 декабргә файҙаланыуға тапшырыу планлаштырылған яңы ковид-госпиталь төҙөлөшөн тикшерҙе.** Республика етәксеһе медицина учреждениеһын төҙөгән саҡта Зубов ауылындағы инфекция үҙәген һалыу тәжрибәһе иҫәпкә алынасағын әйтте. Хәбәр ителеүенсә, яңы госпиталдә ҡабул итеү-диагностика һәм операция бүлексәләре, акушер-гинекология блогы, бактериология лабораторияһы, 40 урынлыҡятаҡ була. Михаил Мурашко республиканың ковид-госпиталь төҙөү башланғысын хупланы. Республика етәксеһе министрҙы учреждениены асыуҙа ҡатнашырға саҡырҙы.

✓**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 101 йыл тулыу уңайынан дәүләт наградалары тапшырҙы.** Күренекле яҙыусының исемен мәңгеләштереүгә тос өлөш индергәндәр халыҡ шағирының тыуған көнөндә маҡтау грамоталары, исемдәр һәм рәхмәт хаттары менән бүләкләнде. Республика Башлығы 2019 йылда Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған сараларҙа әүҙем ҡатнашҡандарға рәхмәт әйтте, шулай уҡ "Һеңлекәш", "Өс таған" нәфис фильмдары һәм яҙыусының әҫәрҙәре буйынса спектаклдәр өҫтөндә эшләгән ижади коллективтарҙы билдәләп үтте. "Рәсәйҙә киң прокатҡа сыҡҡан һәм тамашасылар һөйөүен яулаған "Һеңлекәш" фильмы беҙҙең республиканың ниндәй матур икәнен, һоҡланғыс кешеләр йәшәгәнен күрһәтте, - тине Радий Хәбиров. - Шул рәүешле ул Башҡортостанды федераль кимәлдә танытыу өсөн күпте эшләне".

✓**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ишле һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә бушлай бирелгән ер урынына бер тапҡыр аҡса түләү тәртибе тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы.** Бер тапҡыр бирелә торған түләү - 250 мең һум. Исем-шәрифе яҙылған таныҡлыҡ өс йылға тапшырыла. Ҡарарҙа таныҡлыҡ алыу өсөн кәрәкле бөтә документтар күрһәтелгән. Уны фатир, бүлмә, шәхси йорт (шул иҫәптән төҙөлә башлаған) һатып алыу өсөн иғәнә итеп тотонорға ярай. Шулай уҡ йорт һалырға, ипотеканы түләргә, ер һатып алырға мөмкин. Күсемһеҙ милек Башҡортостан биләмәһендә булырға тейеш.

✓**Башҡортостанда табиптарҙы эш урынына, шулай уҡ пациенттарҙың өйҙәренә дәүләт власының эш автомобилдәре йөрөтә башланы.** Әле дәүләт власы органдары паркынан транспорттың яртыһы тиерлек дауаханаларға ебәрелгән дә инде, тип хәбәр иттеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Хәҙер төрлө маркалы бөтә 100 машина ла Өфөнөң медицина учреждениеларына бүленә, башлыса баш ҡала поликлиникаларына. Эш машиналары сирлеләрҙең өйҙәренә барыу өсөн файҙаланыла. Шулай уҡ транспорт көн һайын коронавирустың таралыуына ҡаршы көрәшкән медицина хеҙмәткәрҙәрен эшкә алып бара һәм өйгә алып ҡайта. Хәҙерге ваҡытта медицина учреждениеларының үҙ ресурстары етмәй. Транспорт билдәһеҙ ваҡытҡа бүленгән, тип өҫтәнеләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ҠАРАРҘАР

**Республиканың медицина ойошмалары етәкселәре менән осрашҡандан һуң, коронавирус инфекцияһы менән бәйле килеп тыуған ҡатмарлы эпидемиологик хәл-торошҡа бәйле, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы ҡарарҙар ҡабул итте. Хәҙер Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында инфекцион стационар эшләйәсәк, шулай уҡ 10-сы ҡала клиник дауаханаһында резерв урындар булдырыласаҡ. Декабрҙә Стәрлетамаҡта 300 урынлыҡ яңы инфекцион үҙәк сафҡа инәсәк.**

Бынан тыш, Радий Фәрит улы табиптарҙың ихтыяжы өсөн дәүләт власы органдары автопаркынан 100 машина бүлергә ҡушты. Мәктәптәрҙә БДМУ студенттары иҫәбенән булдырылған медицина инспекторҙары институтының һөҙөмтәлелеген билдәләп, республика Башлығы барлыҡ дәүләт учреждениеларында һәм предприятиеларҙа хеҙмәткәрҙәр иҫәбенән медицина инспекторҙары ойоштороу бурысын йөкмәтте. Ул эш урынында хеҙмәткәрҙәрҙең температураһын үлсәп, битлек режимын һәм башҡа санитар-эпидемиология талаптарын үтәүҙе тикшерәсәк. Әммә тәүҙә БДМУ базаһында онлайн-курс үтәсәк. Медицина университетының сығарылыш курсы студенттары поликлиникаларҙа терапевтарға коронавирус сирлеләрҙе өйҙә дауалауҙы ойошторорға ярҙам итәсәк.

Радий Фәрит улы шулай уҡ томографтарға көсөргәнештең ҙур булыуын билдәләп, компьютер томографияһын сир билдәләре булғанда һәм табип йүнәлтмәһе буйынса ғына үткәрергә ҡушты. Шул уҡ ваҡытта, ошо арауыҡта 60 мең кешенең КТ үтеүе 700 кешелә яман шеш булыуын асыҡларға һәм ваҡытында дауалана башларға ярҙам итеүен күрһәтә, тип билдәләнде.

Дәүләт учреждениеларында һәм ведомство ойошмаларында эшләгән ауырлы ҡатын-ҡыҙҙы ситтән тороп эшләргә күсерәсәктәр. Бындай ысул шәхси компанияларға ла тәҡдим ителә. Шулай уҡ хроник сирҙәр, шәкәр сире, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән сирләүселәр ҙә махсус эш режимына күсереләсәк. Башҡортостан Башлығы транспортта, халыҡ күп йөрөгән урындарҙа санитар-эпидемиология нормаларын һаҡлау буйынса рейдтарҙы тергеҙергә ҡушты. Йәмәғәт туҡланыуы урындарында корпоративтар, банкеттар һәм ҙур күләмле саралар үткәреү тыйыла. Мәҙәни саралар ҙа кәметелә йәиһә киләһе йылға күсерелә, сирлеләр булыуы асыҡланған театр труппалары үҙҡурсаланыуға ебәрелә. Хөкүмәттә һәм башҡа дәүләт органдарында кәңәшмәләр ҡабаттан онлайн режимға күсә.

# ФАТИР ЯҢЫРТЫУСЫЛАРҒА

**Рәсәйҙә льготалы ипотека программаһы 2021 йылдың июленә тиклем оҙайтыла. Президент Владимир Путин яңы төҙөлгән йорттарҙа 6,5 процент менән торлаҡ алырға мөмкинлек биргән льготалы программаны оҙайтыу тәҡдиме менән сығыш яһаны.**

Дәүләт башлығы һүҙҙәренсә, был төҙөлөш тармағына һәм халыҡҡа ярҙам сараларының береһе, ләкин ул 1 ноябрҙә үк ғәмәлдән сығырға тейеш ине. Премьер-министр Михаил Мишустин был тәҡдимде хупланы. "Ошо программаны оҙайтыуҙы мөһим тип иҫәпләйбеҙ. Тиҙ генә тейешле бойороҡтарҙы әҙерләргә әҙербеҙ", - тип премьерҙың һүҙҙәрен еткерҙе РИА Новости. "Ғөмүмән, хәҙер яңы йорттарға кредиттарҙың 90 проценттан ашыуы программаға тура килә. Ул ғаиләләргә бик кәрәк. Әйткәндәй, төҙөлөш тармағына булышлыҡ итеү өсөн был үҙ ролен уйнаны", - тип өҫтәне Мишустин. Льготалы ипотека программаһы кризисҡа ҡаршы уңышлы сараларҙың береһе булды. Был осорҙа 630 миллиард һумға 220 мендән ашыу кредит бирелде. Апрель аҙағында Рәсәйҙә дәүләт ярҙамы менән ипотека программаһы эшләй башланы. 6,5 процент ставкаһы кредит түләгән осорҙа - 30 йылға тиклем ғәмәлдә.

# ХЕҘМӘТ ВЕТЕРАНЫ КӨНӨ

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары киләһе пленар ултырышта "Башҡортостан Республикаһында байрам һәм иҫтәлекле көндәр тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 3-сө статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡарай. Уға ярашлы, республикала Хеҙмәт ветераны көнө булдырыла. Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, уны 18 ғинуарҙа билдәләргә тәҡдим ителә.**

"1974 йылда тап ошо көндә СССР-ҙың Юғары Советы Президиумы Указы менән "Хеҙмәт ветераны" миҙалы булдырылды, - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Өлкән быуын вәкилдәре ошондай миҙал менән бүләкләү традицияһын яҡшы хәтерләй. Халыҡ хужалығында, фәндә, мәҙәниәттә, мәғарифта, һаулыҡ һаҡлауҙа, дәүләт учреждениеларында һәм йәмәғәт ойошмаларында күп йылдар намыҫлы эшләгәндәрҙең хеҙмәтен таныу билдәһе итеп иҫтәлекле дата булдырыуҙы дөрөҫ тип иҫәпләйбеҙ. Яңы иҫтәлекле дата төрлө тармаҡ ветерандарын, ғөмүмән, хеҙмәт кешеһен хөрмәтләүгә, хеҙмәт коллективтарында берҙәмлеккә, күсәгилешлелеккә, йәштәргә дөрөҫ тәрбиә биреүгә булышлыҡ итергә тейеш".

Республика Хөкүмәте закон проектының концепцияһын хупланы. Закон ҡабул ителгән осраҡта Хеҙмәт ветераны көнө республикала һигеҙенсе иҫтәлекле көн була. Ундайҙарға, мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы көнө, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы көнө ҡарай. Яңыраҡ ҡына Дәүләт Йыйылышы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы көнөн булдырҙы. Быйыл 13 ноябрҙә ул тәүге тапҡыр билдәләнә. Иҫтәлекле көндәр ял тип иҫәпләнмәй. Федераль ҡануниәттә билдәләнгән ял көндәренән тыш, республикала өс өҫтәмә ял көнө - Республика көнө, Ураҙа байрамы һәм Ҡорбан байрамы һаҡлана.

# БӘЙЛӘНЕШТӘР

**Башҡортостан менән Төркиә тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙе нығытырға ниәтләй, тип белдерҙе республика Башлығы Радий Хәбиров Төркиәнең Dunya эшлекле гәзитенә биргән интервьюһында.**

Радий Хәбиров хәбәр итеүенсә, сауҙа хеҙмәттәшлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәре - химия һәм нефть химияһы продукцияһы, ағас, металл әйберҙәр, ауыл хужалығы һәм хәләл аҙыҡ-түлекте сит илдәргә оҙатыу. Хәҙерге көндә Төркиә - Башҡортостандың 2,8 процент өлөш менән тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек буйынса унынсы партнеры. Әйтәйек, былтыр Башҡортостандың Төрөк Республикаһы менән тышҡы сауҙа әйләнеше 140 миллион һум тәшкил иткән. Шуның 135,8 миллион доллары - экспорт. 2020 йылдың тәүге ете айында тышҡы сауҙа әйләнеше 64,1 миллион булһа, уның 58,1 миллионы - экспорт. Бынан тыш, Радий Хәбиров Башҡортостанда төрөк инвесторҙарының әүҙемлеге хаҡында һөйләне һәм иғтибарын йәмәғәт майҙандарын файҙаланыуҙың льготалы шарттары, ерҙе ҡуртымға алыу һәм потенциаль һалым льготалары мөмкинлектәренә йүнәлтте.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң мосолмандар зыяратында полиция генерал-лейтенанты Артур Әхмәтхановҡа бюст ҡуйылды. Билдәле дәүләт эшмәкәре 2019 йылда оҙайлы ауырығандан һуң яҡты донъя менән хушлашҡайны.

✓20 октябрҙә - Мостай Кәримдең тыуыуына 101 йыл тулған көндә Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен йөрөткән 158-се Башҡорт гимназияһының Мостай Кәрим исемендәге фондтың грантын алған уҡыусылары аталды. Гимназияның 11 уҡыусыһы - уҡыу алдынғылары, ҡала һәм республика конкурстары, олимпиадалары еңеүселәре, призерҙары исемле грантҡа эйә булды. Бүләкләү тантанаһы санитар-эпидемиологик хәл яҡшырғандан һуң ойошторола. 20 октябрҙә шулай уҡ йәш ғалимдар араһынан - М. Кәрим исемендәге фондтың стипендиаттары иғлан ителде.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы менән күптәнге дуҫлыҡ еп тәре бәйләгән Наньчан ҡалаһы (Ҡытай) Өфөгә бушлай бер тапҡыр ҡулланыла торған медицина битлектәре ебәрҙе. Хәбәр ителеүенсә, яңы инфекцияның таралыуына юл ҡуймау буйынса иҫкәртеү саралары барышында өфөләргә 20 мең дана битлек таратыу күҙаллана. 2016 йылдың 14 июлендә Өфө һәм Наньчан ҡалалары араһында туғандаш мөнәсәбәттәр тураһында меморандумға ҡул ҡуйылды. Ҡул ҡуйылған меморандум сиктәрендә осрашыуҙар, берлектәге саралар ойошторола.

✓Йыл башынан алып баш ҡалала транспорт сараларын газондарға ҡуйған өсөн автомобиль хужаларына 11900 протокол төҙөлгән. Былтыр был һан 15700 булған. Комиссия тәртип боҙоусыларға 6,28 миллион һумлыҡ штраф һалған, бөгөнгә уның 4,65 миллион һумы түләнгән. Граждандарға штраф күләме 1-2 мең һум, вазифалы кешеләргә - 5-10, ойошмаларға 20-30 мең һум тәшкил итә. Ҡағиҙәне икенсе тапҡыр боҙғанда штраф күләме лә ике тапҡырға арта.

✓Баш ҡалала киләсәктә трамвай юлдарын район хакимиәттәре ремонтлаясаҡ. Бының өсөн быйыл уҡ торгтар үткәрергә кәрәк буласаҡ. Быға тиклем Өфө властары юлдың уртаһынан үткән трамвай юлдарын юл ситенә күсереү ихтималлығы тураһында һүҙ алып бара ине. Белгестәр билдәләүенсә, федераль үҙәктән ярҙам булмаһа, Өфө трамвайының киләсәге сыуаҡ түгел. Был транспорт төрөнөң 90 проценты иҫкергән, системаны модернизациялау өсөн 12 миллиард һум талап ителә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# "ТЫҒЫН"ДАР БӨТӨР ӘЛЕ...



**Өфө ҡалаһы эргәһендә йәки ҡаланың ситендә йәшәгән халыҡ өсөн иң ҡыйыны нимә, беләһегеҙме? Эйе, эштән һуң өйгә ҡайтыуы. Сөнки тап ошо ваҡытта юлдарҙа "тығын"дар барлыҡҡа килә, уларҙы көйләргә ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре сығып баҫһа иһә хәрәкәт бөтөнләй тиерлек туҡталғандай була.**

Әле бына "Дуҫлыҡ монументы" туҡталышы районында яңы ер аҫты үткәүеле төҙөлөшө күңелгә өмөт осҡоно һала, тимәк, бында светофорға туҡтап, йәйәүлеләр ҡасан юл аша сығып бөтә инде,тип көтөп тораһы түгел. Шулай уҡ йәйәүлеләр өсөн дә хәүефһеҙерәк буласаҡ, ни тиһәң дә, киң юлдан ҡыҫҡа ғына ваҡытта ашыға-ҡолай сыҡҡансы, ер аҫты үткәүеленән яйлап, иркенләп, тыныс ҡына сығырға мөмкин буласаҡ.

Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа ҡала властары күперҙәр төҙөүгә һәм юл селелештәрен эшләүгә ҙур иғтибар бирә. Уларҙың иң күләмлеһе булып Ағиҙел йылғаһы аша һалынған Затон күпере, Бөрө трактының тимер юлдар менән киҫелешендәге транспорт сиселеше, Ағиҙел йылғаһы аша һалынған иҫке күперҙе реконструкциялау, Воровский урамындағы ер аҫты үткәүелен капиталь ремонтлау тора.

Шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы аша аэропорт йүнәлешендә яңы күпер төҙөлөшө лә юл хәрәкәте мәсьәләһе хәл ителеренә өмөтләндерә. Ни тиһәң дә, Өфө йылдан-йыл үҫә, матурлана, уның даны алыҫтарға тарала, ылыҡтырыу ҡеүәте үҫә, туристик, иҡтисади бәйләнештәр арта. Яңы күперҙе ике яҡтан һаҡлап тороусы иҫке күперҙәр аша тәүлегенә 125 мең самаһы автомобиль үтеүен уйлап ҡараһаң да иҫең китерлек. Һәм был һан бит йыл һайын үҫеү яғына бара.

Яҡын киләсәктә Интернациональ урамынан Ағиҙел йылғаһы аша күпер һәм Нуғай ҡасабаһы эргәһендә тимер юл өҫтөнән юл эшләү, Зәки Вәлиди һәм Салауат Юлаев проспекты киҫелешендә юл сиселешен реконструкциялау, Галле округы, Воровский урамы, Шаҡша ҡасабаһы эргәһендә автомобиль күперҙәрен ремонтлау күҙаллана. Шулай уҡ Кузнецов затоны районында Ағиҙел йылғаһы аша күпер эшләү буйынса проект алды эштәре башҡарыла. Бынан тыш, баш ҡаланың Генераль планына ярашлы, Дим районынан баш ҡаланың төньяҡ өлөшөнә тура сығыу юлы һалыу буйынса ла хәбәрҙәр күренеп ҡала. Әгәр ошо эштәр барыһы ла тормошҡа ашырылһа, бәлки, тиҙҙән, Өфөлә "тығындар" булмаҫ һәм ҡала ситендә, уның эргәһендәге ауылдарҙа йәшәүселәр ҙә сәғәттәр буйы "тығындар"ҙа ултырып ыҙаламаҫ.

**Сабит ҒӘЛИӘХМӘТОВ.**

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ЮЛДАР, ПАРКТАР...

✓ **Өфөлә консоль төрөндәге светофорҙар ҡуйыу дауам итә.** Улар юл билдәләрен, хәрәкәтте күрһәтә, шулай уҡ йүнәлеште яҡтыртҡан махсус лампалар менән йыһазландырылған. Уҡыу йылы башланыр алдынан шундай 17 светофор ҡаланың көньяҡ өлөшөндәге белем биреү усаҡтары эргәһенә ҡуйылған. Бөгөн был эш төньяҡ өлөштә дауам итә.

✓ **Мегаполиста юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса ҙур эш башҡарылған.** Юлға һалынған билдәләрҙең 90 проценты термопластиктан, шулай уҡ 3 меңдән ашыу юл билдәһе яңыртылған һәм ҡуйылған. Балаларға белем биреү учреждениелары эргәһендә барлығы 13 мең метр арауыҡ тәпәш ҡоймалар менән кәртәләп алынған. Консоль терәүҙәрҙәге яңы светофорҙар ҡуйылған урындарҙа авариялар күләме кәмеүе күҙәтелгән. Йыл һуңына тиклем 60 көйләнмәгән йәйәүлеләр үткәүеле модернизацияланыуы көтөлә.

✓ **"Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты сиктәрендә быйыл ремонтланырға тейеш 22 урам-юл селтәре участкаһында эштәр тулыһынса тамамланыу алдында.** Барлығы 20,85 километр юл яңыртылған, техник һыҙаттар йыһазландырылған, борт таштары ҡуйылған, кәрәк урында тротуарҙар ремонтланған. Әлеге ваҡытта Мостай Кәрим, Галле ҡалаһы исемендәге урамдарҙа ремонт эштәре дауам итә, 8 Март урамы, Комсомол, Валерий Лесунов урамдары һәм Баландин бульвары реконструкциялана.

✓ **"Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркын реконструкциялау барышында махсус рәүештә эттәрҙе йөрөтөү майҙансығы йыһазландырыла.** Унда шулай уҡ эттәрҙе дрессировкалау күнекмәләре үткәрергә лә мөмкин. Территория бейек тимер ҡойма менән уратылған һәм уға инеү урыны айырым. Йәғни, йорт хайуандарын хәҙер бөтә ерҙә лә иркен йөрөтөү мөмкин булмаясаҡ. Махсус урынға тиклем уны хужаһы морондоҡта һәм муйынсаҡта алып килә. Киң күләмле саралар үткәрелгәндә эттәрҙе йәмәғәт урынына алып сығыу тыйыла. Йәмәғәт тәртибен боҙған өсөн уның хужаһы административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуы мөмкин.

✓ **Республика властары Өфөнән ситтә зоопарк төҙөү планынан баш тартты. Сәбәбе - баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн уңайһыҙ булыуы. Объект ҡала эсендә төҙөлә, тип хәбәр итте Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров.** "Фекер алышыу барышында зоопаркты ҡала эсендә төҙөү яҡшыраҡ булыр, тигән һығымтаға килдек. Ҡалала йәшәүселәргә лә, Өфөгә ҡунаҡҡа килгәндәргә лә барып етеү еңелерәк булыр. Иң мөһиме, бындай проектты ике-өс йылда тормошҡа ашырырға мөмкин", - тине Назаров. Тәүҙә зоопаркты Өфө агломерацияһында урынлаштырыу планлаштырылғайны, инфраструктура ҡатмарлыҡтары арҡаһында уны төҙөү өсөн 10-15 йыл кәрәк булыр ине. Уның фекеренсә, ҡала эсендәге зоопаркты ике-өс йылда бойомға ашырырға була. Урынды киләһе аҙнала уҡ һайлайҙар, тип хәбәр итте Андрей Назаров.

БАШ ҠАЛАМ



# ҮҘ АРТЫҢДАН ЙЫЙ!

**Ҡаланың үҙ ғәҙәттәре һәм үҙ ҡағиҙәләре, унда йәшәүселәр, һинең территорияң фатир ишеген ябып сығыу менән тамамлана, тип иҫәпләй. Һәр хәлдә, бығаса ошолай тип уйлай инек. Хәҙер инде яйлап үҙебеҙ йәшәгән күп фатирлы йорттарҙың дөйөм ҡулланылыштағы территорияһы ла ошонда йәшәгән кешеләрҙең дөйөм милеге икәненә өйрәнә башланыҡ, шикелле. Быға, әлбиттә, баш ҡалала төрлө проекттарға ярашлы алып барылған төҙөкләндеү эштәре лә йоғонто яһамай ҡалмай.**

Иғтибар итһәгеҙ, һуңғы йылдарҙа баш ҡала ғына түгел, ә ихаталар ҙа күҙгә күренеп үҙгәрә, зауыҡлана. Былтыр ғына Өфөлә "Башҡорт ихаталары" программаһына ярашлы, 155 күп фатирлы йорттоң 89 ихатаһында комплекслы төҙөкләндереү эштәре башҡарылған икән! Быйыл да был һан шул сама булалыр, моғайын. Кем өсөндәр был һандар бер нәмә тураһында ла һөйләмәһә лә, ошо ихаталарҙа йәшәүселәр өсөн ҙур ҡыуаныс һәм яңы кимәл күрһәткесе. Ошо һандар артында яңы балалар майҙансыҡтары, спорт менән шөғөлләнеү өсөн йыһазландырылған махсус майҙандар, асфальт юлдар, территорияны йәшелләндереү, хәүефһеҙлек маҡсатында яҡтылыҡ менән тәьмин итеү, видеокүҙәтеү, эскәмйәләр һәм башҡа йыһаздар ҡуйыу тора. Ә инде төҙөкләндереү эштәре башланыр алдынан халыҡтың фекерен белешеү, эштәрҙе башҡарыусыларҙың һөҙөмтәһен контроллэп тороу мөмкинлеге булыуы ла үҙенде ошо территория хужаһы итеп тойорға мәжбүр итә һәм яуаплылыҡ өҫтәй. Элек, мәҫәлән, транспорт хужалары "тимер аттарын" ҡайҙа уңайлы - шунда "туғарһа", хәҙер махсус парковка урындары бар. Бығаса подъезд алдына сығып, ял зонаһы шундағы эскәмйәләр менән сикләнһә, хәҙер төҙөкләндереү эштәре башланыр алдынан уҡ ял зоналарын булдырыу тураһында килешергә мөмкин. Шулай уҡ газондар булдырыу, йорт алдарына сәскәләр ултыртыу кеүек матур күренештәр ҙә тергеҙелде.

Әлбиттә, бындай киң ҡоласлы төҙөкләндереү эштәре бер нисә йылға бер тапҡыр ғына башҡарылғаны көн кеүек асыҡ. Шуға күрә, булғандың ҡәҙерен белергә, уны һаҡларға, йәшәгән территориябыҙҙа яҡшыраҡ, уңайлыраҡ һәм матурыраҡ булһын өсөн үҙебеҙ ҙә көн дә ниндәйҙер матур эштәр башҡарырға тейешбеҙ. Улар балалар майҙансығында уйнаған бәләкәй балаларға, спорт менән шөғөлләнгән үҫмерҙәргә үҙ территориянды таҙа тотоу, сүпләмәү, сүп-маҙар күренһә, уны йыйып, махсус урналарға алып барып һалыу, үҫентеләрҙе һәм сәсәкәләрҙе тәрбиәләп тороу, милеккә һаҡсыл ҡараш кеүек ябай ғәмәлдәр булыуы ла мөмкин. Матурлыҡта йәшәргә теләйбеҙ икән, уны һаҡларға ла өйрәнәйек һәм үҫеп килеүсе быуынды ла үҙебеҙҙең өлгөлә шулай тәрбиәләйек, тиер инем.

**Әлфиә ШӨҒӘЙЕПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бәүел юлына таш ултырғанда

Бәүел юлына ултырған ташты бөтөрөү өсөн 1 кг ҙур, һутлы башлы һуған алып, таҙартырға һәм ит турағыста ваҡларға. Шуға 400 г шәкәр ҡушып, тулыһынса иҙелгәнсе болғарға. Шунан килеп сыҡҡан ҡатышманы иң талғын утта 2 сәғәт ҡайнатырға, даими болғатып торорға. 500 мл тирәһе сироп килеп сығырға тейеш. Уны һөҙөп, банкаға ҡойоп алырға һәм һыуытҡыста һаҡларға. Был рәүешле әҙерләнгән дауаны ҡулланыу өсөн икенсе көндән башлап сәғәт көндөҙгө 8.00, 12.00, 16.00 һәм 20.00 булғанда 125-әр мл сироп эсергә. Ҡом һәм микролиттар 2-3 көндән бәүел менән бергә сыға башлай. Сәнсеп ауыртыуы бар, был норма. Һуған сиробын 1 айлыҡ интервал менән 2-3 тапҡыр эсеп дауаланырға кәрәк.

### Таш ҡабаҡ

Йөрәк ауырыуҙары, инфаркт хәүефе янағанда таш ҡабаҡ (кабачок) ярҙам итер. Таш ҡабаҡты һут һыҡҡыстан үткәреп, 1 литр һут эшләргә. Һутты көн дауамында эсеп бөтөргә. Төпрәһен ташламаҫҡа, унан ҡоймаҡ ҡойорға, бутҡаға ҡушып бешерергә була. Таш ҡабаҡ өлгөргән миҙгелдә бындай диета тотоу йөрәкте дауалауҙан тыш остеопорозды баҫа, үксәләге шпорҙарҙы бөтөрә.

### Ҡабаҡ

Бауыр шешкәндә ҡабаҡ ашарға һәм һутын эсергә кәрәк. Көнөнә ярты килограмм ҡабаҡты сей көйөнсә, һыуҙа йәки һыуһыҙ бешереп ашарға кәрәк. Ә ҡабаҡ һутын көнөнә ярты стаканға тиклем эсергә ярай.

### Үпкә шешеүе

Был сирҙән ҡотолоу өсөн 100 гр ниндәй ҙә булһа май (бурһыҡ йәки айыу майы булһа яҡшыраҡ), 100 гр аҡ май, 100 гр йүкә балы, 3 ҡалаҡ алоэ һуты (3 йыллыҡ үҫемлектән) кәрәк. Барыһын да бергә ҡушырға һәм сәғәт ярым быуҙа тоторға. Дауаны ашарҙан алда 1 стакан ҡайнатылған, йылы һөткә 1 ҡалаҡ ҡушып ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Шадринск өйәҙендә төшөрөлгән фотола бер төркөм ҡатын-ҡыҙ тирмәлә ҡыя шаҡмаҡ барлыҡҡа килтереп ҡушып тегелгән өсмөйөш ҡорамаларҙан торған шаршау фонында ултыра. Күрәһең, Урал аръяғының көнсығышында бындай әйберҙәр ғәҙәти булған. Ә инде беҙҙең заманда көнсығыш төбәктәренә 1997 йылғы комплекслы экспедиция барышында Оло Солтан тигән боронғо ауылда ҡыҙыл шаршау фотоға төшөрөлгән, уны ситтәре күк һәм ҡыҙғылт һары таҫмалар менән уратылған шул уҡ төҫтәге дүртмөйөштәр биҙәй. Ваҡ ҡына дүртмөйөштәрҙән ашъяулыҡтар тегелгән, уның менән тәпән, сәй һауыттары, яңы бешерелгән күмәс һәм икмәк өҫтөн ҡаплағандар. Музейҙарҙың борон тупланған коллекцияларында ҡораманан туй янсыҡтары һәм билбауҙары осрай.





*Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡорама һәм туҡыма һыҙаттарҙан тегелгән билбауҙары.*

Ҡорама сабыйҙарға кейем теккәндә айырыуса йыш ҡулланылған: ҙур булмаған юрған, яҫтыҡ, сәңгелдәк сымылдығы эшләнгән; баланы атта һыбай йөрөткәндә ҡулланылған туҙ бишеккә нығытып бәйләгәндә ҡулланылған тартҡы-таҫманың ҡап уртаһынан ҡорама орнамент буйынан-буйына эшләнгән. Ҡорама билбау ҡатындарҙың мәрйен һәм көмөштән эшләнгән селтәрҙәренә тегелгән. XIX быуатта был рәүешле биҙәлгән әйберҙәр кейемдәр араһында күберәк тә булғандыр. Ҡушъяулыҡ ситенә, ирҙәрҙең туй күлдәге иҙеүе һәм яғаһына өсмөйөштәрҙән торған таҫма рәүешендә тегелгән орнаменттар ҡораманы хәтерләтә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың байрамдарға кейгән аяҡ кейеменең туланан эшләнгән ҡуныстарына өсмөйөштәрҙән торған арка рәүешендәге аппликацион биҙәк һалынған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ИШАРА*

**Беҙ бөгөн генә түгел, ә һәр ваҡыт аралашыуға, һөйләшеүгә, күрешеүгә мохтажбыҙ. Бигерәк тә ниндәйҙер аҡыл, аң, идеялар, ижади һәм рухи күтәренкелек бирә алған кешеләр менән һөйләшеүҙәр танһыҡ беҙгә.**

# АРАЛАШЫП ЙӘШӘЙЕК!



Миҫал итеп әйткәндә, редакциябыҙ тап шундай урын. Ялдарҙа йәки әлеге коронавирус карантинында редакцияға бер-беребеҙ менән әңгәмәләшеүҙәрҙе, Гөлфиә Янбаева, Сәрүәр Сурина, Вәлиәхмәт Бәҙретдинов кеүек оло журналистарҙың фәһемле һәм берәй процесҡа этәргес көс бирә торған өрәңы фекерҙәрен һағынып киләбеҙ. Беҙҙә йыш ҡунаҡ авторҙарыбыҙ Әхмәр Үтәбай, Зәкирйән Әминев, Рәшит Шәкүр булһынмы, йәки һөйләшеү-диалогтарға саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙмы, һәр береһе менән һөйләшеү үҙе бер танһыҡты ҡандырған ваҡиға булып ҡала. Шул осрашыуҙарҙан, аралашыуҙарҙан ниндәйҙер орлоҡтар ҡалып, улар күңелдә бер ижади шәлкем тыуҙыра. Әгәр һөйләшеүҙәрҙән бер-береңде үҫтерeүгә, нимәгәлер өйрәтеүгә һәм ҡанатландырыуға, кәрәкле, мөһим, рухиәткә ятышлы әйҙәүгес, көйләүгес алаһың икән, бындай аралашыуҙар файҙаға ғына. Һәм беҙҙең "Киске Өфө" гәзите редакцияһы был йәһәттән үҙе бер тәрбиә, профессиональ үҫеш мәктәбе ул. Был - шулай!

Ошо уйымды быйыл Бөрйән районы ағинәйҙәре менән осрашҡандан һуң да нығыттым әле. Хеҙмәттәшем - драматург Сәрүәр Сурина менән гәзитебеҙгә яҙылыу хәлдәрен дә белешәйек, һуңғы ваҡытта ҡорама ҡорау буйынса әүҙемләшеп киткән ағинәйҙәрҙең ижад емештәрен дә күҙҙән үткәрәйек тип юлға сыҡҡайныҡ. Ғәҙәти ауыл тормошонда, йәйҙең "бала-саға-мал-тыуар" сиктәрендә генә булып киткән йәшәйешендә ҡайнап, үҙҙәрен дә онотоп ебәргән мәлдәрендә килеп төштөк апайҙар араһына. Район "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Рәшиҙә Ғиззәтуллинаның саҡырыуы буйынса беҙҙең менән осрашырға теләгән ҡатын-ҡыҙҙар бергә йыйылды ла, ҡырға сығып ултырып, сәй табындары ҡороп, күңелле генә итеп аралашып алдыҡ. Улар үҙҙәренә яҡын булған, үҙҙәрен борсоған һәм яуап табырға теләгән хәбәрҙәрен беҙҙең менән уртаҡлашты. Айырым һүҙ алып һөйләп өйрәнмәгән, бәлки, уйҙарын да асып һалыуға күнекмәгән, бәлки, кемдәрҙәндер һүҙ ярҙамы көтөп йөрөгән, бәлки, аралашыуға һыуһаған да булғандыр бәғзеләр, кем белә, һәр хәлдә, иҫ киткес матур уйҙар, тәҡдимдәр, теләктәр ишеттерҙе улар. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының йәшәйеше, шул йәшәйештә үҙеңде табыу, көнкүреш проблемалары араһында юғалып ҡалмау, үҙеңде башҡаларға һәм донъяны үҙеңә ҡыҙыҡлы итеү мөмкинлектәре тураһында һәм тағы ла бик күп башҡа темаларға әңгәмә ҡорҙоҡ.

Ғәҙәттә, ҡоҙоҡ юлында йә көтөү ҡаршылағанда ошолар хаҡында һөйләшеп тора алмайһың бит. Ябай, ваҡ, эшләнелә лә онотола торған усаҡ-ҡаҙан араһы, күрше-күлән кимәле эшкөшө, хәл-торошо ғына йөрөй телдә. Ә бында һәр кемдең эске донъяһында булған һәм айырым осраҡтарҙы көтөп ятҡан юғары, дәрәжәле, рухиәт кимәлендәге әңгәмәләр ҡоролдо. Мәҫәлән, әле яңы ғына РФ Дәүләт Думаһында ҡаралған закон проекты тураһында ла һүҙ ҡуҙғаттыҡ. Ғаиләлә йәберләнеүселәрҙең һәм шул хәлгә күнеп йәшәүселәрҙең ҙур өлөшө ҡатын-ҡыҙҙар икәне берәүгә лә сер түгел. Бөрйән ҡатын-ҡыҙҙары ошо өлкәне үҙенсәлекле һәм үтә лә тәбиғи юҫығында, хатта үҙ миҫалдарында аңлатты. Ҡатын-ҡыҙҙың ирҙәр янында ғүмер итеү асылының фәлсәфәүи һәм шул ваҡытта ябай ҙа ғына булған төпкөлдәрен ғәҙәти генә итеп һүрәтләп бирә белде улар (был үҙе айырым тема). Был бәлә һалыу ҙа, кемделер ғәйепләү ҙә, аҡланыу ҙа булманы, ә асылыу рәүешендәге, хатта уйынлы-ысынлы ысынбарлыҡ ине.

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡул эштәре лә ситтә ҡалманы. Райондың даны булып киткән ҡорамалар, сергетыштар уртаға түшәп һалынып, шуларҙың өҫтөнә ултырышып, был шөғөлгә йәлеп ителгәндән алып ауылдарҙа күпме хужабикәләрҙең оҫтабикә булып танылып өлгөрөүҙәре тураһында һөйләнеләр. Бығаса кәртә-ҡураһы араһында ғына йөрөгән килендәр, хөкүмәт хеҙмәтенән бушамаған ҡатындар, пенсиялағы инәйҙәр ҡорамалар ҡорау һәм ошо юҫыҡта аралашыу арҡаһында бер-береһен яңы яҡтан асҡан һәм, иң мөһиме, ҡыҙыҡһыныулы, зауыҡлы, егәрле, һәр береһе үҙенсәлекле булған эске донъяларын күрһәтә алған. Ошоларҙы ла матур итеп бәйән итте улар. Был да ҡатын-ҡыҙҙың үҙе хаҡында һөйләргә, теләктәре, хыялдары, кисерештәре тураһында әйтергә өйрәнеүенә бер миҫал булды.

Элек яҙыусылар йыш ҡына халыҡ араһына сыға, осрашыуҙар үткәрә ине. Бөгөн ундай хәлдәр бик һирәк. Һәм, халыҡ китап-гәзит уҡымай, яҙыусыларға мохтаж түгел, башҡалар фекеренә ҡолаҡ һалмай, тигән хәбәрҙәр һөйләнгәндә лә, был осрашыуҙарға сығып киткәнебеҙгә үкенмәнек. Сөнки ҡатын-ҡыҙҙың матур аралашыуға һыуһаған, ихлас һөйләшеүгә тулышҡан икәнен үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек. Яҙыу - бер, уҡыу - икенсе, ә күрешеп һөйләшеп ултырыу ул бөтөнләй башҡа, иң яҡын һәм ҡәҙерле мәлдәр икән. Аралашып йәшәйек...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ*

# ТАРИХҠА ҠЫҘЫҠҺЫНЫУ АША...



**Мин - ҡала ҡыҙы, Мәләүездә тыуып-үҫтем, алдынғы гимназияларҙың береһендә уҡыным, белем алдым. Мәктәптә уҡығанда ла, әле юғары уҡыу йортонда ла тиҫтерҙәрем араһында төрлө милләт вәкилдәре булды һәм бар. Әммә мин үҙемдең башҡорт булыуым менән һәр ваҡыт ғорурландым.**

Аралашыу мөхитемдә, йәшермәйем,башлыса урыҫ телендә һөйләшәләр. Шулай булһа ла, мин мөмкинлек тыуған һайын башҡортса һөйләшергә тырышам. Туған телгә һөйөү ғаиләлә һалына тигәндәре бик тә дөрөҫ. Башҡортса һөйләшергә лә тап үҙемдең яҡындарымдан, әсәйем-атайымдан өйрәндем. Башҡорт телендә китаптар уҡыу әлегә ауырыраҡ бирелә. Дөрөҫөрәге, уҡыуын шыма уҡыйым, әммә бик үк аңлап етмәйем. Шулай ҙа ваҡыт табып, аңлаһам-аңламаһам да ҡысҡырып уҡырға тырышам. Был минең телемде шымартып ҡына ҡалманы, әҫәрҙең мәғәнәһе башыма тиҙерәк барып етеүен абайланым. Хәҙер, төбөнә төшөп үк етмәһәм дә, туған телемдә шиғырҙар ҙа уҡый башланым. Ошо шөғөлөм миңә оҡшағандан-оҡшай бара.

Ни өсөн башҡортса һөйләшергә, уҡырға ныҡлы тотондом тип уйлайһығыҙмы? Халҡыбыҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынып, ер-һыуын, телен һаҡлап ҡалыр өсөн атай-олатайҙарыбыҙҙың нисәмә тапҡыр ихтилалға күтәрелгәнен белгәс, ныҡлы уйландым. Еңел генә үҙ телебеҙҙән баш тартырға хоҡуғыбыҙ бармы беҙҙең. Юҡ! Туған телен киләсәккә, беҙгә килтереп еткерер өсөн күпме ҡан ҡойолған. Мин артабан да, ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, эргәмдәге кешеләр кем генә булмаһын, башҡортса һөйләшәсәкмен. Балаларым да башҡортса һөйләшәсәк!

**Әҙилә ШӘРИПОВА,**
**Өфө дәүләт авиация техник университетының 1-се курс студенты.**

✓ *Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында Гәрәй ырыуы башҡорттарының аҫаба биләмәләре йәйрәп ята. Был ерҙәрҙең байтаҡ өлөшө хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районында урынлашҡан ауыл биләмәләренә ҡарай.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ТӘРӘН ТАМЫРЛЫ БАШҠОРТБОҘ - ГӘРӘЙ БУЛА ЫРЫУЫБЫҘ



Башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң рәсми документтарҙа Гәрәй олоҫо ла телгә алына башлай. Ул артабан икегә бүленеп, Ил-Гәрәй һәм Урман-Гәрәй олоҫтарын барлыҡҡа килтерә. 1728 йылда 4 башҡорт даруғаһынан Петр II исеменә ебәрелгән челобитнаяға тамғаларын ҡуйған башҡорт юлбашсылары араһында Гәрәй олоҫонан Мөҙәй Илмәтов тигән кеше лә була: "Уфимского уезду Казанской дороги дер.Ялан (т.е. Елан) Яркай свой знак приложил, дер. Чанай (т.е. Еней) Апас мулла руку приложил..., дер. Киргиз МяскавТапиев сынсвой знак приложил, дер. Гирей Мудай Илмитов сын свой знак приложил". Ошо уҡ йылда төҙөлгән икенсе бер документта Гәрәй олоҫоноң Урман-Гәрәй ауылы башҡорто Килмәмәт Байғазин телгә алына. Үҙ ырыуҙаштарынан айырылып киткән гәрәй башҡорттарының бер өлөшө Ҡыпсаҡ олоҫонда Гәрәй-Ҡыпсаҡ аймағын хасил итә.

Ил-Гәрәй аймағы ерҙәре Ағиҙел йылғаһының түбәнге тарафында булһа ("по Белой реке, по обе стороны леса и степи"), Гәрәй-Ҡыпсаҡ биләмәләре хаҡында бер тарихи сығанаҡта "за Гирейскими горами", тип әйтелә. Бында, күрәһең, һүҙ Көньяҡ Уралдың хәҙерге Ишембай районы территорияһы буйлап һуҙылған Алатау һәм Ҡалу һырттары хаҡында бара.

XVII-XVIII быуаттарҙа берәһе артынан икенсеһе тоҡанып торған башҡорт ихтилалдарында Гәрәй олоҫо һәр саҡта ла ваҡиғалар үҙәгендә була. Батша хөкүмәте, башҡорттар ихтилалға күтәрелмәһен өсөн, уларҙың иң күренекле шәхестәрен аманатлыҡҡа ала башлай. Мәҫәлән, 1662-1664 йылдарҙағы ихтилал осоронда байтаҡ ҡына тархан һәм старшиналар аманат итеп тотола, улар араһында, тарихи документта теркәлгәнсә, Гәрәй олоҫо старшинаһы ла була: "Гирейской волости деревни Биртюковы Кутлугушко Биртюков". Пугачев бунты барышында Ҡазан зинданында Ҡазан даруғаһынан аманат итеп алынған 11 старшина араһында Гәрәй олоҫо старшинаһы Аҙнағол Мутин дә була.

1869 йылда, төрки телендәге ҡулъяҙманан алынып нәшер ителгән бер документҡа, 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал осоронда Килмәк абыз Нурушев етәкселегендәге берләштерелгән башҡорт ғәскәре составында яуҙарҙа ҡатнашҡан башҡорт ырыуҙары вәкилдәре хаҡында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Были тут из Букатин, Кипчаков, Тамъянцев, Бурджана, Пчкака, Урана, Киршина,Кури, Кубави, Карайцев, Шурана, три группы от киргизцев, четыре группы от Елана и другие".

Гәрәй ырыуының иң билдәле тарихи шәхестәре араһында иң элгәре Мутин фамилияһын йөрөткән инсандарҙы айырып әйтергә була. Улар сығышы менән хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районы Такталасыҡ ауылына ҡарай. Был арҙаҡлы нәҫел башында 1743 йылға ҡараған документта теркәлгән Гәрәй олоҫо старшинаһы Мута Йәнырысов тора. Уның улы Тимер Мутин үҙ заманының билдәле хәрби эшмәкәре булып, тотош башҡорт йәмғиәте кимәлендә оло абруй ҡаҙана. Рәсәй 1756-1763 йылдарҙа алып барған Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнаша, Ҡара Табын олоҫо старшинаһы, биш йөҙ яугирҙан торған полк командиры Ҡыҙрас Муллаҡаевтың ярҙамсыһы вазифаһын башҡара. 1757 йылдың 19 августында башҡорт яугирҙары, ғәскәри казактар, ҡалмыҡтар, мишәрҙәр менән бергә, артабан Европала киң билдәле булып, һуғыштар тарихына ингән Гросс-Егерсдорф эргәһендәге яуҙа батырлыҡ күрһәтә. Пруссия короле Фридрих II армияһы еңелеүгә дусар була. Башҡорт командирҙарынан Ҡыҙрас Муллаҡаев һәм Тимер Мутин хәрби хеҙмәттәре өсөн юғары наградаға лайыҡ була. Дәүләт Хәрби коллегияһының 1759 йылдың 7 ноябрендәге указында ошолай тип яҙылған: "Овыданных в награждение Казанской дороги Гарейской волости башкирскому старшине Темиру Мутину за оказанные им во время башкирского замешания верности и в бытность в 757-м году на прусской баталии ревностные службы в знак высочайшей к нему милости противу бывшего на оной баталии башкирского старшины Кедряся Муллакаева на саблю деньгах 50 руб."

Ошонан һуң теүәл 100 йыл үтеүгә, 1858 йылда, башҡорттарҙан Дрезден музейы өсөн уларҙың көнкүреш әйберҙәрен һәм милли кейемдәрен һатып алыу менән шөғөлләнгән Рус император географик йәмғиәтенә ебәрелгән хатында Башҡорт ғәскәре командующийы, полковник фон Рейтерн ошолай тип яҙған: "...у отставного хорунжего Абдулбасыра Мутина есть сабля, пожалованная в 1759 г. императрицею Елизаветою Петровною, предку Мутиных в чине полковника, но владельцы продать эту саблюне соглашаются".

1859 йылда Санкт-Петербургҡа императрица Елизавета Петровнаға тоғролоҡ белдереү өсөн башҡорт делегацияһы килә. Бында үҙ сюзеренын таныу маҡсатында ант биреү процедураһына саҡырылған, билдәле кимәлдә үҙаллылыҡҡа эйә булған ил вәкилдәренә генә бирелә торған хоҡуҡ хаҡында һүҙ бара. Был ул замандың оло привилегияһы итеп ҡаралған. Батша ғали йәнәптәре менән шәхси аудиенцияға килә алған башҡорттар уға үҙҙәренең үтенестәрен туранан-тура тапшыра алған. Бына ошо уңай менән файҙаланып, Тимер Мутин иптәштәре менән императрицаға, элекке батшалар тарафынан бирелгән хоҡуҡтарға таянып, аҫаба башҡорт ерҙәрен хоҡуҡһыҙ үҙләштереүҙе тыйыу, ер һатыу акттарын олоҫтоң барса башҡорттары ризалығы менән генә ҡанунлаштырыу хаҡында прошение бирә. Башҡорттарҙың был мөрәжәғәте яуапһыҙ ҡалмай. Ошо йылдың 29 сентябрендә Сенат тарафынан Ырымбур губерна канцелярияһына ебәрелгән указда башҡорт ер эштәрен хоҡуҡҡа ярашлы көйләү талап ителә: "...впредь оному башкирскому народу никому никаких обид и разорений не чинить и в угодьях их насильством не селиться".

1767 йылда батшабикә Екатерина II яңы законлар индереү маҡсатында Уложенный комиссия саҡырыу хаҡында белдерә. Өфө провинцияһы депутаты, Ғәйнә олоҫо старшинаһы Туктамыш Ишбулатовҡа халыҡ наказдарын тапшырыу өсөн һәр олоҫтан өйәҙ поверенныйҙары һайлана. Улар иҫәбендә Ил-Гәрәй олоҫонан Хәлил Иштерәков, Мәксүт Шәрипов, Юртый Йәнгилдин, Урман-Гәрәйҙәрҙән - мулла Әхмәр Ҡарашаев, Гәрәй-Ҡыпсаҡтарҙан - Байрамғол Йомағужин була.

Емельян Пугачев етәкселегендәге бунт башланғас, Уса даруғаһының провинция канцелярияһы тарафынан 700 башҡорт кешеһе мобилизация буйынса ғәскәри хеҙмәткә саҡырылып, Урман-Гәрәй олоҫоноң поход старшинаһы, Шүлгән ауылы башҡорто Йомаҡай Аҫҡаров етәкселегендә походҡа ебәрелә. Әммә башҡорттар ихтилалсылар яғына сығып, Уса даруғаһында баш күтәреүселәр власын урынлаштыра. 1774 йылдың май айында Йомаҡай Аҫҡаров етәкселегендә хәрәкәт иткән 1000-дән ашыу ихтилалсы Бөрө ҡалаһына һөжүм итә. Бер аҙҙан улар, Салауат Юлаев ебәргән ярҙамсы көстәр менән берләшеп, Бөрө ҡалаһын баҫып ала, ә хөкүмәт ғәскәрҙәре отряды менән етәкселек иткән секунд-майор Отто фон Дуве ҡаланы ташлап ҡасырға мәжбүр була. Дөйөм алғанда, Урман-Гәрәй олоҫонан Йомаҡай Аҫҡаров етәкселегендә 196 йорт, Ил-Гәрәй олоҫонан Аҙнағол Тимеров командаһында 181 йорт, Абдулла Сәйетов командаһында 134 йорт, шулай уҡ Гәрәй-Ҡыпсаҡ олоҫонан Арыҫланбәк Мәкшиғолов етәкселегендә 108 йорт башҡорттары ошо ихтилалда бик әүҙем ҡатнаша.

Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында, Ағиҙел йылғаһының түбәнге ағымы буйлап, Гәрәй ырыуы башҡорттарының аҫаба биләмәләре йәйрәп ята. Был ерҙәрҙең байтаҡ өлөшө хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районының үҙәк һәм төньяҡ өлөшөндә урынлашҡан ауыл биләмәләренә ҡарай. Шулай уҡ Башҡортостандың Краснокама районы башҡорттарының күпселеге гәрәй башҡорттары нигеҙ һалған ауылдарҙа көн итә. Краснокама районы менән сиктәш Илеш һәм Ҡалтасы райондары ауылдарында ла гәрәй ырыуы башҡорттары вариҫтары йәшәй. Варза һәм Гәрәй йылғалары буйында, хәҙерге Яңауыл һәм Тәтешле райондары сигендә урынлашҡан 20 ауылға шулай уҡ гәрәй ырыуы башҡорттары нигеҙ һалған. Илеш районында: Хажы, Иҫке һәм Яңы Бейектау, Медведево (Иҫке Айыу), Теләкәй ауылдары. Краснокама районында: Яңы Балтас, Иҫке һәм Яңы Уразай, Яңы Суғанаҡ, Ҡуян, Иҫке һәм Яңы Бөртөк, Иҫке Атҡул, Ҡыҙғау, Иҫке һәм Яңы Ҡабан, Иҫке һәм Яңы Ҡайынлыҡ, Аңғыҙнарат, Иҫке һәм Яңы Нуғай, Иҫке Әшит, Барьяҙыбаш, Яңы Хажы, Түбәнге Такталасыҡ, Яңы Аҡтанышбаш, Яңы Мерәҫ, Яңы Мошты ауылдары. Ҡалтасы районында: Яңы Гәрәй, Яңы Әшит, Шәрип, Яңы Бурһыҡ, Буралы, Яңы Атҡул, Илсебай ауылдары. Яңауыл районында: Асауҙыбаш, Иҫке һәм Яңы Алдар, Сибәҙе, Юсыҡ, Үрге һәм Түбәнге Сат, Тау, Салих, Урал, Йөгәмеш, Ямаҙы ауылдары. Тәтешле районында: Иҫке Аҡбулат, Түбәнге Ҡоҙаш, Асыуйылға, Борғынбаш, Күрҙем, Сараштыбаш, Ҡашҡаҡ, Шишмә, Шүлгән ауылдары. Татарстан Республикаһының Аҡтаныш районында: Әжәкүл, Аҡтанышбаш, Балтас (Такталасыҡ һәм Әжәкүл түбәләренең бер үк исемле ауылдары), Бурһыҡ, Үрге һәм Түбәнге Гәрәй, Иҫке һәм Яңы Жиеш, Илсебай, Ирмәш, Ҡуян, Мерәс, Такталасыҡ, Теләкәй (Такталасыҡ һәм Әжәкүл түбәләренең бер үк исемле 2 ауылы), Уразай, Шәрип, Ямалы ауылдары.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 39-42-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

Алғы һыҙыҡты тикшереп йөрөгәндә беҙ йыш ҡына яугирҙар ҡулында ҙур булмаған форматтағы гәзит булыуын күрә инек. Мин уның менән ҡыҙыҡһынып киттем, әммә, ҡыҙғаныска күрә, уҡый алманым: гәзит башҡорт телендә ине. Ул "Ҡыҙыл атлылар" ("Красные конники"), тип атала һәм яугирҙар араһында ҙур популярлыҡ менән файҙалана ине.

Бер аҙҙан мин был гәзиттең редакторы, яҙыусы Али Карнай менән таныштым. Беҙ дуҫтарса әңгәмәләшеп киттек. Али Карнай күберәк һорауҙар бирҙе һәм үҙенең блокнотына яҙғылап барҙы. Ул шундай блокноты менән йыш ҡына окоптар буйлап йөрөп, яугир һәм офицерҙарҙың һөйләгәндәрен тыңланы, материалдар йыйҙы.

1943 йылдың яҙында Али Карнайҙың ғүмере трагик рәүештә өҙөлдө. Ошо талантлы яҙыусы һәм журналист, аҡыллы һәм иғтибарлы иптәш бик йәл булды беҙгә...

Дивизияның алғы һыҙығын ентекләп тикшергәс, инженер ҡоролмаларында етешһеҙлектәрҙең күп булыуына инандым... Инженер ҡоролмалары системаһындағы бөтә был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү барса личный составтан ҙур һәм көсөргәнешле эштәр башҡарыуҙы талап итте.

Һалдаттар һәм офицерҙар минең иҫкәрмәләремде иғтибар менән тыңланы һәм етешһеҙлектәрҙән булдыҡлылыҡ менән арынды. Иптәштәрсә берҙәмлек, бер-беренә ярҙамсыллыҡ көсө, бирелгән һәр хәрби приказды үтәргә әҙер булыу тойола ине.

Нисек ашаталар, дөгүәләр юкмы, ҡасан сәй килтерәләр, тигән һорауҙарыма һалдаттар, ҡағыҙҙа буларак, былай яуаплай ине:

- Бөтәһе лә яҡшы, иптәш полковник, тик оборонала оҙаҡ ултырырға теләк юҡ!

Талымһыҙлыҡ, фронт тормошоноң барса ауырлыҡтарын һәм мохтажлыҡтарын кисерә алыу, фиҙаҡәрлеккә әҙер булыу - был башҡорт яугирҙарын ҡылыҡһырлаған дөйөм сифат.

Әммә, окоптарҙа ултырыу нисек кенә йән көйҙөргөс булмаһын, Башҡортостан атлыларына яулап алынған рубежда оҙаҡ ҡына оборонаны ныҡытырға, башҡа дивизиялар менән берлектә, ул саҡта ҡаты алыштар барған Воронеж янына дошман тере көстәрен һәм техникаһын алып китмәһен өсөн, йыш ҡына һөжүм итеү алыштарын алып барырға тура килде.

Һәр соединение алып барған һуғыш хәрәкәттәренең уңышы хәрби техниканан, дошмандыҡына ҡарағанда өҫтөнлөклө ҡоралдан, һалдат һәм офицерҙарҙың юғары дисциплиналы һәм күнекмәле булыуынан, штабтарҙың әҙерлеклегенән һәм барса яугирҙарҙың аң кимәленән тора. Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары юғары кимәлдәге аңлылыҡ күрһәтә алды. Улар Ватандары, үҙҙәрен фронтта оҙатҡан тыуған халҡы алдында яуаплылыктарын тулыһынса аңлай ине.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Әгәр әсәләргә тейешле шарттар тыуҙырылһа, бер ҡатын да бер бала йәки бөтөнләй балаһыҙ ҡалыуҙы хуп күрмәҫ ине. Рәсәйҙәге бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың 45 проценты бала табырға әҙер түгел.**



# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ... БӨЙӨКТӘРҘЕҢ ҡатын-ҡыҙҙың да

**Башҡортостандан ситтә йәшәгән, әммә ғүмерен башҡорт мәҙәниәтен, әҙәбиәтен үҫтереүгә бағышлаған шағирә ул Фирҙәүес БӘШИРОВА. Уның шиғырҙарындағы илһам, хислелек, туған тәбиғәткә оло һөйөү башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас булған баҫалҡылыҡ, иплелек һәм фәлсәфә менән бергә үрелгән. Һәм әңгәмәбеҙ ҙә ана шул йәшәйеш, хеҙмәт һәм рухи ҡиммәттәр хаҡында булды.**

**Фирҙәүес апай, башҡорт халкы һәләтле ҡатын-ҡыҙҙарға бай, тип әйтмәксемен. Һеҙ шуларҙың береһе. Әммә һәләтле булыу әле тәбиғәттән һалынғанды өҫкә сығарыу, һәләтте үҫтерә һәм ҡуллана алыу тигәнде аңлатмай. Ир-ат халҡының мөмкинлектәре күберәк, ә ҡатын кеше, күп осраҡта, һәләтен беренсе, икенсе, хатта өсөнсө урынға ла ҡуя алмай һәм ана шул тормошҡа ашмаған хыял менән йәшәп ҡартая... Нисек ошондай хәлгә ҡалмаҫҡа ҡатын-ҡыҙға?**

- Мин ир-ат халҡының мөмкинлектәре ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда күберәк тип әйтмәҫ инем. Шиғри күңелле күпме егеттәр һуңғы йылдарҙа шиғриәт донъяһынан ситтәрәк йөрөй кеүек - әҙәбиәт өлкәһенә килеүсе егеттәр һаны кәмегәндән-кәмей бит. Бөгөн уларҙың күбеһе шиғриәтте беренсе лә, икенсе лә урынға ҡуймай, сөнки шиғыр менән арлы-бирле тамаҡ туйҙырыу ғаиләнең бөгөнгө көн талаптарына яуап бирмәй.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тормошҡа ҡарашы ир-егеттәрҙекенән күпкә башҡараҡ. Уларҙа һиҙемләү, инстинкт көслөрәк, рухи донъяһы байыраҡ, шулай ҙа ир заттарына ҡарағанда тормош тәғәйенләнешенән аҙыраҡ алыҫлашҡандар, тип уйлайым. Уларҙа ир-егеттәрҙәге кеүек һуғышсанлыҡ түгел, ә, киреһенсә, ил, ғаилә тыныслығы һәр саҡ беренсе урынға сыға, унан ҡала тапҡан балаһының сәләмәтлеге, тәрбиәһе лә иғтибарын биләй уларҙың. Әгәр әсәләргә тейешле шарттар тыуҙырылһа, минеңсә, бер ҡатын да бер бала йәки бөтөнләй балаһыҙ ҡалыуҙы хуп күрмәҫ ине. Мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, Рәсәйҙәге бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың 45 проценты бала табырға әҙер түгел. Был бит Рәсәй күләмендә генә түгел, һәр төбәктә халыҡ киләсәге өсөн саң һуғырлыҡ хәл. Ҡатын-ҡыҙҙың ғүмер оҙайлығын 70 йыл тип алһаҡ, уның яртыһы бала саҡ, йәшлек һәм ғаилә төҙөүгә һәм уның нығыныу осорона тура килә. Арьяғы үҙең башлап ебәргән, әүәләгән тормош дауамы. Тотлоғоп торған һәләттәрҙең сәскә атып китеүе лә, йә хыялдарҙың хыял булып ҡалыуы ла бар. Нисек кенә булһа ла, ғаилә ҡороу, сабыйыңды күкрәгеңә ҡыҫыуҙан ләззәтлек тойоу миҙгелдәрен карьера алмаштыра алмай инде.

Ә һәләтте үҫтереү бер ҡасан да һуң түгел, тип уйлайым. Тормош иптәшем Йәдкәр Бәширов менән икебеҙ ҙә ижадҡа битараф булмаһаҡ та, бер ҡалағыбыҙ ҙа юҡ хәлдә ғаилә ҡороп йәшәй башланыҡ. Ул ғүмер буйы күңелендә йөрөткән картиналар төшөрөргә тигән хыялын, хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына, тормошҡа ашыра алды. Шуға ла мин ижад менән шөғөлләнергә ирҙәрҙең мөмкинлеге күберәк, тип әйтмәҫ инем. Йәдкәр минең ижадыма ҡаршы килмәһә лә тормош мәшәҡәттәре, тиҫтә йылдар буйы эшкә йөрөүҙәр, йәмәғәтселек эштәре барыбер ҙә ижад донъяһына сумып, онотолоп китергә ирек бирмәне. Бәлки, шулай кәрәктер ҙә. Һүҙһеҙ, халыҡ менән бергә ҡайнап йәшәү ижадыбыҙ йүнәлешенә, маҡсаттар үҫешенә тәьҫир итмәй ҡалмағандыр, тим.

Йомғаҡлап әйткәндә, ижади ҡатын-ҡыҙға һәләтте үҫтереү бер ҡасан да һуң түгел, әммә ниндәй генә һәләт тә ғаиләне алмаштыра алмай, шунлыҡтан, ғаилә беренсе урында булырға тейеш, тип әйтер инем.

**"Уңышлы ир артында аҡыллы ҡатын тора", тиҙәр. Был ысынлап та шулаймы? Үҙегеҙҙең тормоштан алып миҫалдар килтерә алаһығыҙмы?**

- Халыҡ "Ирҙе ир иткән дә, ер иткән дә - ҡатын-ҡыҙ", тип юҡҡа әйтмәгән инде ул. Таныш-тоноштар тураһында һүҙ барғанда: "Кит инде, эткә һан булды, иренә һан булманы", - тигәнде йыш ишетергә тура килә. Был, йәғни, ҡатын-ҡыҙҙың ирҙе ир урынында күрмәүенә шелтә. Тимәк, халыҡ күҙенән бындай мөнәсәбәттәр ҙә ситтә ҡалмай.

Йылы һүҙҙе, йылы ашты, иғтибарҙы кем яратмаһын, барыбыҙға ла кәрәк. Төрлө ваҡыттар була, әммә ҡатын-ҡыҙ ирҙәр халҡынан юҡҡа ғына башҡасараҡ түгел. Уның сабырлығы - аҡылының сыбыртҡыһы, тип әйтер инем. Тормош йөгөн бергә тартыр өсөн ирҙе аңларға тырышырға, ҡай саҡта үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарарға, тапҡанын рәхмәтле булып ҡабул итергә, балаларыңды тәрбиәләгәндә уның фекеренә лә ҡолаҡ һалыу кеүек байтаҡ тормош һабаҡтарының үтәлеүе кәрәктер. Тайпылыштар, үкенеүҙәр, ризаһыҙлыҡтар... Уларҙы үткәрер өсөн түҙемлек, аҡыл, алғараҡ, йыраҡҡараҡ ҡарап фекер йөрөтөү уңышлыраҡтыр. Уйлай белеү - йәшәү тигән һүҙ инде ул.

Аҙмы-күпме һәләтле ир ҙә, ҡатын-ҡыҙ кеүек, үҙ хыял-һәләттәрен тормошҡа ашырырға теләй, ниәтләнә. Бер ғаилә булғас, уның да уңыштары ҡатын-ҡыҙ ҡатнашлығынан башҡа килмәгәне көн кеүек асыҡ. Мәҫәлән, бөйөк Л.Толстойҙың "Война и мир" китабын ҡатыны 20 тапҡыр ҡараламала күсереп яҙа. Иренең әҙәбиәт күгендә юғары күтәрелеүенә шундай һәм тағы ла беҙ белмәгән әллә күпме өлөштәр индергәндер әле ул. Бындай бөйөктәрҙең бөйөклөгөндә, енеү, уңыштарында күбеһенсә ҡатын-ҡыҙҙың ҡатнашлығы бар, тип уйлайым. Ул - мөхәббәтме, ихтирамы, хеҙмәтенең баһаһын аңлауы, дан йә матди отошмо һәм башҡа хис-тойғолармы - төрлө мотивтар булыуы мөмкин. Янғыҙ уҡ яу түгел, тиҙәр бит. Ир кешенең уңышы ғына түгел, ғөмүмән, бәхете лә ҡатын-ҡыҙҙан икәнде лә онотмайыҡ.

**Әҙәбиәт - ул илаһи бер донъямы, әллә сәйәси баҙармы, һеҙ уны нисек баһалайһығыҙ?**

- Бөгөнгө көндә, айырым осраҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, бер кем дә йәмғиәттән башҡа йәшәмәй. Һәр дәүләт бер көс кеүек. Һәр дәүләттең үҙ ҡанундары. Әле беҙҙең эраға тиклем аҡыл эйәһе Аристотель әйткәнсә: "Һәр дәүләт ҡоролошонда кеше асылы үҙгәрә". Шуға, дәүләт ҡоролошо үҙгәрһә, яңы ҡағиҙәләр, ҡанундар барлыҡҡа килә. Бөгөнгө көндә беҙ ҙә илебеҙҙәге система үҙгәреше асылыбыҙға тәьҫир итеүен, уны үҙгәртеүен тойбыҙ, күрәбеҙ. Хатта Конституция яңынан яҙыла...

Яҙыусыға килгәндә, ул философ булараҡ, үҙенсә фекер йөрөтөп, фекерен халыҡҡа еткерергә тырыша. Тик яҙыусы - шул уҡ йәмғиәт ағзаһы, үҙ һүҙен, күңелендәген тура әйтеп, нишләп "көс" ҡанундарына ҡаршы барырға тейеш? Был бит уға зыян ғына итәсәк. Шулай итеп, әҙәбиәт өлкәһенә лә сәйәсәт килеп керә. Башҡорт әҙәбиәтендә лә быға миҫалдар етерлек. Рәми ағай кеүек, кәмһетелеп, ҡыуылып йөрөгәндәр аҙмы ни! Яҙыусыларҙы берләштергән ойошма ла был сәйәсәттән ҡотола алмай. Татарстан халҡының күренекле шағиры Хәсән Туфан бер ҡасан да Яҙыусылар берлеге ағзаһы булмаған. Алмағандар.

Әммә әҙәбиәт, шиғриәт - ысынлап та илаһи бер донъя, күңел ҡушмаһа, яҙып та, рәсем төшөрөп тә, ғөмүмән, ижад итеп булмай, тип әйтер инем. Миңә килһәк, мәктәп йылдарынан уҡ кескәй хикәйә, шиғырҙарым баҫыла, радионан уҡыла ине. Көнкүрешемдең Башҡортостан, Силәбе, Татарстан ерҙәрендә булыуы ижад юлымды бер аҙ ҡатмарлаштырҙы, әлбиттә. Бында, һүҙһеҙ, әлеге сәйәсәт тигән нәмәнең ҡыҫылышы бар ине. Татарстан Яҙыусылар берлегенә 1987 йылда уҡ тәҡдим ителһәм дә, 1997 йылда ғына Башҡортостан берлеге ағзаһы булдым. Тыуған илем, халҡым менән бергә булыуым - бәхетемдең ҙур ҡалъаһы ул.

**Бөгөн ғаиләләрҙәге күп бәләләрҙең нигеҙендә ҡатын-ҡыҙҙың ир-атҡа тигеҙләшергә тырышыуы ята, тип билдәләйҙәр. Нисек уйлайһығыҙ, ҡатындарға нисек итеп үҙ асылына ҡайтырға, һәм был фекер урынлымы, дөрөҫмө ул?**

- Көйлө генә китеп барған машина ҡапыл туҡтап ҡала. Хужа хафалана, йүгереп сығып, уның сәбәбен асыҡларға тырыша. Оҙаҡ эҙләй. Баҡһаң, бәләкәй генә бер деталь ыуалып, двигателгә яғыулыҡ килеүҙе туҡтатҡан, үҙенән меңәр тапҡыр ҙур, ҡиммәтле, ялтлап торған машина һынлы машинаның йөрөшөнә етәкселек итә башлаған. Ә ҡатын-ҡыҙ был тормошта деталь йә бер пружина түгел шул: Хоҙай уны ирҙәр менән тиң яратҡан, әммә ир һәм ҡатын-ҡыҙ заттарының һәр ҡайһыһына үҙ урынын, тәғәйенләнешен биргән. Тарих биттәренән матриархат осоро, шул замандарҙа ир-егеттәрҙең ҡатын-ҡыҙға хеҙмәтсе хәлендә булғанлығына хәбәрҙарбыҙ. Тора-бара ир-ат халҡы көсәйеп, патриархат урынлаша. Инде ҡатын-ҡыҙҙарҙың дәрәжәһе түбәнәйә, улар ҡурсаҡ хәленә төшөрөлә. Был хәл уларҙы, ваҡыты еткәс, ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың тигеҙ хоҡуҡлы булыуын иҫбатлау өсөн көрәшкә этәрә. Бөгөн беҙ ошо көрәштең тормошҡа аша барыуын күрәбеҙ һәм уның емештәрен татыйбыҙ. Был осраҡта Рәсәйҙә киң таралған "Хотели лучше, а получилось как всегда" тигән ҡанатлы һүҙҙәр бик урынлы, тип уйлайым. Сөнки ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың тормоштоң төрлө тармаҡтарында ир-аттарҙан кәм түгеллеген әленән-әле иҫбатлап тороуына миҫалдар бихисап булһа ла, асылда, күпселегебеҙҙең "СУ" оҫкостарында тәкмәсләйһе, 60-ар вагон һөйрәп барған паровоз штурвалына тотонаһы, ҡараңғы ер аҫтына төшөп күмер соҡоғоһо килә бит.

Кешегә тәүтормоштан һалынған тәғәйенләнеш тигеҙлеге юғалыуҙа 20-се быуатта илебеҙҙә хөкөм һөргән советтарҙың да өлөшө ҙур: ирҙәр менән бер рәттән метрополитендар төҙөү, юлдар һалыу, завод-фабрикаларҙа, ауыл хужалыҡтарында тиҫтәләгән йылдар хеҙмәт итеү - ҡатын-ҡыҙ өсөн рекрут хеҙмәтенә тиңдер, моғайын. Төптән уйланылған яһалма "тигеҙлек" бөгөнгө көндә лә үҙ эшен эшләй: ғаиләнен дәрәжәһе һаман түбән тәгәрәй (ғаилә тотҡаһы - ҡатын-ҡыҙ, тибеҙ), демография киҫкенләшә (сабыйҙар ғүмере башлыса ҡатын-ҡыҙға бәйле), ир-заттары ирлеген (ҡатын-ҡыҙҙар башлыса ир заттарҙың абруйын күтәрмәй, киреһенсә, кәмһетә) юғалта бара, кешелек ҡартая (балалар тыуымы аҙ). Был тенденция үҫешә генә. Ошо яһалма "тигеҙләнеш" ғаиләнең матди нигеҙен ҡаҡшатыуға ҡоролған: беренсенән, халыҡтан уның борондан килгән хосуси ерҙәрен тартып алып, эшһеҙ, ашһыҙ ҡалдырыу һәм тамаҡ түйҙырыу өсөн хөкүмәт ҡушҡан эштәргә яллау; икенсенән, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла шул уҡ хөкүмәт ҡушҡан эштәргә эшкә егеү, эшсе ҡулдар-ҡолдар ишәйтеү. Эшкә сыҡмай сара ҡалмай, сөнки ир-аттың ғына эш хаҡы ғаиләне тәьмин итерлек дәрәжәгә махсус рәүештә еткерелмәй. 70 йыллап хөкөм һөргән советтар осоронда башланған демография мәсьәләһе бөгөн килеп ҡабырғаһы менән тора, һәм был йүнәлештә хөкүмәттең аҡса таратып ҡына уңышҡа ирешеүе бик тә шикле.

Һуңғы осорҙа Ер шарында барған техноген үҫештең дә ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың тәбиғәттән бирелгән тәғәйенләшенә тәьҫире көслө. Ғаиләне һаҡлау, ирҙарҙың бәсен, абруйын күтәреү, уларҙы эш, шөғөл, һөнәрҙәр менән тәьмин итеп, ғаиләне ҡарарлыҡ эш хаҡы алыу юлдарын асмайынса тороп, ҡатын-ҡыҙҙың күңеле "иремәҫ", ахыры. Һәм был йүнәлештә аҫыл заттарыбыҙҙың ҡатнашлығы, башлап йөрөүҙәренән башҡа уңышҡа ирешеү мөмкин дә түгел, сөнки ғаиләне һаҡлау, бала бәпләү, ил тыныслығы уларҙа һаман инстинкт шәкелендә һаҡланып ҡалған.

Ҡатындарҙы үҙ асылына ҡайтарыуҙан бигерәк, башта үҙ өҫтөндә эшләр өсөн өр-яңы, күп ҡырлы, үҙҙәре ҡатнашлығында төҙөлгән программалар кәрәктер, тип уйлайым. Күп сәйнәлгән, тапалып бөткән, үҙен аҡламаған ысулдарҙан арыныу кәрәк. Хәҙер инде күп ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәрен эшкә йөрөмәйенсә, бала, йорт-ер ҡараусы ғына итеп күҙ алдына ла килтермәй. Ирҙәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа аҡса артынан ҡыуып арый хәҙер. Эшләргә, етәкселек итергә теләүселәргә, һүҙһеҙ, юлдар асыҡ, әммә йортонда хужабикә, балаларына иптәш, кәңәшсе, ярҙамсы булып, ирен ҡәҙерләп йәшәргә теләүселәр ҙә аҙ түгелдер, миңенсә.

Ҡатындарҙы үҙ асылына ҡайтарыу фекере дөрөҫмө ул, тип һорайһығыҙ. Ентекләберәк күҙәтһәк, был процесты башланғанын самалап та була: күпме йәш килендәребеҙ ирҙәре тапҡан малға, бер ҡайҙа ла эшләмәй, хатта бала ла тапмай, рәхәтләнеп, үҙ көйөн генә көйләп йәшәй. Киләсәк быуын йәш ҡыҙҙарының аңдарына тулы ғаилә, балаларҙың - үҙеңдең киләсәгең, бәхетең икәнен аңлатып һеңдереү кеүек саралар зарур. Үҙ йортоңда, балаларың менән кишер, һуған, алма, еләктәр үҫтереп, йәйҙәрен күләгәлә тирләп бешеп сәйҙәр эскән, ҡышҡы өрпәк ҡарҙы шығырҙатып күмәкләп саңғы, сана шыуһаң, атай кеше тапҡан-

✓ ***Тормош үҙгәреүсән, ҡояш та бер ҡалҡа, бер бата. Был мәхшәр ҙә үтер. Үтеү тиҙлеге һәр ҡайһыбыҙҙан тора. Шуны аңлау мөһим. Аңламаһаң, яҙаһын бирә. Өйҙә ултырыу апатия тыуҙырмаһын өсөн, сәләмәтлектән тыш, шөғөл кәрәк.***



ды һаҡсыл тота килеп сәйәхәттәр ҡылһаң... Ер йөҙөндә кешелекте һаҡлап ҡалыу өсөн һәммәбеҙгә үҙ аҫылыбыҙға ҡайтыу кәрәклеге ап-асыҡ. Был күбеһенсә ҡатын-ҡыҙ ҡулында, тип уйлайым. Башҡорт халҡының боронғонан һаҡланып килгән үҙ ҡиммәттәре йөшәй әле, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙҙәренең затлы сифаттарын юғалтып бөтөрмәгән, шуға, был йүнәлештә, минеңсә, уныштар Башҡортостаныбыҙҙа йылдамыраҡ барасаҡ, тип өмөтләнәм, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың һәр өлкәлә әүҙемлегенә, шул уҡ ваҡытта тәбиғилегенә һоҡланам.

**Өфө менән үҙегеҙ йәшәгән Ҡазанды сағыштырып ҡарағанығыҙ бармы: йәшәү кимәле, хеҙмәтләндереү, архитектура, йәмғиәт мөнәсәбәттәре араһында айырма ҙурмы һәм быларҙың сәбәптәре ниндәй?**

- Бөгөнгө техноген заманда ла ҡалалар бер көндә генә төҙөлмәй, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҫешеп тә китә алмай. Ысын булһа, Ҡазан ҡалаһына 2005 йылда 1000 йыл тулды. Бынан мең йылдар элек Волга-Урал буйы халыҡтары бер ниндәй ҙә сиктәр менән бүленмәй, ырыу-ырыуҙар булып, бер-береһе менән аралашып йәшәгән. Бөйөк Башҡортостандың мәшһүр Биләр ҡалаһы, бөтә Европала иң ҙур, иң гүзәл ҡалаларҙың береһе булып, ундағы университетта ошо мөхиттә йәшәгәндәр белем эстәгән. Улар иҫәбендә әйле башҡорто, "Йософ ҡиссаһы" авторы Ҡол Ғәли ҙә бар. 1438 йылда Ҡазанды Туҡтамыш хандың ейәне Оло Мөхәммәд баҫып алып, ҡалала ханлыҡ ойоштора. Етәкселек итеү өсөн ширин, барғын, ҡыпсаҡ, арғын ырыу вәкилдәренән торған диван төҙөлә. 1552 йылда Иван Грозный етәкселегендә рус ғәскәрҙәре ҡаланы баҫып, ханлыҡты ҡыйратып, Мәскәүгә буйһондора, Волга йылғаһы ярҙарында йәшәп ятҡан халыҡтар ауылдарынан ҡыуыла. Суҡындырыу башлана. Алда Аристотелдең "Һәр дәүләт ҡороношонда кеше асылы үҙгәрә", тигән һүҙҙәрен килтергәйнем бит - 1920 йылда советтар Ҡазан идаралығында Татарстан йөмһүриәте төҙөп биргәс, был тәбәк менән инде нисә дәүләт эсендә асылы үҙгәреш кисергән ҡазанлылар етәкселек итә башлағанын күҙаллаға мөмкиндер, тим. Әлбиттә, Ҡазанды Мәскәү алғандан һуң ҡалала урыҫтар күбәйә, төрлө предприятиеләр, яңы стилдә йорттар төҙөлә башлай, Волга буйлап сиркәүҙәр күтәрелә, кәсләп суҡындырыу көсәйгәндән-көсәйә, байтаҡ мосоманларыбыҙ (мәсәлән, Йосопов, Дашков, Кутузовтар) христиан диненә күсеп, Мәскәү тарафтарына юллана, Ҡазандың үҙендә белем биреү усаҡтары барлыҡҡа килә, 1804 йылда университет асыла. Рәсәйҙә батшалар алышына тора. Байтаҡ йылдар үткәс, урындарынан ҡыуылғандарға Ҡазанға яҡынайырға рөхсәт бирелә башлай. Йәйләп ҡала белем һәм фән үҙәгенә әйләнә, мәсеттәр төҙөлә. Белем алырға ашҡыныусылар тирә-яҡтан йә бында, йә Урта Азия тарафтарына ағыла. Шуға ла "Ҡазанда яҡшыраҡ" тигән фекер бөгөнгө көндә лә тәкрар ителә, был хатта инстинктҡа әйләнгән кеүек.

Әйткәндәрҙән сығып һығымтаға килһәк, әлбиттә, күрше мөхиттә йәшәгән халыҡтарҙың үҙ-ара аҫылында ла айырмалыҡ юҡ, тип әйтмәҫ инем. Ҡазан халҡының (бөтә Татарстандыҡы түгел) Мәскәү менән быуаттар буйы яҡындан бәйләнеше лә әҙемтәһеҙ ҡалмаған. Ҡазан эсендә ҡайнағандарҙың холҡ-фиғеле, маҡсаттары быуаттар буйына Мәскәү тәьҫирендә әүәләнә, ә Иҙел-Урал киңлектәрендә үҙ көндәрен үҙҙәре күреп, быуаттар дауамында ирекле йәшәгән ҡәүем 1920 йылда Ҡазанға буйһондорола, уның милләтен, милли сифаттарын бөтөрөргә йүнәлтелгән сәйәсәт ҡорбанына әйләнә. Шул осор тәглимәттәренә ярашлы, айырмалыҡтарҙы күрмәскә, юнырға, халыҡтың асылын үҙгәртергә, яңы милләт һәңрә байтаҡ көс һалына. Ләкин тигеҙһеҙлек бөгөнгө көндә лә юҡҡа сығып бөтмәгән. Яңы милләт яһау тигәнгә шуны ла өҫтәп китке килә: бөгөнгө көндә, индеецтарҙы ҡырып, ер-мөхиттәрен баҫып алып, дәүләт ҡорған американлылар тигән халыҡ барлыҡҡа килеүгә 200 йылдан ашыу ара үтеп барһа ла, улар милләт булып ойошоуға яҡынай алмайҙар әле.

Бөгөнгө ҡазанлы эшкә ҡыйыураҡ тотона, бөтмөрөрәк, коммерция өлкәһен тиҙ үҙләштерә, һатып-алыуға маһир, аралашҡанда ниндәй файҙа алырын уйлап аралаша, үҙен күрһәтә белә, әлләм ни төрәнгә төшеп уйларға тырышмаған кеүек күрәм. Ябай халыҡ тотороҡлораҡ, инертлыраҡ, тормош ҡиммәттәре үҙәктәгеләрҙән айырыла. Ә инде халыҡ көнкүрешенә, хаҡтарға килһәк, ул уртаса, айырмалар ҙур түгел, әммә Башҡортостанда халыҡты социаль яҡтан яҡлау кинәрәк йәйелдерелгән (һалымдар, льготалар, коммуналь хаҡтар һ.б.), башҡорт халҡы рухлы һәм рыяһыҙыраҡ, тип күрәм.

**Мин һеҙҙә ысын башҡорт ҡатындарының холҡон - ҡатылыҡ менән миһырбанлыҡтың йөнәшлеген тоям. Был беҙҙең милләт гүзәл затының ярылып ятҡан һыҙаты, тиһәм, килешәһегеҙме?**

- Миһырбанлыҡ менән ҡатылыҡ беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ғына, тимәҫ инем. Был сифаттарҙың йөнәшлеге, ғөмүмән, халҡыбыҙға хас. Миһырбанлыҡ башлыса күңел менән бәйле, холоҡтоң йомшаҡлығын арттыра торған сифат, ҡатылыҡ иһә, минеңсә, күберәк аҡылға бәйлерәк, тим. Кешегә, миһырбанлыҡ күрһәтеп, хәленә керһәң, изгелек ҡылаһың, ярҙамлашаһың. Ҡайһы берәүҙәр һинең был сифатыңды үҙ итә, нәфсеһе ҡотора, ҡатыраҡ тормаһаң, елкәңә ултырырға әҙер, бәғзеһе бер изгелегеңде ғүмере буйына онотмай, рәхмәтен уҡый. 3 октябрҙә БСТ каналынан яңылыҡтар ҡарап ултырабыҙ. Зубоволағы инфекцион хастаханала ятҡан оло ғына ҡатын үҙенең коридорҙа ятып дауаланғанына ризаһыҙлыҡ белдереп интернетҡа һалған. Күпме көс, таһыллыҡ, тырышлыҡ менән сафҡа индерелгән хастахананы төҙөүселәргә, үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған, урын етешмәгәндә лә ауырыуҙарҙы ҡабул итеп дауалаусы медицина хеҙмәткәрҙәре миһырбанлығына рәхмәт ошомо? Миһырбанлыҡты үҙ файҙаһына ауҙарыусы әрһеҙҙәргә ҡатылыҡ менән яуап бирмәй булмай шул. Бөгөн бит ундайҙар аҙ түгел.

**Әсә кешенең иң ҙур байлығы - балалары. Уларҙы дөрөҫ тәрбиәләү әсәнең иң оло һынауы ла, шулай бит? Был тәңгәлдә нисек итеп яңылышмаҫҡа? Һине ҡартлыҡта ҡәҙерләр, хөрмәтләр балаларҙы ҡайһылай тәрбиәләп үҫтерергә?**

- Баланы ҡулға алған минуттар - иң ләззәтле, һөйөнөслө мәлдәр инде ул. Әммә шул уҡ мәлдән ата-әсәлә сабыйҙың киләсәге өсөн яуаплылыҡ барлыҡҡа килә, тәрбиә процесы башлана. Шулай итеп, ата-әсәһе нәҫеленең генетик дауамы - сабыйы тәрбиәһенә нигеҙ ғаиләлә һалына. Һәр ғаиләнең үҙ тәртибе, традициялары, үҙ ҡағиҙәләре, атай һәм әсәй булған кешеләрҙең ғилем, тормошҡа ҡарашы, һәләте кеүек төрлө сифаттарҙың булыу-булмауы әүәләй инде буласаҡ граждамды. Балалағы 60 процент сифаттар (һәләт, тәҫ-буй, холоҡ, сәләмәтлек һ.б.) - нәҫелдән, ҡалғаны тәрбиәнән, тип иҫәпләй ғалимдар. Был дөрөҫтәр, сөнки, атайҙарына оҡшап, беҙҙең балаларыбыҙҙың өсөүһе һәм ике ейәнсәрем рәсемдә яҡшы төшөрә. Мин иһә телдәрҙә яратам,



уларҙы тиҙ өйрәнәм, яҡшы тоям. Ике улым, бер ейәнсәрем 4-5 телдә, ҡыҙым, ҡалған бәләкәстәребеҙ 3 телдә һөйләшә ала, китап уҡырға маһирҙар.

Ғаиләләрҙәге тәрбиәне ҡәтғи бер ҡалыпҡа һалып булмайҙыр, тип уйлайым, бигерәк тә һуңғы ваҡытта. Тормошта стандарттар юҡ бит ул. Ғаиләнән тыш, бала үҫешенә, формалашыуына, балалар баҡсаһы, мәктәп, йәмғиәт, урам, виртуаль мөхит (гаджеттар) һ.б. үҙ өлөшөн индерә, ә атаәсәлә сабый тыуғанда хасил булған (булмаған) яуаплылыҡ тойғоһо арта бара (артһа). Юҡҡа ғына бала итәктә булғанда ғына тәмле, үҫкән һайын ҡайғыһы ла үҫә, тип әйтмәйҙәр бит. Балалар тәрбиәһе, үҫеше өлкәһендә күпме хөкүмәт органдары, ғалимдар, уҡытыусылар, тәрбиәселәр тир түгәләр, хеҙмәттәр яҙалар, төрлө саралар, һөйләшеү-кәңәшләшеүҙәр ойошторалар. Әммә барыбер баланың үҫеш нигеҙендә ғаилә һалған башланғыс ята. Ни сәсһәң, шуны ураһың инде ул. Тик ҡай саҡта ни сәскәнеңде генә уйлап еткерә алмайһың.

**Бөгөнгө пандемия карантины мәлдәрендә ололарға ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ? Күптәрҙә был сикләүҙәр апатияға ла килтерҙе. Төшөнкөлөккә бирелмәү, сиргә бирешмәү һәм был ауырлыҡтарҙы үтеү алымдары бармы?**

- Ер шарында тәбиғи һайланыш барғанға оҡшай, шуға пандемияны барлыҡ кешелеккә, һәр кешегә һынау, тип ҡабул итәм. Сөнки тулайым алғанда кешелек ауырыуға һабыша, асылын юғалта бара бит. Тәртип, әҙәп, бер-береңә ихтирам, ярҙам, миһырбанлыҡ, иман, йәғни йәшәйештең, именлектең нигеҙе ҡаҡшап бөткән заман. Кеше үҙ-үҙенә, тәбиғәтенә ҡаршы, ғөмүмән, тәбиғәттең дошманына әйләнә барған кеүек. Ә инде тәбиғәт менән татыулыҡ бөтһә, күрмәгәнеңде күрһәтә инде ул: торнадоһы күтәреп осора, ер тетрәп, океаны урғыла, урманда төлкөнө атып бөтөрһәң, донъяны сысҡан баҫа, сысҡан ауырыуы көсәйә... Бер ҡомһоҙҙоң йылға ярҙарын тамырҙары менән нығытып торған ағастарҙы киҫеп һатып байыуы һыу ҡороуға килтерә...

Бөгөн битлек кейеүгә, аралашыуҙарҙағы сикләүҙәргә ҡаршылар бар. Янындағыларҙың сәләмәтлегенә битарафлыҡ үҙендә генә яратыуҙан киләләр инде. Пандемия кешенең йәмғиәттә йәшәрлекме, юҡмы икәнен һынай кеүек. Ковид йоҡторғанынды белә тороп кеше араһына сығыу енәйәт ҡылыу түгелме ни? Ярай, һин ауырыуҙы еңел кисерҙең, ти, ә бүтәндәр өсөн был бәлә һуңғыһы ла булыуы мөмкин бит. Битлек кейеп, ҡулынды әленән-әле йыуып, кәрәкмәһә, башҡалар менән гәпләшер өсөн генә осрашыуҙан тыйылыу - ауыр шөғөл түгел дә бит. Үҙен тыйырға өйрәнмәгән бәғзеләр хатта депрессияға юлыға. Үҙ йортонан үҙенә төрмә яһай.

Тормош үҙгәреүсән, ҡояш та бер ҡалҡа, бер бата. Был мәхшәр ҙә үтер. Үтеү тиҙлеге һәр ҡайһыбыҙҙан тора. Шуны аңлау мөһим. Аңламаһаң, яҙаһын бирә. Өйҙә оҙағыраҡ ултырыу апатия тыуҙырмаһын өсөн, сәләмәтлектән тыш, шөғөл кәрәк. Ә эшһөйәрҙең апатияға бирелергә ваҡыты ла, уйы ла юҡ, егәрленең шөғөлө, эше тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Ялҡаулыҡтан, эшһеҙлектән, пандемия булмаһа ла, донъяға ризаһыҙлыҡ арта. Үҙенә талаптар ҡуйырға, көс табып, хәрәкәтләнергә генә кәрәк. Барығыҙға ла һаулыҡ теләйем.

**Шулай итеп, әҙәм балаһының йәшәүе генә түгел, ә тәбиғи ҡануниәттәргә ҡаршы бармайынса, уның ҡағиҙәләрен боҙмайынса дөрөҫ йәшәүе шарт шул. Беҙҙең диалог героиняһы кеүек, йәшәйештең аҡ һәм ҡара, изгелек һәм яуызлыҡ яҡтарын айыра белеп, үҙ булмышынан яҡтылыҡ һәм мәрхәмәтлек өләшеп, һайлаған юлыңдан тайпылмай бара белеү ҙә зарур әҙәмдәргә...**

# БӨЙӨКЛӨГӨНДӘ...

## ҡатнашлығы бар шул

Әлиә САЙҒӘФӘРОВА
әңгәмә ҡорҙо.

***✓ "Асыулы сағыңда хөкөм сығарма, бәхетле сағыңда вәғәҙә бирмә", тип әйтәләр. Кәрим ныҡ асыулы сағында барлыҡ класташтары алдында "Крузак" алмаһаммы, тип вәғәҙә биргәндәй булды. Ысынында иһә, үҙ-үҙенә хөкөм сығарҙы.***



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

# ХОҘАЙ БИРГӘН МАЛАЙ

(Хикәйә)

*Аптыраным был ҡатынға,*
*Ҡыҙ таба ла, ҡыҙ таба.*
*Мин әйтәм малай хаҡында,*
*Докторға барып ҡара...*

Шағир был юлдарҙы фәҡәт Кәримгә һәм уның ҡатыны Зөләйхаға арнап яҙған һымаҡ. Ҡулынан балтаһын төшөрөрлөк, атаһын шатлыҡ атына атландырырлыҡ, һис юғы, фамилияһын дауам итерлек йоморо ғына бер ҡара малай тапманы бит ҡатыны. Һис юғы берәүҙе. Орлоҡ өсөн. Атай нигеҙен кем һаҡлар?

Әллә Аллаһы Тәғәлә уларға малай лимиты бүлмәгән инде? Уларға ғына булһа, бер асыу. Кәримдең ир туғандары араһында ла һуңғы ун йылда малайлы кеше бөтөнләй юҡ. Шыр ҡыҙҙар. Гел ҡыҙҙар тыуыуҙы донъя тыныслығына, бәрәкәтле тормошҡа юрау ҙа бар халыҡта. Өлкәндәрҙең иҫләүе буйынса, Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан уларҙың ауылында тик малайҙар ғына тыуған. Герман һуғышы сығыр алдынан да шундай уҡ хәлдәр күҙәтелгән, тиҙәр. Кем белә, әллә уларҙың нәҫеленә Хаҡ Тәғәлә тик ҡыҙҙар ғына ебәреп, ниндәйҙер оло бәлә-ҡазанан аралаймы икән?

Ҡыҙҙарға бай булғандары өсөн Кәримдең затындағы ир-аттарҙы мәрәкәләп-шаяртып "ювелир оҫталары" тип атап йөрөтәләр. Имеш тә, ҡыҙ баланы донъяға яралтыу өсөн бигерәк тә атай кешенән ювелир оҫталығы, уның әйберҙәрҙе һырлағандағы нәзәкәтлеге, биҙәгәндәге нескәлеге, илаһи һәләте талап ителә икән дә. Ә малай тыуҙырыу өсөн арлы-бирле балта тотоп, утын яра белһәң дә етә, имеш. Бына һиңә кәрәкһә, мә! Берәү әйтер: ҡыҙ табыуҙың ни ауырлығы бар, бына һин малай табып ҡара! Ҡайһы берәүҙәрҙең әлегә туҙға ғына яҙған фекеренсә, әгәр ҙә ир кеше ҡатынын нығыраҡ яратһа - ҡыҙ бала, ҡатын ирен нығыраҡ һөйһә - ир балалар донъяға ярала, имеш. Бәй, ошонан һуң да Кәримдең хәләле, мине ирем яратмай, тип әйтеп ҡараһын. Ә бына һис малай тапмаған ҡатынына ул шулай тип әйтә ала. Хатта әйткәне лә бар.

Ир бала тыуҙырыуҙың ауырлығы ла бар, тиҙәр. Быныһын табиптар әйтә: ҡыҙ балалар сос, етеҙ була, мөҙҙәте етер-етмәҫтән әсәһенең балаятҡыһынан яҡты донъяға сығырға ашҡына, тибешә башлай. Ҡыҙҙарҙың ир затына ҡарағанда иртәрәк өлгөрөүе лә шул сослоҡҡа һәм етеҙлеккә бәйле. Малайҙар иһә, әллә инде үҙҙәрен мең михнәттәр көткән донъяға тыуырға теләмәйенсә, үжәтләнеп ята бирә, кендек аша әсәһенең һутын һурыуын ғына белә. Хәс тә ата-әсәһенең пенсияһына йәшәгән ялҡау бешәлкәһеҙ егет һымаҡ.

Ҡатын менән йоҡларға ятыр алдынан түшәк йә яҫтыҡ аҫтына балта һалыу тураһындағы лаҡап та тап ошо хәлгә бәйле. Имеш тә, был йоланың асылын аңламаған ситтән төшкән бер килен, ирем мине төндә сабып үлтерер өсөн балтаһын шунда һалып йоҡлай, тип уйлап, шикләнеп йөрөгән-йөрәгән дә, тегеһе был ғәҙәтен ташламағас, ахыр сиктә, милицияға мөрәжәғәт иткән. Улар йоҡларға ятыр алдынан килгән тәртип һаҡсылары. Йәш сержанттар. Улар ҙа был йола-ырым хаҡында белмәйҙәр икән. Протокол төҙөгәндәр. Йәш кейәү йоланың мәғәнәһен тегеләргә ҡат-ҡат аңлатып ҡараған. Тәүҙә унан көлгәндәр, аҙаҡ тегегә нығыраҡ бәйләнгәндәр. Һөҙөмтәлә кейәү баланы баллы-майлы айындағы йылы түшәгенән айырып, алып барып бикләп үк ҡуйғандар. Ваҡиғаның аҙағы нисек бөткәндер, иллә-мәгәр, ирем мине балта менән сабып үлтерә, тип милиция саҡыртҡан ҡатын бер-бер артлы дүрт малай тапҡан, тиҙәр. Ҡурҡышынан микән? Әллә теге ырымдың тәьҫире көслө булғанмы?

Зөләйха малай тапманы, уның ҡарауы, ике йылға бер тапҡыр береһенән-береһе гүзәлерәк, береһенән-береһе нәфисерәк, береһенән-береһе иркәрәк ҡыҙҙары берәм-берәм тупылдап тыуып ҡына торҙо. Исемдәрен дә әсәләренекенә оҡшатып ҡушырға тырыштылар: Зөлхизә, Зөбәйҙә, Зөлхәбирә, Зәлифә, Зөмәрә. Йорттағы бер түгел, алты "З" хәрефенә башланған исемдәрҙең тәүлек әйләнәһендәге туҡтауһыҙ яңғырашында Кәримдең башы "зыйылдап" ҡына торҙо.

Теге шағир дөрөҫ әйткән икән: ҡыҙ булһа ла, белдегеҙме, нисауа була икән дә. Ҡыҙ бала - наҙлы бала. Ҡыҙ бала күберәген атаһына тартылыусан. Зөләйхаһы республиканың биш бала табыусы әсәләре менән берлектә баш ҡалаға саҡырып, миҙал менән бүләкләнеләр. Тик атай кешегә һис юғы "Маладис атай" тигән маҡтау ҡағыҙы ла бирмәнеләр. Әммә күп балалы ғаилә башлығы булыуҙың заманына күрә бик күп кенә уңайлыҡтары, йәғни льготалары бар...

* * *

Бик-бик иртә өйләнде Кәрим. Атаһы менән әсәһенең бер-бер артлы фанилыҡҡа күсеүе лә быға булышлыҡ иткәндер. Атаһының васыят итеп әйткән һуңғы һүҙе лә шулай булды: "Кеше, улым, утыҙ йәшкә тиклем үҙе өйләнмәй, утыҙҙан һуң ҡурҡып өйләнмәй. Буйҙаҡлыҡта бәхет юҡ ул. Өйлән, ҡырҡ йәшеңә тиклем өйөң балалар тауышы менән тулмаһа, мәхшәр менән тулыр..." Тиңдәштәре әле әрмеләрҙән ҡайтып, институт-фәләнгә инергә, аҡсалыраҡ эшкә урынлашырға, тип ҡалаларға юлланған бер ваҡытта Кәрим ағайыбыҙ наҙлы кәләш ҡуйынында ине инде. Башҡалар белем эстәне, карьера яһаны, ҡалаларҙы яуланы, ә ул иһә урта мәктәпте тамамлағас, әрмегә барып килде лә, үҙенән өс йәшкә кесе Зөләйханы мәктәбен тамамалар-тамамламаҫтан әйттереп, аттестат алғас, туй ҙа үткәрҙеләр. Кинйә малай булараҡ, Кәрим атай йортонда тороп ҡалғайны. Зөләйха йортҡа килен дә, хужабикә лә, ҡәйнә лә булып төштө. Кәримдең һөнәре етмештән ашып китһә лә, махсус уҡып алғаны сварщик һөнәре булды. Атаһы тимерсенең улы ла тимерсе була инде.

Кәрим Зөләйханы балаға күмде. Әллә киреһенсәме икән? Зөләйха башта ҡалаларға ағылған әхирәттәренә көнләшеп ҡараны. Ҡалаға китәйек, тип иренә туҡтауһыҙ тылҡыны. Әммә һәр бер ынтылышы сиратта тыуған ҡыҙ балаға ҡарата хәстәрлек менән баҫырыла килде. Ғаиләлә ҡыҙҙар һаны артыу менән был ынтылыш кәмей-кәмей барып, аҙаҡтан бөтөнләй онотолдо.

Шартына килтереп эшләй ҙә, йәшәй ҙә белә ине Кәрим. Барыһына ла өлгәште ул: иҫкеһен ҡутарып, сарҙаҡлы итеп йортон да һалды, ҡураһы тулы мал, ҡош-ҡорт, баҡса артындағы урман ситендә умарталары геүелдәп ултыра. Баҡсаһында емеш-еләге, йәшелсә-фәләне күтәргеһеҙ булып уңа. "Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы" тиҙәр. Зөләйхаһы ла берҙе биш итергә тора.

Кәримдең тормошҡа ашмаған хыялдары ла бар. Бер түгел, икәү улар. Тәүгеһе йоморо ҡара малай булһа, икенсеһе - халыҡ телендә "Крузак" тип йөрөтөлгән "Ланд-Грузер" машинаһы. Тәүге хыялы, нимә генә итмәһен, үҙенән тормай - Хоҙай ихтыярында. Ә бына икенсеһенә килгәндә, Кәрим инде нисәмә йыл ир исемен күтәреп йәшәп, әҙәм рәтле машинаға тейенә алғаны юҡ.

"Ҡатын-ҡыҙ күрке - сепрәк, ирҙеке - ат". Был әйтем халыҡтыҡы иҫәпләнәме-юҡмы, иллә-мәгәр Кәрим йыш ҡына уны ҡабатларға ярата. "Ат" тигәне - хәҙергесә, машина. Быға тиклем Кәрим ауылда йәшәүсе күптәр һымаҡ 1-сенән башлап 15-сегә тиклемге "атамарка"ның кәттәһе "Жигули"ҙа елдереүҙе иң ҙур егетлеккә тиңләй ине. Әммә йәй башында үткән класташтары менән осрашыуы был мәсьәләлә уның ҡарашын теүәл йөҙ ҙә һикһән градусҡа үҙгәртте. Ниндәй генә "инәмаркаларға" атланып килмәгән ҡалаларҙа һәм ер шарының башҡа төбәктәрендә көн итеүсе класташтары? Уларҙың ҡайһы берҙәрен Кәрим хатта төшөндә лә күргәне юҡ. Уларҙың эргәһендә Кәримдең 15-се һанлы "Жигули"һы төҫһөҙләнеү генә түгел, интерьерҙы боҙған музей экспонаты кеүек. Хатта күренмәй ҙә. Эйәр һалған һыйырға, баҡтаһы ҡойолған һәүерек алашаға атланып килгән мәхлүктәй хис итте үҙен Кәрим. Уның намыҫсан йөрәге дөпөлдәп тибеп ҡуйҙы. Етмәһә, Себерҙә йәшәүсе класташы Сәмиғулла үҙенең һуңғы сириялы "Тойота"һы янында тороусы Кәримдең машинаһына ишаралап:

- Был машинаға магазинда запчастар бармы әле һаман да? - тип төрттөрөп һорау биреп ҡуйҙы.

- Булмаһа ни, мин бит сварщик. Үҙем тимерҙән әтмәләп алам, - тип класташының төрттөрөүен үҙенсә мәрәкәгә борорға теләне Кәрим.

- Ә, онотоп торам. Һеҙ бит "ювелир оҫталары..."

- Ҡыҙ яһау һиңә "Тойота" һатып алыу йә малайҙар әтмәләү түгел...

Кәрим Сәмиғулланың ике малайы барлығын, ҡыҙҙары булмауын иҫенә төшөрҙө. Тик класташы ла бирешерлек түгел. Оторо ярһыны ғына. Уҡтарын ире менән класташтар осрашыуына килгән Кәримдең ҡатыны Зөләйхаға тоҫҡаны.

- Ир аҫылы мал таба, ҡатын аҫылы ул таба, ти ҡарсәйем. Өйөң тулы ҡыҙҙар, йөрөгән машинаң музей экспонаты булғас, артабан ни әйтеп тораһың инде...

Кәримдең бармаҡтары үҙенән-үҙе йоҙроҡҡа төйнәлде. Асыуын теш араһына ҡыҫып, көскә йотоп, ул барыһына ла ишеттерерлек итеп:

- Тағы ла биш йылдан осрашҡанда бына ошо урында "Крузак" ултырмаһа, бына был фуражканы кейеп тә йөрөмәйем. Исемем дә Кәрим булмаһын... - Ул машинаһының капотына фуражкаһын сисеп бәрҙе.

- "Крузак"? - Сәмиғулла мыҫҡыллы йылмайҙы. - Уны һатып алырға аҡсаны ҡайҙан алмаҡсыһың? Ә-ә-ә... Онотоп торам, һин бит "ювелир оҫтаһы". Ҡыҙҙарыңды гастарбайтер үзбәктәргә һатһаң, алаһың инде...

Кәрим артабан түҙеп тора алманы. Бер-береһенә көҙгө әтәстәй ябырылып йәбешкән ике класташты көскә айырҙылар. Сәмиғулланан ғәфү үтендерҙеләр класташтары. Эскәнлегенә һылтанып маташҡан булды ул тәүҙә. Әммә табындағы башҡа ир-аттар уны яғаһынан нығыраҡ бороп алғас, тәүҙә әртисләнеп маташты, аҙаҡ майлаған ҡайыш хәленә килде. "Үҙе шаяртҡанды аңламай бит, ауылдан сыҡмағас, кеше менән һөйләшә белмәй..." тип аҡланды ул шулай ҙа, Кәрим менән Зөләйханан ғәфү үтенгәс. Эш үткәс. Әммә байрамдың ҡото киткәйне инде. Кәрим класташына тыныс күңел менән ҡарай алманы. Уға тиҙ генә машинаһына ултырып ҡайтып китеүҙән башҡа сара ҡалманы...

Ҡыҫҡаһы, Һаҡмар буйына йыйылған класташтарҙың был осрашыуы, дөрөҫөрәге, Сәмиғулла менән һүҙгә килешеүе, Кәримдең тормошона ҡырҡа боролош алып килде. Иллә-мәгәр, уның намыҫы ҡуҙғалды. Тағы ла биш йылдан уҙасаҡ класташтар осрашыуына "Крузак"ҡа атланып, барыһының да танауына сиртмәһәме, исеме, ысынлап та, Кәрим булмаясаҡ. Әлегә класташтарының береһе лә бындай машина менән маҡтана алмай.

"Асыулы сағыңда хөкөм сығарма, бәхетле сағыңда вәғәҙә бирмә", тип әйтәләр әйтеүгә. Кәрим ныҡ асыулы сағында барлыҡ класташтары алдында "Крузак" алмаһаммы, тип вәғәҙә биргәндәй булды. Ысынында иһә, үҙ-үҙенә хөкөм дә сығарҙы. Әйткән һүҙ - атҡан уҡ. Хәҙер инде ул шул һүҙендә, үлһә лә, торорға бурыслы. Кем уйлаһын инде: тап ошо осрашыуҙа Кәримдең тормошо ҡырҡа боролош кисерер, тип. Һе, мәле еткәс, бәлки, Сәмиғуллаға рәхмәт тә әйтер әле Кәрим. Тик әйтерме икән? Күрһәтер шул сағында ошо Сәмиғулла ишеләргә кемдең кем, нимәнең нимә икәнлеген. Көлкөләрен яңыртыр. "Ювелир оҫтаһы", имеш...

* * *

Талпыныуы сикһеҙ, ниәттәре ҙур булһа ла, маҡсаты ҡолас етмәҫлек, үрелеп ҡарайым тигәндә генә лә баштан кәпәс төшөп китмәле ине шул. Кәрим тәүлек әйләнәһенә ҡырҡҡа ярылып эшләһә лә, биш йыл эсендә ундайын машина һатып алырлыҡ аҡса туплай алмай. Береһен-береһе ҡыуалап үҫеп килгән ҡыҙҙарын да ҡарарға кәрәк. Ҡыҙҙар наҙлы, әммә ана шул наҙ өсөн дә түләргә кәрәк шул. Ҡыҫҡаһы, малайҙарға ҡарағанда ҡыҙҙарҙы тәрбиәләп үҫтереү кеҫә йәһәтенән ауырыраҡҡа төшкәнен ҡыҙ үҫтергән генә белә. Етмәһә, Зөлхизә менән Зөбәйҙәләре бер-бер артлы мәктәпкә барҙы.

Ауылда күптән инде эш урындары юҡ, колхоз-совхоздарҙың ҡолағанына ла биш былтыр. Оҙаҡ уйлаһаң, бер нәмә лә килеп сыҡмай. Иң тәүҙә һөҙөргә, шунан һуң ғына мөгөҙөңә нимә килеп эләккәнен байҡау лазым. Тәүәккәллек таш яра. Крәҫтиән балаһы крәҫтиәндәрсә эш итә инде. Тәүге йылында Кәрим ике йөҙ ҡаҙ себеше алып ебәрҙе, һимертергә өс баш башмағын айырып ҡуйҙы. Үҙенең һәм ауылдағы ташландыҡ ике өйҙөң картуфлыҡтарын силсәүиттән рөхсәт һорап һөрҙөрөп, өсөһөн дә мансылдырып картуф сәсте. Себеште көҙ һанайҙар. Ҡырпаҡ ҡар яуыуға, хужа усында төйөрөм генә аҡса барлыҡҡа килгәнен тойҙо. Тик был аҡсаһын ул кеҫәһенә, күптәр кеүек, банкҡа һалып ҡуйырға ашыҡманы. Аҡса аҡса эшләргә тейеш. Икенсе йылына ҡаҙ себештәренең, һимертергә ҡуйылған башмаҡтарҙың һаны ике тапҡырға артып китте. Ҡаҙҙар һәм башмаҡтарына ем, көрпә алырға ла аҡсаһы етте.

Тап ошо мәлдә ҡасандыр алынып онотолған пай ере барлығы Кәримдең иҫенә төштө. Хәҙер инде ул картуфлыҡтар менән ваҡланып торманы. Пай ерен күрше ауылдағы фермерҙы яллап һөрҙөрөп, уның техникаһы менән картуфын да сәстереп ҡуйҙы. Хәләл көс менән табылғандың ҡәҙерен белә Кәрим. Ҡаҙҙары менән башмаҡтарын һуйып, ваҡлап һатты. Ауылға килеп, күмәртәләп ит йыйып йөрөүселәргә әйләнеп тә ҡараманы. Баҙарға ит һатырға үҙе сыҡты. Йыйып алған картуфын ҡалалағы

комбинаттың етәкселеге менән һөйләшеп, бер юлы тапшырҙы. Комбинаттың йөк машиналары тейәп алып китте уңышын.

Ҡырпаҡ ҡарҙа түбәһе күккә тейҙе. Кәрәкле сумманың яртыһынан күберәге тупланды ҡулына. Буйтым ғына. Яҡынса иҫәбе буйынса тағы бер йыл ынтылһа, алдағы йылда ихатаһында "Крузак" балҡып ултырасаҡ. Әлеге аҡсаһы ҡулдан да ундай машинаны алырға етерлек. Әммә был йәһәттән Кәримдең үҙ һүҙе лә бар: кәләште - ҡыҙҙан, машинаны - нулдән.

Малдар ҡышҡа ҡураға ингәс, тик ятырға ғына күнекмәгән Кәримдең күҙенә гәзиттәге бер иғлан салынды. Бер бай ғына миллионермы-миллиардермы, олигархмы-ала ҡараҡмы, яҡындағы ҡалала сауҙа үҙәге төҙөргә эшселәр йыя икән. Төҙөлөшкә сварщиктар талап ителә икән. Кастинг тигән нәҫтәкәй менән алалар икән. Оҙаҡ уйлап торманы, китте шунда. Ҡулы эш белгәс, моңмо ни? Тимерҙе төрлөсә иретеп йәбештереп ярыштылар. Ғариза биргән алтмышлап дәғүәсенән эшкә ҡабул ителгән бишәүҙең береһе Кәрим булып сыҡты. Ул эшкә көн һайын ауылдан үҙ машинаһында йөрөнө. Ике ҡулына бер эш. Алтын ҡуллы тырыш эшсене шундуҡ күреп тә алдылар. Үҙен иретеп йәбештереүселәрҙең бригадиры итеп тәғәйенләп ҡуйҙылар. Тәүге айҙарҙа хужа алдан вәғәҙә иткән эш хаҡының яртыһын ғына түләп килде лә, егеттәрҙең ышаныслы булыуы һыналғас, ҡалған сумманы ла бер юлы иҫәптәренә күсерҙе. Иш янына ҡуш булды Кәримдең көтмәгәндә ошо төҙөлөш бригадаһында эш башлауы. Был шөғөлө уға билдәләгән маҡсатына тиҙерәк барып етергә ярҙам итәсәк.

Әммә донъя бер алдын, бер артын күрһәтә тигәндәй, алдағы йәйҙең ҡоро килеүе, шул сәбәпле фуражға хаҡ артыуы, бесән наҡыҫлығы бәкәлгә һуҡты. Ауыл халҡы малын күмәртәләп һуйып, баҙарға тултырҙы һәм иткә хаҡ төштө. Картуф та йүнле үҫеп сыҡманы. Ҡатыны ҡыҙҙары менән көнө-төнө үҫентеләргә ҡоҙоҡтан һыу ҡойоп торһа ла, ямғырһыҙ картуфтың картуфы ла ырап үҫмәй икән. Кәрим ергә һәм башмаҡтарҙың, ҡаҙҙарҙың тамағына һалған сығымдан саҡ-саҡ ҡына, утыҙ процент самаһы ғына артыҡ килем ала алды. Иҫәп тотҡан суммаһы килеп сыҡманы.

Унының ғына етмәгән, донъя, ил кимәлендә башланған иҡтисади көрсөк Кәримдең алдына тағы ла бөтөнләй көтөлмәгән ауырлыҡтарҙы килтереп ҡуйҙы. Инфляция башланды. Быны-быны дефолт булырға тора тиҙәр банктар хеҙмәткәрҙәре. Эштәр улайға китһә, Кәримдең өс йыл буйы ҡара тирен түгеп йыйған хәләл аҡсаһына "Крузак"тың үҙен түгел, бер тәгәрмәсен дә һатып алыу мөмкин булмаясаҡ. Ул сағында инде ер тырнап, йә сәсенде йолҡоп иларға ғына ҡала.

Бер көн Кәрим эштән ҡайтҡас, һәр ваҡыттағыса, киске ашҡа ултырҙылар. Ниңәлер ҡатыны Зөләйха иренең борсолоулы мәшәҡәттәренә битараф һымаҡ тойолдо. Туҡтауһыҙ йылмая, көлә. Бер-береһен быҒаса һүҙһеҙ ҙә аңлай ине улар. Ир ҡырҡҡа ярылырҙай булып йөрөгән саҡта ҡатынының быңдай ҡыланышын нимәгә юрарға ла белмәне. Был йәһәттән Кәрим яңылышмаған булып сыҡты. Зөләйха өҫтәл артынан тороп киткән ҡыҙҙарының ҡайһыһы ҡайҙа йүнәлгәнен көтөп кенә ултырҙы ла, үҙенең сәйер хәләтенең серен асып һалды.

- Кәрим, бөгөн район үҙәгенә барып, табипҡа күренеп килдем...

- Ауырыйһыңмы ни?

- Юҡ та...

- Атыу?

- Шул, мин тағы ла ауырға ҡалдым...

- Нимә?

- Ауырға ҡалдым, тием. УЗИнан ҡараныҡ...

- Кем?

- Ҡыҙ...

- Нимә?

- Нимә түгел, кем. Тиҙҙән ҡыҙыбыҙ була...

- Ҡасан тиҙҙән?

- Ғинуарҙа...

- Ниңә һин был хаҡта миңә иртәрәк әйтмәнең? Юҡ, ниңә иртәрәк ауырға ҡалманың?

Ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәренең мәғәнәһен аңларлыҡ хәлдә түгел ине Кәрим. Ул тәүҙә туҡтауһыҙ көлөргә тотондо ла, аҙаҡ ҡатынын бәпәй һымаҡ күтәреп, өй буйлап күтәреп йөрөтә башланы. Үҙе туҡтауһыҙ һөйләнде.

- Аптыранам был ҡатынға,
Ҡыҙ таба ла, ҡыҙ таба.
Мин әйтәм малай хаҡында,
Докторға барып ҡара...

Ғаиләләре өсөн лозунгҡа әүерелгән был шиғырҙы артабан Зөләйха дауам итте:

- Аптырағас, шул докторға
Үҙең бараһыңмы ни?
Ҡатын тапмаған малайҙы
Үҙең табаһыңмы ни?

Уларҙың кинәйәле итеп ирәүән шаярышыуын ҡыҙҙары ла күреп ҡалды. Тәүҙә төпкө бүлмәлә телевизор ҡараған Зөлхизә менән Зөбәйҙә улар янына йүгерешеп сыҡты. Ҡыҙҙар аталары менән әсәләренең алмаш-тилмәш һөйләгән шиғырынан шуны аңланылар: тиҙҙән уларҙың тағы ла бер һеңлеләре донъяға киләсәк. Һеңлекәштәре Зөлхәбирә, Зәлифә, Зөмәрә тыуыр алдынан да улар тап ошо шиғырҙы һөйләгәйне. Бер аҙҙан тыштан бәләкәй һеңлеләре йүгерешеп килеп инде. Айыу бейетәләр тиһеңме? Улар ишектән килеп инделәр ҙә, әсәләрен күтәргән аталарын күреп, ишек төбөндә йомош һорап ингән балаларҙай ҡатып ҡалдылар.

Бер аҙҙан ғаиләләге шатлыҡлы яңылыҡ уларға ла мәғлүм булды. Мәктәптә уҡыусы Зөлхизә менән Зөбәйҙә тиҙҙән донъяға киләсәк туғандарының әсәләренең эсендә икәнен беләләр ине инде. Тик береһенән-береһе бәләкәс Зөлхәбирә, Зәлифә һәм Зөмәрә кескәй туғандарын Һаҡмарҙан тотоп алалар тигәнгә ышанғас, был хәлгә тик үҙҙәренең йәшенә ярашлы кимәлдә генә ҡыуандылар, булһа кәрәк. Кис яҡҡас, Кәрим менән Зөләйха алтынсы ҡыҙҙарына йола буйынса "З" хәрефенә башланған исем эҙләп, Зарина тигәндә туҡталырға булдылар. Ҡыҙҙарҙың тыуасаҡ һеңлеләрен ҡаршыларға нисек әҙерләнеүен күҙәтеүе оло бер кинәнес ине. Кемдер ниндәйҙер уйынсығын бер кем дә белмәгән ергә йәшерә, икенселәре кейем хәстәрләй, кәнфит, печенье, һағыҙ запаслай...

**(Дауамы бар).**

*✓ Һуңғы ваҡыт беҙ концерттарҙы, спектаклдәрҙе күңел асыу сараһы итеп кенә ҡабул итә башланыҡ. Тап ошо тәңгәлдә сибайҙарҙың әлеге тамашаһын аш-һыу өлкәһендәге милли тәрбиә әсбабы итеп күрһәтергә була.*

*АФАРИН!*

# СИБАЙҘАРҒА - МӘҘХИӘ!

**Бөгөн тукланыу, аҙыҡ-түлек, ашаған ризыҡтың сифаты һәм етештереү ерлегенә бәйле мәсьәләләр бик ҡырҡыу тора. Халыҡ аҙыҡтың да рухи ҡиммәттәр кеүек үк кешене төрлө яҡтан үҫтерә (физик яҡтан ғына түгел), үҙгәртә, тәрбиәләй ала торған мөһим йәшәү сығанағы икәнен аңланы. Ситтән алып киленгән аҙыҡ-түлектең беҙҙе үҙаңыбыҙҙан ситләштереүен, беҙҙәге генетик хәтерҙе юйыу мөмкинлеген бөгөн ғалимдар ҙа иҫбатланы инде. Үҙ ерлегебеҙҙә етештерелгән милли ризығыбыҙҙы алға ҡуйыу, уны пропагандалау һәм шифалы-туҡлыҡлы булыуын күрһәтеү - беҙҙең бурыс.**



Бына ошондай әһәмиәтле бурысты атҡарҙы ошо көндәрҙә Сибай концерт-театр берекмәһе. Улар "Милли аҙыҡ тәнгә шифа, йыр-моңдары йәнгә шифа" тип исемләнгән ҡабатланмаҫ тамаша алып килеп күрһәтте баш ҡала халҡына.



Республикабыҙ менән Фольклориадаға әҙерләнгән ваҡытта, был программа бик тә урынлы һәм актуаль булды. Ошо урында тағы ла "Ни сыҡһа, шул сибайҙарҙан сыға!" тигән һоҡланыу һәм көнләшеү ауазы ауыҙҙан ысҡына шул. Сибайҙар бит улар - башҡорттоң миллилеген, колоритлы ауыҙ-тел ижадын, тәрән тамырлы фольклор өлгөләрен тереләй һаҡлаған һәм йәшәткән халыҡ. Был тәңгәлдә улар менән ярышып та, уларҙы билдәләмәй ҙә булмай.

Тамашаның башланып китеүе үк үҙ эсенә тартып ала торған мауыҡтырғыс ҡыҙыҡлы булды. Был тәңгәлдә режиссер Миңзилә Ҡотошованың бай фантазияһы үҙ ролен үтәне. Спектакль киңлегендә ине сәхнә тулылығы.

...Ирәндек аҫтында урынлашҡан ябай башҡорт ауылы Фольклориадаға әҙерләнә. Оло ҡунаҡтар көтөлә. Был эште етәкләү Старостаға, Женсоветҡа һәм Завклубҡа тапшырыла. Ауылды тиҙ арала "Айыҡ ауыл"ға әйләндереү, төҙөкләндереү һәм шул сферала хеҙмәт итеүселәр әйтмешләй: "үләнде йәшелгә, һыуҙы зәңгәргә, болоттарҙы аҡҡа буяп ҡуйыу"ға тиклем барып етеү - бөгөнгө көн ҡылыҡһырламаһы түгелме ни? Үҙебеҙҙең тикшереүҙәргә, конкурстарға әҙерләнеүҙән аҙыраҡ көлөп-семетеп алыу тамашаны юморға байыта ғына.



Ауыл халҡының рестарандар ризығы әҙерләп һыйларға аҡсаһы юҡ, улар үҙ ҡулдары менән бешерә һәм әҙерләй белгәндәрен етештерә башлай. Һәр кем етештергән ризығын ауыл уртаһына һуҙылған өҫтәлгә алып килә. Иң беренсе, әлбиттә, икмәк килә. Имәктең дә бер төрлөһө генә түгел. Әсе икмәк, сөсө икмәк, ҡулғы икмәк, майғы икмәк, өшә, бауырһаҡ, йыуаса, ҡабартма, күмәс, көлсә һәм башҡалар. Һәм ошо он ризыҡтарының һәр береһенә тигәндәй йыр-таҡмаҡ бар. Уларҙы башҡарғансы икенсе төр аҙыҡтар әҙер була. Аш, һалма, бишбармаҡ, тултырма, ҡаҙы, ҡарта, ыуыс...

"О! Тултырма! Ту-ту-ту-ту-тултырма!" - тип бөгөлә-һығыла джаз йырлай әле берекмә йырсылары. Йә булмаһа:

"Башҡа сәбәп табалмағас
Бишбармаҡҡа саҡырған", - тип тә таҡмаҡлай.

Ә инде эсемлектәргә килгәндә, ҡымыҙҙың бер үҙенә генә әллә нисә төрлө йыр һәм бейеү арналды. Был легендар эсемлек милләтебеҙҙең ҡул осондағы иң тәүге ризыҡтарының береһе булараҡ, уның йыр-моңонда ла, ауыҙ-тел ижадында ла, ҡарһүҙендә лә сағылыш таба. Ә инде сәй тураһындағы мәғлүмәт бер энциклопедия һымаҡ ине. Башҡорттоң үлән сәйен маҡтаны ғына түгел, һинд, цейлон, ҡытай сәйҙәренән айырмалы итеп күккә сөйҙө. Ысыны шулай ҙа һуң, бөгөн беҙ һатып алған сәйҙәр ситтә үҫкән үләндәр улар, әллә күпме буяу, химикат, тәмләткестәр менән һуғарылған. Беҙ шуларҙы эсеп, сәй наркомандарына әйләнеп бөткәнбеҙ. Үҙебеҙҙең үлән сәйҙәре иһә беҙҙең организмға ла, мейе системаһына ла шифа ғына биреүсе витаминдар йыйылмаһы. Бына ошоларҙың барыһын да уйын-көлкө аша еткерҙе беҙгә Сибай концерт-театры берекмәһе артистары.

Һуңғы ваҡыт беҙ концерттарҙы, спектаклдәрҙе күңел асыу сараһы итеп кенә ҡабул итә башланыҡ. Ә уларҙағы мәғәнәне, тәрбиәүи төшөнсәләрҙе, фәһем алыу сараларын онотточ. Беҙ ҙә онотточ, мәҙәниәт усаҡтары ла онотторҙо. Тап ошо тәңгәлдә сибайҙарҙың әлеге тамашаһын аш-һыу өлкәһендәге милли тәрбиә әсбабы итеп күрһәтергә була. Һис арттырыу түгел, программа был дәрәжәгә хаҡлы. Сөнки коллектив шундай ҙур миссия үтәй: милләттең сәләмәтлеген, киләсәген, туҡланыу сифатын ҡайғырта. Зәңгәр экрандар көнө-төнө сит ил, сит ерҙәр продукцияһын рекламалаған, супермаркеттар беҙҙе шул билдәһеҙ ризыҡтар менән өйөп ташлаған заманда, артистарыбыҙ милли ризыҡтың өҫтөнлөгөн иҫбатлай һәм үҙебеҙ етештергән, ата-бабаларыбыҙ борон-борондан туҡланып йәшәгән тәғәм менән туйынып йәшәргә өндәй. Һәм, ысынлап та, беҙ бөгөн шул асылға ҡайта барабыҙ һымаҡ. Бөгөн һәр ерҙә ҡымыҙ-буҙа һатып алып була, ҡалала ла ауылда етештерелгән һөт аҙыҡтары бар, интернет селтәрҙәрендә башҡорт кәсепселәре үҙ продукттарын тәҡдим итә ала. Ә сибайҙарға, һәр ваҡыттағыса, мәҙхиә!

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

✓ *Пациент үҙ аллы системалы рәүештә тын алыу гимнастикаһы эшләргә, саф һауала йөрөргә, скандинавса атлау менән шөғөлләнергә тейеш. Шулай уҡ нормаль йоҡо, рациональ, витаминдарға бай, балансы туҡланыу мөһим.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МИЛЛӘТ ТӘ...

## һомғол йә ябыҡ була

■ Халыҡ-ара табиптар коллективы Европалағы "йыуан" һәм "һомғол" милләттәрҙе атаған. Тикшеренеү барышында яҡынса 250 мең кешенең мәғлүмәттәре тикшерелгән. Ниндәйҙер милләттең уртаса буйы ни тиклем оҙонораҡ, улар шул тиклем һомғолораҡ икән һәм уларҙың тән массаһы индексы ла аҙыраҡ. Иң оҙон һәм һомғол тип скандинавия илдәре - Норвегия, Швеция, Дания халҡы табылған, испандар, итальяндар, португалдар, шулай гректар - иң тәпәше. Ғалимдар билдәләүенсә, был генетик үҙенсәлектәр генә түгел (генетика климат факторҙары һөҙөмтәһендә формалаша), ә милли кухня йолалары, шулай уҡ экология ла йоғонто яһаған. Тикшереүҙәргә славян халыҡтары инмәгән.

■ Катания университеты белгестәре әйтеүенсә, уңыш ғали йәнәптәренең ролен баһалап бөтмәйбеҙ. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, донъялағы иң бай, иң һәләтле, иң аҡыллы тип табылған күп шәхестәргә күпселек осраҡта бары тик уңыш йылмайған. Ғалимдар меңләгән виртуаль кешеләрҙән йыйылған компьютер моделе яһаған. Уларҙың ҡайһыларының аҡсаһы күберәк, ҡайһылары һәләтле булған, ә ҡайһылары иһә, киреһенсә, уңышҡа өлгәшә алмаған. 40 йылға һуҙылған карьера дауамында ҡайһыларға бер нисә тапҡыр ҡапыл уңыш йылмайған. Уларҙың карьера баҫҡысы буйлап күтәрелергә һәм һәләтен күрһәтергә мөмкинлек килеп сыҡҡан. Ҡайһыларға уңыш әйләнеп тә ҡарамаған, тәбиғи һәләттәре һәм тырышлыҡтары булһа ла, бындайҙар күләгәлә ҡалған. Иң ҡыҙығы, асыҡланыуынса, иң һәләтлеләр иң юғары уңышҡа өлгәшә алмаған. Яуап ябай. Сөнки уңыш ғали йәнәптәре уларҙың шәхесен урап үткән.

■ Социаль селтәрҙәр пластик хирургтарға байырға булышлыҡ итә. Рутгерс университеты белгестәре раҫлауынса, селфи эшләгәндә танау 30 процентҡа ҙурыраҡ булып күренә икән. Был күптәрҙе пластик операцияға этәрә, имеш. Хирургтар билдәләүенсә, социаль селтәрҙәрҙә матурыраҡ күренеү өсөн танауының формаһын үҙгәртергә теләүселәрҙең һаны ла күбәйә бара.

■ Рио-де-Жанейро дәүләт университеты тикшеренеүселәре кунжутҡа бай ризыҡтарҙы күберәк ашарға тәҡдим итә. Улар организмдың әселәнеүенә юл ҡуймай. Ғалимдар, гипертония, 2 типлы диабет сирлеләрҙең әселәнеү маркеры кимәленә кунжут ҡулланыуҙың тәьҫирен тикшергән. Асыҡланыуынса, кунжут ашағандан һуң организмда антиоксиданттар кимәле күтәрелгән, әселәнеү кимәле түбәнәйгән.

■ Бүләк биреү - кешелек тарихындағы иң боронғо йолаларҙың береһе. Психологтар билдәләүенсә, был кешенең психик торошона ла яҡшы тәьҫир итә. Ябай ғына бүләктән дә ыңғай тойғолар кисергән кешеләр була. Кемдер ҡиммәтле бүләктәр ҡабул итеп өйрәнгән, уларҙың иһә кәрәкле әйберен ала алмаһа, кәйефе төшә. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙең кәйефе йыш үҙгәреп тора. Бүләк биреүсе лә, кешенең ҡыуаныуын күреп, шатлана. Балаға бүләк эшләп, уны ҡыуандыраһығыҙ икән, ул да һеҙҙе үҙен яҡшы тотоуы, дәрестә алған яҡшы билдәләре менән бәхетле итергә тырышасаҡ, тимәк, ул ала белеү генә түгел, бирә белеү ҙә мөһимлеген аңлаясаҡ, ти ғалимдар.

БЕР АУЫРЫУ ЯҘМАЛАРЫ

# ИҢ МӨҺИМЕ - МИН ТЕРЕ!



**Тажзәхмәт-тажзәхмәт, тип саң ҡағыуыбыҙға йыл да булып килә. Ҡасандыр Ҡытайҙың Ухань ҡалаһын ғына түгел, тотош донъяны пыран-заран иткән сир беҙҙең Бөрйәнгә лә килеп етер тип, ике ятып бер төшкә инмәне. Ҡайҙа, ҡасан эләктерелгәндер был зәхмәтте - бер Аллаһ белә. Шуныһы ғына асыҡ: мин уны эҙләп йөрөмәнем.**

### Тәүге билдәләр

Сирҙең билдәләренең береһе - еҫ һиҙеүҙе юғалтыу, тиҙәр. Был нәмә миңә янамай - танауым күптән еҫ һиҙмәй. Тәүҙә хәлем бөтөп, эшкә ҡул бармай йөрөнөм. Шулай ҙа эшкә барҙым. Баш мөхәррир теге температура үлсәгес "бистәлит"ен маңлайға яҡын килтереп, температураны үлсәне - эшкә ярарлыҡ. Ул арала уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһенә йүгерҙем - унда ла температураны үлсәп кенә индерҙеләр - әллә нисә сәғәт ултырып ҡайттым.

Төшкө ашҡа ҡайтҡас башланды ғәләмәт: ҡоҫоп, температурам күтәрелеп, маз булынды. Тажзәхмәт йоҡмаһын, тип, ихатаға күпме сыҡһам, шунса тапҡыр әрем төймәсектәрен 7-11 бөртөк итеп сәйнәп, интернеттан видео ҡарап, шундағыса, керән тамырынан төнәтмә эшләп эсеп, теге яман сиргә ҡаршы оборона тотоп йөрөлә ине инде. Юҡ, үткәнгә оҡшамай был сир. Йөрәктең хәлен алды. Үҙемдең саралар ярҙам итмәгәс, "тиҙ ярҙам" ға шылтыратам: мин шулай-шулай үләндәр эстем, температура төшмәй, тейем. Тиҙ килде "тиҙ ярҙам". Укол ҡаҙап, дарыуҙар яҙып киттеләр. Үҙ-үҙенде дауалау менән шөғөлләнмә, тип киҫәттеләр.

Төнөм инде температура менән көрәшеп, ыңғырашып үтте. Тән туҡмалған кешенеке кеүек. Ер шарында 52 йыл йәшәп, биш тапҡыр операция өҫтәленә ятып та былайтып ауырығанды белмәгәс, таныштар аша инфекционистың номерын табып, шылтыратып, хәлемде һөйләнем. Әлеге лә баяғы коронавирус түгелме икән, тигән уй мейене сүкеп-сүкей. Тын ҡыҫылыу, йүтәл булмағас, түгелдер, дүшәмбе хирургҡа һәм терапевтҡа ҡабул итеүгә яҙылырға кәрәк, ти табип, минең ниндәй үләндәр менән маз килгәнде ишеткәс. Үҙебеҙҙең чатҡа ла шаяртып яҙам: "Минең хәлем юҡ, коронавирус булмаһа ла, шуның ҡустыһы менән ауырыйым, шикелле..." Итем һөйәгемдән айырылып барған кеүек һыҙланыу алды тәнде. Тағы ла: температура 38,5-38,8-ҙән төшмәй. Бер парацетамол, ярты аспирин эсеп ҡарайым - файҙаһы юҡ.

Дүшәмбене саҡ еткерҙем. Таң менән анализ биреп, табипҡа төштән һуң барҙым. Дауахана тауына өс тапҡыр ял итеп, саҡ мендем. Минең "бәхеткә", температура үлсәп ултырған ҡыҙ юҡ саҡ - йылп итеп инеп, сират алам терапевҡа. Тышта килеп тороп көн эҫе, ә эстә - үтатма. Эскәмйәнән урын алып, табипты көтәм. Ниһайәт, миңә сират етә. Эскә инеп, хәл-әхүәлде бәйән иткәс, табип: "Ниңә индерҙегеҙ кешене юғары температура менән?" - тип көйә. "Унда берәү ҙә юҡ саҡта индем", - тием. Мине йәһәтләп инфекционист бүлмәһенә алып баралар. Унда ҡарап-тикшереп, дарыу-үләнде дозаһынан артыҡ ҡулланғанһың, тип, дарыуҙар яҙып ҡайтаралар. Ятам тегеләр яҙған ике мең ярымлыҡ дарыуҙарҙы аҡыллы ғына һәм ваҡытында эсеп. Юҡ, төшмәгәс төшмәй температура. Төнгә оторо ҡыҙып күтәрелә.

Иртәгәһенә миңә инфекционист үҙе шылтырата: "Шаршамбы йә йома Белоретҡа КТ-ға (компьютер томографияһына) бараһығыҙмы, ярты сәғәттән яуап кәрәк", - ти. Икеле-микеле уйҙарға бирелеп ятҡас, шаршамбы барырға кәрәк, юғиһә, һуң булыуы бар, тигән ҡарарға киләм. Тамаҡҡа аш бармай, һыу эсәм дә һыу эсәм. Шаршамбы Белоретҡа юлланабыҙ. Мин "тиҙ ярҙам" менән бармаҫҡа булдым - унда сирлеләр бара, берәйһендә теге тажзәхмәт булып ҡуйһа, тип, улым алып барырға булды...

### Госпиталдә

Һе, тиергә генә ҡалды. Кешенән ҡурҡып йөрөһәм, үҙем кеше өсөн ҡурҡыныс булып сыҡҡанмын - сиратта тороп, КТ үтеп сыҡҡас, һөҙөмтәләрен бөгөн әйтмәйҙәр, тигәстәре, йәһәтләп ҡайтыу яғына һыпырттыҡ. Сермәнгә килеп еткәс, "тиҙ ярҙам"да эшләүсе Розалия шылтырата: "Айһылыу апай, һиңә табип кире боролорға ҡушты. Поражение 2/3, тиҙәр", - ти. Ҡот китте. Кире боролоп елдерәбеҙ.

Хәҙер беҙҙе КТ үткән ерҙән өҫтәрәк бинала ҡарайҙар. Бер аҡ халатлы ҡан баҫымын үлсәй, береһе бармаҡты бер дүрткел нәмәгә ҡыҫтырып, ниҙер үлсәй. Минең хәл мөшкөл. "Гарифуллину в ковидгоспиталь", - ти табип. Икеһе лә скафандрҙа. Хәҙер инде аңыма барып етә - миндә теге... теге тажзәхмәт...

Шәфҡәт туташы микән - йәһәтләп мине етәкләп тигәндәй икенсе ҡатҡа мендерә. 11-се палатаға алып бара, юрған, мендәр тышы, простыня тоттора. Миңә инде ҡайҙа алып барһалар ҙа, ни эшләтһәләр ҙә - барыбер. Бынау температура төшһөн дә, берәй палатаға инеп йығылырға ғына кәрәк...

Одеялға тышын кейҙерерлек хәлем юҡ икәнде күргәс, мине йәлләпме, хәлемә инепме, скафандрҙағы шәфҡәт туташы үҙе ярҙам итә. Ул арала миңә ЭКГ эшләп, система ҡуйып та ебәрҙеләр. Арҡа ауырта, тын алыу ҡыйын. Эсегеҙгә ятығыҙ, был сирҙән шулай кәрәк, тиҙәр. Төнөн венаға, кендек тапҡырына, йомшаҡ ергә әллә нисә укол эшләп киттеләр.

Йоҡларһың йоҡламай ҙа. Палаталағы ете сирленең өсөһө шәкәр диабеты менән яфаланғандар. Уларға Аллаһ үҙе түҙем бирһен - көнөнә 6-9-ар система, бихисап укол, шәкәрҙәрен үлсәйҙәр, уныһы 24-26 булып китә. Бешәләр генә укол, система менән. Билдәле, укол-системанан һуң батшалар йәйәү йөрөгән ергә йөрөү зарур. Төнө буйы тәпешкәләр шипылдай, сирлеләр ыңғыраша, көркөлдәгәне, тыны ҡыҫылғаны ҡайҙа...

### Намаҙҙы ла ҡалдырмайым...

Иртәгәһенә таң менән һәр төрлө анализ алып бөттөләр. Таңғы биштән башлана системалар. Шап-шоп, таҡ-тоҡ. Күп итеп дарыуҙар бирәләр. Көндәлек ашай торғаны бәғзе көн 12-гә барып етә. Бәғзеһен ашаһаң, ҡоҫҡо килә. Алданыраҡ ятҡан "тәжрибәле"ләр, йоморолай йоторға кәрәк, тигәстәр, сәйнәп тормай ғына йотоп та ебәрәбеҙ. Ҡурмас урынына ашайбыҙ инде, башҡортса әйткәндә.

Төшкә ҡарай температура төшөп, хәл инде бит. Бер нисә намаҙ ҡазаға ҡалды. Намаҙҙы ҡалдырһам, үлермен төҫлө. Туҡта, мәйтәм, Айһылыу, тор, намаҙға

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# СИРҘӘН ҺУҢ...

## организмды нисек тергеҙергә?



**Коронавирус инфекцияһын еңел, симптомһыҙ үткәргән пациенттарға ла медицина реабилитацияһы кәрәк һәм ул мотлаҡ табип күҙәтеүендә үтергә тейеш. Был процесс бер нисә аҙнанан бер айға тиклем, айырым осраҡтарҙа бер йылғаса һуҙылыуы мөмкин. Сирҙе нисек еңел үткәрергә, нисек итеп тиҙерәк һауығырға һәм эҙемтәләр ихтималлығын кәметергә? Был хаҡта Республика табип-физкультура диспансерының медицина реабилитацияһы бүлеге мөдире Елена ИБРАҺИМОВА бына нимәләр белдерә.**

**Билдәләре.** Коронавирус сиренең билдәләре төрлө вариацияла булыуы мөмкин: тәм, еҫ һиҙмәү, тын алыуы ауырлашыу, тын ҡыҫылыу, күкрәк ситлегенең ҡыҫыуы, ҡоро йүтәл; температура күтәрелеүе, өшөү, быуындар һәм мускулдар ауыртыуы, даими арыу тойғоһо, баш ауыртыу, эс китеү, күңел болғаныу, ҡоҫтороу. Йәштәрҙә ул үрге тын алыу юлдары менән сикләнһә, ололарҙа билдәләр ул тиклем үк асыҡ булмауы ла мөмкин. Шуға ла был диагноз ҡуйыуҙы ауырлаштыра, һөҙөмтәлә яңылыш диагноз ҡуйыла йәки билдәләнгән дауа һөҙөмтә бирмәй. Оло йәштәге пациенттарҙа елһенеү процесы симптомһыҙ үтеүе ихтимал. Был иммунитеттың түбәнәйеүе, һаҡланыу көстәренең көсһөҙләнеүе менән бәйле. Юғары температуралы биҙгәк күҙәтелмәүе, тән температураһы 37 градустан артыҡ күтәрелмәүе йәки инфекция

✓ ***Бик оҙайлы һәм ҡыйын буласаҡ аяҡҡа баҫыу процесы, тинеләр. Бөтә нәмә - Аллаһ ҡулында. Хатта бер генә һулышыбыҙ ҙа! Элек көйгәнгә көймәйем, борсолғанға төкөрөп бирәм. Иң мөһиме - мин тере, мин - балаларым, ғаиләм менән.***



йәбеш, йәшәгең килһә... Көс-хәл менән тороп, тәһәрәтләнәм дә ҡалған намаҙҙарҙы ҡаза ҡылам. Әлдә эргәлә батарейка - шуларға йәбешә-йәбешә торам. Хәл юҡ икән дә баһа сәпсим. Шулай ҙа ныҡышам - миңә һауығырға, торорға кәрәк... Улымдың туйы булмаған, килен уҡып бөтмәгән... Үлергә шыпа ярамай. Сәждә һайын ялбарып шифа һорайым...

Әллә көслө укол-системаларҙан, әллә низән - миндә йоҡоһоҙлоҡ башланды. Палатала иң йәше - 1989 йылғы Белорет ҡыҙы. Ул телефон аша үҙҡурсаланыуҙа ултырған беренсе кластағы улы менән өйгә эш эшләп ҡаңғыра. Әүжәндең мәктәп директоры үҙе лә, ире лә ята. Ул да телефон аша етәкселек эштәре менән шөғөлләнә. Минән бер көн алда ятҡандар. Инсультына ошо яман сир өҫтәлгән мәрйә ныҡ ыҙалай. Ярты кәүҙәһе ҡыбырламай. Беҙ, исмаһам, тороп йөрөйбөҙ. Уға бигерәк ауыр. Теле лә тотлоҡҡас, әйткәнен йөҙ һорап, саҡ аңлайбыҙ. Әлхәмдүлилләһ, минең хәл уныҡы менән сағыштырғанда, тип йыуатам үҙ-үҙемде.

Сатурация һәйбәтләнә, хәрәкәт итегеҙ, тын алыуға гимнастика эшләгеҙ, ИВЛ-ға ятмаҫҡа тырышығыҙ, ти ир табип. Йәнтәслимгә тырышабыҙ. Үҙебеҙҙең хәл самалы - сайҡалып-сайҡалып, яңы тыуған быҙау ише тәнтерәкләп китәбеҙ. Әүжән мәктәбе директоры көслө рухлы, оптимист ҡатын - әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, шулайтайыҡ, былайтайыҡ, тип кенә тора.

## Бирәм тигән ҡолона

Аллама мең шөкөр - һәр ваҡыт юлыма һәйбәт кешеләр сығара. Танышып ята торғас, Мәһәҙейҙәге күршем Алһыу еңгәйҙең бер туған апайы булып сыҡты палаталашым Гөлнур апай. Тас Алһыу еңгәй кеүек алсаҡ, ихлас, ярҙамсыл. Үтһеҙ кеше миңә килеште - көслө укол-дарыуҙарҙан ашҡаҙанмы-бауырмы, ашҡаҙан аҫты биҙеме үлтереп ауырта башланы. Бер төн башҡалар ҡур-шар йоҡлағанда ултырып таң аттырҙым. Гөлнур апай ғүмере буйы бала табыу йортонда эшләгән. Белмәгән нәмәһе һәм кешеһе юҡ. Миңә дарыуҙар бирҙе - аҙыраҡ ебәрҙе ауыртыуҙар. Туҡта, мәйтәм, Аллаһы Тәғәлә бушҡа уятмайҙыр, тип, төнгө намаҙ уҡыйым, доға ҡылам, зекер әйтәм. Һин намаҙ уҡығас, беҙҙең палата иң таҙаһы һәм хәүефһеҙе, тип ебәрә мәрйәләр. Береһе бер, ҡуй, уҡыма, тимәйҙәр - шуға һөйөнәм.

Төнгә ҡарай бер оло ғына инәйҙе индереп һалдылар. Ҡураныс ҡына кәүҙәле, әммә кәүҙәһен тура ғына тотоп йөрөгән 79 йәшлек әбей икән. Бәй, үҙебеҙҙең Янһарынан Манапова Кәбирә инәй булып сыҡты. "Башҡорттар бармы, миңә сәй ҡайнатып эсерегеҙ, тамаҡ ҡатты", - тигән бойороҡ ҡатыш үтенесен башҡорто ла, мәрйәһе лә бергә ҡушыла һалып үтәнек. Һәр кемебеҙ ризығын бүлеште. Инәйебеҙ телефондан һөйләшеп, тегеһенә-быныһына бойороҡтарын биреп, ил-көн хәл-әхүәлен белешеп кенә ултыра. Мин ҡайтыр саҡта ҡайғырып ҡалды: "Иң ныҡ теләгәнем - берәй башҡорт килһен инде һинең урынға, мин бит русса белмәйем", - тине. Аҙаҡ хәбәр килде: русса белмәйем, тигән инәйебеҙ мәрйәләр менән тыпылдатып русса һөйләшеп ултыра, беҙҙә кеше ныҡ ауырый, тип, район хәлдәрен дә бәйән итә икән.

## Белорет мосолмандары

Мин, билдәле, госпиталдең итле аштарын, һурпаларын ашамайым. Хәләл булмай ҡуйһа, ҡырҡ көн доғам ҡабул булмай ҡуйһа, тип ҡурҡам. Бер көн бер мосолман шылтырата: "Айһылыу апай, һиңә хәләл аш килтерҙек", - ти. Баҡһаң, Белорет мосолмандарының бер чатымы-төркөмөмө бар икән - шунда яҙһаң (ҡыҙым яҙған), дауаханаларҙа ятыусы мосолмандарға хәләл ризыҡ килтерәләр икән. Өс тапҡыр килтереп киттеләр, Аллаһ риза булһын, сауаптарын насип итһен. Манты, һурпалы аштарын бөтә палата менән ашап киндек! Үҙебеҙҙең Бөрйән имамы Рәсүл хәҙрәтебеҙ минең хәлде ишетеп, өс тапҡыр ризыҡ килтереп китте. Уның билмәндәре, һурпалы йылы ашы менән байрам табыны ҡорҙоҡ. Мин госпиталдән сыҡҡас та ризыҡтар алып барып киткән, Әүжән мәрйәләре "Мосолмандар беҙгә пир ойошторҙо", тип ҡыуанған. Эйе, була бит шундай изге күңелле бәндәләр - Аллаһтың рәхмәте генә яуһын үҙҙәренә.

## Аҡ халатлы фәрештәләр

Бөгөнгө замандың иң хәүефле һөнәрелер ул медик булыу. Заман афәтенә ҡаршы көрәшеп, беҙҙең ғүмеребеҙ, һаулығыбыҙ һағында торған барсаһына мең рәхмәт һәм Аллаһтың рәхмәте яуһын! Ғаиләһен дә ҡайтып күрмәй, үҙҙәренең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйып, тотош смена буйы дауаханала йәшәп, эшләп ятыусы аҡ халатлы фәрештәләргә ни әйтһәң дә аҙ төҫлө! Ике генә шәфҡәт туташы күпме эш башҡара - етмешләгән сирлене ҡарай, тәрбиәләй, ашатып эсерә, система-уколдарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Таблетницаларға дарыуҙар бүлеп һалыуға ғына ике сәғәт ярым ваҡыт китә, тиҙәр. Палаталарҙа ут насарыраҡ булһа, ике ҡат резина бирсәткә кейгән, ауыр скафандрҙа тирләп-бығып, ҡалын битлек аша саҡ тын алып, махсус күҙлек аша саҡ күреп йөрөгән шәфҡәт туташтары бәғзеләрҙең ҡан тамырын таба алмай аҙаплана. Уларға аҙ булһа ла ярҙам булһын тип, телефондың фонарен ҡабыҙып торабыҙ. Һуҡранмай, берәүҙе бер әрләмәй, риза булып ҡына эшләп йөрөйҙәр. Үҙҙәре лә, ғаилә ағзалары ла һау ғына булһын инде! Рәхмәт уларға!

## Өйгә!

Ниһайәт, КТ һөҙөмтәһе әҙер. "Һине йәкшәмбе сығарам, - тине табип. - Өйөңдә 14 көн бер үҙең йәшәйһең". Ҡайтыуға балалар өйҙө бушатып сығып баралар. Йөрәк өҙөлә: "Ҡайҙан килеп эләкте ошо зәхмәт. Йөрәк ярып сыҡҡан балаңа һаулыҡ та һораша алмай, арҡаһынан ҡағып тупылдатып һөйә алмай, алыҫтан тилмереп ҡарап торсәле..."

Өйгә инеү ҡайҙа? Үҙемдән үҙем сикәнеп, шундуҡ - мунсаға. Сумка-кейемдәрҙә соланда төнәй әле бер нисә көн. Спирт менән эшкәртелеп, һабынлап йыуылып яйлап ҡына инә өйгә.

Врачтарҙың биреп ҡайтарған ҡағыҙҙарына - тажлы мөһөргә күҙ һалғым да килмәй, өс көн дарыуҙарын да ашамай ятам әле. Аҙаҡ тағы дарыу, тағы аҡса. Сатурация, ҡан баҫымын үлсәгес яҙҙырып алдырам. Һүҙ өсөн түгел, фәһем өсөн - бөтә ғаиләбеҙгә илле меңдән ашыу дарыу-витамин алырға тура килгән. Ә борсолоу-хафа, йоҡоһоҙ үткән төндәр, йәнтәслимгә сир менән көрәшеүҙе үлсәр ҡалып та юҡ, уларҙы һалыр бизмән дә юҡ!

Иң мөһиме - үҙ аяғымда ҡайтылды. Тормошҡа ҡарашты 180 градусҡа үҙгәртте был сир. Ғибәҙәтемде, зекеремде арттырҙым. Бик оҙайлы һәм ҡыйын буласаҡ аяҡҡа баҫыу процесы, тинеләр. Бөтә нәмә - Аллаһ ҡулында. Хатта бер генә һулышыбыҙ ҙа! Элек көйгәнгә көймәйем, борсолғанға төкөрөп бирәм. Иң мөһиме - мин тере, мин - балаларым, ғаиләм менән. Әлегә Раббым минең өсөн иң хәйерле һәм бәхетле булған ошо юлды миңә инселәгән, тәҡдир ҡылған. Ошоноң өсөн рәхмәттәрем сикһеҙ Уға - ғәләмдәр Раббыһына!

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА,**
**шағирә, Бөрйән районы**
**"Таң" гәзите хәбәрсеһе.**

процесы осоронда үҙгәреүе мөмкин. Шуға күрә ололарға үҙ сәләмәтлектәренә иғтибарлы булырға һәм тәүге билдәләр күренеү менән табиптарға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**COVID-19 менән сирләүселәрҙә ниндәй өҙлөгөүҙәр осрай?** Сир бик йыш ауыр үтә, унан кәмендә ике аҙна дауаланалар. Әлегә коронавирустан һуң ниндәй өҙлөгөүҙәр булыу ихтималлығы аныҡ билдәле түгел. Хатта инфекцияны еңел һәм симптомһыҙ үткәреүселәр ҙә бынан азат түгел. 65 йәштән өлкәндәр бигерәк тә хәүеф аҫтында, сөнки уларҙың иммунитеты көсһөҙләнгән, танау ҡыуышлығының һәм тын алыу системаһының башҡа лайлалы өлөшө үҙенең һаҡлау функцияһын үтәп өлгөрә алмай. Һөҙөмтәлә инфекция сирен ҡуҙғытыусы ҡанға үтеп инә һәм тотош организмға тарала. Был торош хроник сирҙәр менән тағы ла ҡатмарлаштырыла.

Дөйөм алғанда, ауырығандан һуң хәл булмай, тиҙ арыта, иммунитет эшмәкәрлеге боҙола һәм организмдың вируслы ауырыуҙарға ҡаршы тороуы кәмей. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, коронавирус үпкәләргә генә түгел, тотош организмға кире йоғонто яһауы менән хәүефле. Тын алыу, йөрәк-ҡан тамырҙары, ҡан, репродуктив, бәүел-енес системалары эшмәкәрлеге үҙгәрә.

COVID-19 өҙлөгөүе булараҡ барлыҡҡа килгән үпкә фиброзы бик күп патологияларҙың сәбәбе булып тороуы мөмкин: үпкә туҡымалары кислородты үткәрмәгән һәм тын алмаған тупаҫ туҡымаға әүерелә. Был торошто аҙҙырғанда йөрәк һәм ҡан тамырҙары проблемалары башлана, хроник йөрәк етешһеҙлеге барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, әгәр кеше икенсе ҡатҡа быға тиклем еңел генә менеп, хәҙер тыны ҡыҫылһа, уйланырға урын бар. Әгәр сир юҡ, ә тын ҡыҫыла икән - был йөрәктең насар эшләүенең беренсе күрһәткесе. Сир һөҙөмтәһендә инфаркт, инсульт, тромбоз һәм эмболия барлыҡҡа килеүе ихтимал. Миокардит, йөрәк мускулдарының ялҡынһыныуы шунда уҡ түгел, бер ни тиклем ваҡыттан һуң үҙен һиҙҙерергә мөмкин.

Оҙайлы инфекция һөҙөмтәһе булып бөйөр сирҙәре: пиелонефрит, гломерулонефрит - шешенеү, 37-нән төшмәгән температура, хәлһеҙлек уйланырға мәжбүр итергә тейеш; антибиотиктарҙы оҙайлы ҡабул иткәндән һуң бөйөр токсик зарарланырға мөмкин. Иммунодефицит организмдың вируслы инфекцияларға ҡаршы тороуын кәметә, ОРВИ, киҙеү, парагрипп менән сирләү ихтималлығы арта.

**Сирләгәндән һуң ниндәй реабилитация саралары билдәләнә.** Тәү сиратта, тын алыу, физик әүҙемлек, көсөргәнешкә сыҙамлылыҡ, стресты, тынысһыҙлыҡты йәки депрессияны еңеү функцияларын тергеҙеү зарур. Тын алыуға килгәндә, бында үпкәләрҙең күләмен ҙурайтыуға, уның тын алыу мускулдарының эшмәкәрлеген көсәйтеүгә баҫым яһала. Вирус йоғонтоһо һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән фиброз үҙгәрештәр дауалауға аҡрын килә, тигән фекер йәшәй. Әммә организмдың адаптация мөмкинлектәрен бергә туплағанда һәм дөрөҫ дауалағанда пациент тулыһынса һауығырға мөмкин. Иң мөһиме - реабилитацияны дауаланыу туҡтау менән башларға һәм тулыһынса башҡарырға кәрәк. Белгес менән кәңәшләшкәндән һуң, пациент үҙ аллы системалы рәүештә аэроб көсөргәнеш алырға, тын алыу гимнастикаһы эшләргә, саф һауала йөрөргә, скандинавса атлау менән шөғөлләнергә тейеш. Шулай уҡ нормаль йоҡо, рациональ, тулы һәм витаминдарға бай, баланслы туҡланыу мөһим.

Коронавирус беҙгә мәңгелеккә килде һәм шуға ла барыбыҙға ла сәләмәтлегебеҙгә иғтибарлы булырға, насар ғәҙәттәрҙән арынырға, йыл һайын диспансерлаштырыу үтергә, ниндәйҙер тайпылыш булғанда табиптарға ваҡытында мөрәжәғәт итергә кәрәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 44-се идея
## Тар ҡараш

Ҡайһы берҙә һинең, тормошоң өмөтһөҙ буталған, уныңептәре сеймәлгән, бынан сығыу юлы юҡ, йәшәү ҡатмарлашҡандан-ҡатмарлаша кеүек тойолған һәм, ғөмүмән, артабан йәшәүҙең кәрәге бар микән, тип уйлаған саҡтарың булғылаймы?

Ауырлыҡтар һәм тойолған тормош ҡаршылыҡтары мөйөшкә килтереп һырындырғанда беҙ һәр ваҡыт әйберҙәргә тар ҡараш, бер ваҡытта ла тотош ысынбарлыҡты сағылдырмаған ҡараш, ташлауыбыҙҙы иҫтә тоторға тейешбеҙ.

Беҙ әйберҙәргә бер яҡтан ғына ҡарайбыҙ. Айырым бер киҫәкте тотош кеүек күргәндә, беҙ уны сикләнгән ракурста ғына күрәбеҙ. Үҙебеҙҙең сикләнгән, тар ҡарашыбыҙ менән тотош картинаны байҡауға өмөтләнә алмайбыҙ.

Әйтәйек, эскимосҡа дөйә кәүҙәһенең төрлө өлөштәре һүрәтләнгән рәсемдәр күрһәттең, ти. Эскимостың, әлбиттә, үҙ ғүмерендә дөйәне күргәне юҡ. Һин уға тотош башын, үркәсен йәки артҡы аяҡтарын күрһәтә алаһың, әммә ул бер ваҡытта ла ысынбарлыҡта дөйәнең нисек булыуын күҙ алдына килтерә алмаясаҡ.

Буталсыҡлыҡты күрһәтеүсе икенсе бер миҫал - Персия келәме. Уны тиҫкәре яҡтан ҡарағанда, бер ниндәй симметрияһыҙ һәм логикаһыҙ, йәмһеҙ һыҙаттар һәм төҫтәр болғатмаһы кеүек ҡабул ителә. Ләкин был һиндә асҡыс булмағанға күрә генә шулай тойола: һин тотош картинаны күрә алмайһың.

Келәмде әйләндереп ҡарағас, ундағы биҙәктәрҙе күреп, тиҫкәре яғындағы буталсыҡептәрҙең уң яғында матур, тамамланған бер әйбер барлыҡҡа килтереүен аңларһың.

Тормошобоҙҙа ла шулай уҡ. Бер көн килеп, әҙерлек класынан рухи яҡтан юғарыраҡ кимәлгә күскәс, беҙ кеше ғүмерен тәшкил итеүсе бик күпептәр, бер-береһенә бәйләнмәгән кеүек тойолған картиналар, ваҡиғалар һәм хәлдәр буталсыҡлығы - ул ысынбарлыҡта Ижадсыбыҙ менән бергә һәм Уның өсөн туҡыған ҙур бер япманың матур, аныҡ биҙәгенең бер өлөшө булыуын күрербеҙ.

Әгәр тормош һиңә төрлө мәғәнәһеҙ ваҡиғалар һәм мажаралар буталсыҡлығы булып тойолһа, был ни бары ошо мәлдә һинең ҡарашың тотош бер бөтөндөң бәләкәй генә өлөшөн күрә, тигәнде аңлата.

Әгәр беҙ аҙ ғына артҡа сигенһәк, ҙурыраҡ өлөшөн күрербеҙ, ләкин был осраҡта ла беҙгә, ошо ваҡиғалар буталсыҡлығының Камиллыҡ биҙәгенә ҡушылып үрелеүен аңлау өсөн, рухи яҡтан тағы ла оҙаҡ үҫешергә тура киләсәк.

Ижадсыбыҙ хата ебәрмәй!

Шуны бел: тормошонда әлеге мәлдә нимә генә барһа ла - ул Камиллыҡ биҙәгенең бер өлөшө.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 26 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Тобол" [16+]
22.35 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Познер. [16+]
2.50, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зови меня мамой". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]
2.20 Т/с "Каменская-6". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-2". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Шефы". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.45 Хоккей КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль).**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Щит Минервы". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 27 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Тобол" [16+]
22.35 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Повелитель биоинформатики. Михаил Гельфанд". [12+]
2.45, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зови меня мамой". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-6". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-2". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Шефы". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30 Страна войлока. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Красный лотос". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 28 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Тобол" [16+]
22.35 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Повелитель мозга. Святослав Медведев". [12+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зови меня мамой". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-2". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-2". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Шефы". [12+]**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" /Хабаровск/. КХЛ.**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Скрытая любовь". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 29 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Тобол" [16+]
22.35 Большая игра. [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Михаил Романов. Первая жертва". [16+]
2.50, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зови меня мамой". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-2". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-2". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Шефы". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00 "История Ассамблеи народов РБ в песнях и танцах народа". [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Осторожно, дорога! [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ты у меня одна". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "И день, и век". [12+]**
**4.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 30 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 2.45 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.35 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 "Поле чудес". Юбилейный выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Жан-Поль Готье. С любовью". [18+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Юморина-2020. [16+]
0.40 Х/ф "Буду верной женой". [12+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-2". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 "Вся правда о..." [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Автограф". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.50 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Край". [16+]**
**2.30 Спектакль "Однажды в санатории". [12+]**
**4.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.00 Д/ф "В жерновах времени". [12+]**
**5.45 "Бай". [12+]**
**6.15 "Весело живем!" [12+]**

## 31 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.10 Угадай мелодию. [12+]
15.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.15 "Ледниковый период". Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.20 Сегодня вечером. [16+]
0.00 Премьера. Концерт "Планета Билан". [12+]
2.05 Модный приговор. [6+]
2.55 Давай поженимся! [16+]
3.35 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Тест. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.20 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Х/ф "Маруся". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Штамп в паспорте". [12+]
1.40 Х/ф "Выйти замуж за генерала". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Гала-концерт Межрегионального конкурса исполнителей башкирской песни "Ирәндек моңдары-2020". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00, 4.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Враги". [16+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 1 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.35, 6.10 Х/ф "Собака на сене". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 "Вращайте барабан!" К 30-летию программы "Поле чудес". [12+]
19.05 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
21.45 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Власть". [18+]
1.20 Наедине со всеми. [16+]
2.05 Модный приговор. [6+]
2.55 Давай поженимся! [16+]
3.35 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 1.45 Х/ф "Что скрывает любовь". [12+]
6.05, 3.20 Х/ф "Мой белый и пушистый". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Парад юмора. [16+]
13.10 Х/ф "Совсем чужие". [12+]
17.00 Удивительные люди. Новый сезон. Финал. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.50 Д/ф "США-2020. Накануне". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Башҡорттар. [6+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Куньлунь Ред Стар" (Пекин). КХЛ.**
**19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [6+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Ты у меня одна". [16+]**
**2.15 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**4.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӘҘӘМДӘН ОЛО - АТ, ИКМӘКТӘН ОЛО АШ ЮҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**42-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Нәжми. Буҙыҡай. Надир. Ҡаҙаҡ. Этаяҡ. Иҙеүкәй. Ҡарағат. Әйтеш. Ғәрәфә. Тау. Таҡ. Ғәйшә. Оҫта. Ишәк. Ислам. Арыш. Овал. Ғәлиев. Әкрен. Реактор. Әбей. Эт.

**Вертикаль буйынса:** Ҡуҙғалаҡ. Ҡарымтасы. Ғафури. Буҙа. Әҙернә. Ҡитға. Наҙан. Такси. Еҙекәй. Дәүләтҡолов. Оло. Инйәр. Рәт. Эйә. Ғаилә. Йүкә. Емеш. Ҡош. Әрмән.

БАҠСА



# КӨҘГӨ ЭШТӘР

**Баҡса участкаһын ҡаҙып сығыу еңел эш түгел. Һәм күптәр быға ҡул һелтәгән - ялҡауҙары килә. Ә шул уҡ ваҡытта көҙгөлөккә ерҙе ҡаҙып сығыу бик мөһим эш, шунһыҙ яҡшы уңыш көтмә. Бының өсөн бөтә баҡса "бушаганын" көтмәһәң дә ярай, аҡрынлап башҡарырға була. Ҡыярҙы йыйып алдың икән, түтәл урынын ҡаҙып сыҡ. Помидор уңыш биреп бөттөмө - ҡаҙығыҙ, аҙаҡ кишер, сөгөлдөр, кәбеҫтә үҫтергән ергә лә көрәк тейҙерегеҙ. Бына шулай эшләгәндә баҡса тупрағын ҡоротҡостарҙан һәм ауырыуҙарҙан тиҙ арала эшкәртеп тә сығырһығыҙ.**

Тупраҡты көҙ эшкәртеү бер юлы биш төрлө файҙа килтерә. Беренсенән, тупраҡ структураһы яҡшыра. Утағандан һуң унда барлыҡҡа килгән ваҡ тишектәр һәм бушлыҡтарға һауа туласаҡ. Ул тупраҡты кислородҡа туйындыра һәм йомшарта, таралып тороусан итә. Ә туҡлыҡлы элементтары үҫемлектәргә кәрәкле формаға әүерелә.

Икенсенән, уңдырышлыҡ арта. Әгәр ҙә йәй дауамында түтәлдәрҙе бесән, һалам, серемтә (перегной) йәки торф менән ашлап торһағыҙ, көҙгөгә тиҙәк йәки серетмә (компост) һалһағыҙ, тупраҡты ҡаҙып сығыу тәбиғи ашламаға яҡшыраҡ тарҡалырға ярҙам итәсәк - быға ла кислород булыуы шарт.

Өсөнсөнән, ҡоротҡостар юҡҡа сыға. Бик күп ҡоротҡостарҙың ҡарышлауыҡтары тупраҡта ҡышлай. Уларға шулай уңайлы, сөнки тупраҡ, ғәҙәттә, ныҡ туңмай, ә инде ҡар иртә яуһа - ер аҫтындағы шарттар теплицалағы кеүек була. Әммә түтәлдәрҙе ҡаҙып сығып, тупраҡты кәҫләп һалып киткәндә, күп ҡарышлауыҡтар шунда ҡала һәм ҡышҡыһын бергә туңасаҡ.

Тағы ла көҙгөгә ер ҡаҙғанда күп йыллыҡ үҫемлектәр тамыры менән өҫкә сыға, уларҙы йыйып алып ташларға мөмкин. Тупраҡта ятып ҡалған хәлдә лә был осраҡта туңасаҡ. Шулай уҡ бер йыллыҡ ҡый үләндәре үҫеүенә яҡшы йоғонто яһала һәм йылы көҙ мәлендә яңы ҡалҡып сыҡҡан үҫентеләрҙе тәүге ҡышҡы һыуыҡтар алып, юҡ итәсәк. Бынан тыш, көҙ баҡса участкаһындағы тупраҡты ҡаҙып сыҡҡанда ҡар яҡшыраҡ ята. Ә яҙын ҡар һыуы ситкә ағып китмәй. Ул күҙәнәкле тупраҡҡа яҡшы һеңә һәм төпкә төшөп дымландыра. Бына шундай кәрәкле эште башҡарғанда ерҙе 20-30 сантиметр тәрәнлектә ҡаҙып сығырға кәңәш ителә, тупраҡ киҫәктәрен аҫтын өҫкә ҡаратып һалып сығырға кәрәк һәм кәҫтәрҙе таратмаҫҡа - был ҡоротҡостарҙы үлтереү өсөн файҙалы.

**Көрәкме, әллә культиватормы?** Тәү ҡарамаҡҡа, яуап билдәле кеүек, культиватор менән участканы эшкәртеү еңелерәк. Әммә уларҙың бер ҙур етешһеҙлеге бар: ваҡыт үтеү менән участкала "һабан аҫты табаны" тип йөрөтөлгән нәмә барлыҡҡа килә һәм тупраҡ 20-30 сантиметр тәрәнлектә бик ныҡ тығыҙлана, һыуҙы тәрәнгәрәк үткәрмәй башлай. Һөҙөмтәлә дым тотҡарлана, үҫемлектәр тамырын серетеүгә килтерә. Уны булдырмау өсөн 4-6 йылға бер тапҡыр баҡса ерен трактор менән һөрөп торорға йәки 50 сантиметр тәрәнлектә ҡаҙып сығырға кәрәк. Был да еңел эш түгел, шуға күрә культиваторға һалышмай, борондан белгән ысул - көрәк менән эшләүгә өҫтөнлөк бирегеҙ. Тағы ла шуны хәтерҙән сығармағыҙ: ағастар һәм ҡыуаҡтар үҫкән урында тупраҡты 15 сантиметрҙан да тәрәнгә ҡаҙырға ярамай, сөнки үҫемлектәрҙең тамырына зыян килеүе бар.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Октябрь - Ноябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (9) дүшәмбе | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |
| 27 (10) шишәмбе | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 16:17 | 17:47 | 19:17 |
| 28 (11) шаршамбы | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 16:15 | 17:45 | 19:15 |
| 29 (12) кесе йома | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 16:13 | 17:43 | 19:13 |
| 30 (13) йома | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |
| 31 (14) шәмбе | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 16:09 | 17:39 | 19:09 |
| 1 (15) йәкшәмбе | 6:51 | 8:21 | 13:30 | 16:07 | 17:37 | 19:07 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҮҘЕҢӘ ЗЫЯН ИТМӘ

Ҡөрьән өйрәтә: "Кем дә кем тура юл менән бара икән, тапҡан юлы - үҙе өсөн файҙа; кем дә кем хаҡ юлдан яҙып, аҙашып ҡала икән, үҙенә зыян килтереү өсөн аҙаша. Кешегә тейешле булған йөктө бер кем дә күтәреп йөрөмәй. Һәм Беҙ бойорғандарыбыҙҙы һәм тыйғандарыбыҙҙы аңлатып биреү өсөн алдан илселәр ебәрмәй тороп, бер ҡасан да, бер кемде лә язаға тартманыҡ.

Ҡылған гонаһтары өсөн "ниндәй ҙә булһа бер ауыл халҡын һәләк итергә теләгән саҡтарыбыҙҙа ла Беҙҙең ихтыярыбыҙ менән уларҙың дингә килмәгән байҙары аҙғынлыҡҡа, иманһыҙлыҡҡа бирелде, унан маңлайына яҙылғандары алдына килеп баҫты һәм Беҙ уларҙың береһен дә ҡалдырмай һәләк иттек. Нух ҡәүеменән һуң күпме халыҡтарҙы юҡҡа сығарҙыҡ. Уларҙы Аллаһ үҙе генә белә. Ҡолдары ҡылған гонаһ эштәрҙе лә Ул үҙе күреп тора", - ти.

**"Әл-Исра" (Төндә күсереү) сүрәһе, 15-17-се аяттар.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

*Гәлиә КӘЛИМУЛЛИНА*



# ТЕЛЛЕ БУЛҺАҠ ҠЫНА БЕҘ ХАЛЫҠБЫҘ,

## Беҙ тел менән Илгә терәүбеҙ!

### Телем хаҡы

Телем, тиеп һүҙ әйтмәһәм,
Мин кем булам?
Телем тиһәм, мин, ҡурайҙай,
Моңға тулам.

Моңға тулам, йырға тулам,
Нурға тулам.
Телем, тиһәм, йырлы-моңло
Ҡояш булам.

Телгенәйем - әсәй кеүек,
Әсәй - берәү.
Әсәйҙәр бит был донъяла
Беҙгә терәү.

Әсәйемдең теле бит ул -
Күңел теле.
Ошо телгә һыя минең
Йөрәк сере.

Әсәй хаҡы - тәңре хаҡы,
Телем хаҡы.
Телем, тиһәм генә минең
Донъям яҡты.

Телем, тиһәм, мин - теремен,
Мин түлләмен.
Телем менән бер бөтәнмән
Һәм илләмен.

Телем менән генә бармын,
Буласаҡмын!
Телем менән мин яңынан
Тыуасаҡмын!

### Илем, телем, халҡым

*Башҡортостан әгәр йәшәй тиһән,*
*Бер йәнемә миллион үлем бир!*
*Ш. Бабич.*

Һин ҡалҡаны булып илгенәмдең
Ил ағаһы, әйҙә, күкрәк кир!
Илгенәйем әгәр йәшәй тиһән,
Бер йәнемә миллион үлем бир!

Һин йөрәге бул да шул ҡалҡандың
Ил әсәһе, фатиханды бир.
Телгенәйем әгәр йәшәй тиһән,
Бер йәнемә миллион үлем бир!

Милләтемдең бишеге һин, ҡыҙым,
Бишек йырын тарих итеп үр.
Халҡым йыры әгәр йәшәй икән,
Бер йәнемә миллион үлем бир!

Киләсәге һин бит илдең, улым,
Халҡың менән һүҙең булһын бер.
Халҡым, телем, илем йәшәй тиһән,
Бер йәнемә миллион үлем бир!

Телле булһаҡ ҡына беҙ халыҡбыҙ,
Беҙ тел менән Илгә терәүбеҙ!
Беҙ телебеҙ менән бер яҙмышлы,
Беҙ телебеҙ менән берәүбеҙ!

### Ҡот әҙләйем

Ут әҙләйем...
Бик-бик кәрәк ине.
Ут - ҡот бит ул,
Буламы ни утһыҙ!
Юғалттым да утты - йөрәгемде...
Бына хәҙер йәшәйем мин ҡотһоҙ.

Ҡот әҙләйем...
Бик-бик кәрәк ине.
Ҡот - көс бит ул
Ерҙә баҫып торор.
Ҡотһоҙ ҡалһаң,
Тәнең, йәнең, аҙаҡ...
Тамырҙарың -
Зат-ырыуың ҡорор.

Ҡот эҙләйем!
Ҡот ҡояйыҡ әле
Йәнемә лә, ырыу-затыма ла.
Ҡот ҡояйыҡ,
Терелерлек булһын,
Сит-яттарҙың
Йылаһына әүрәп,
Утһыҙ ҡалып барған халҡыма ла.

### Тыуған тупраҡ

Кеше тыуған тупрағынан
Һыуынмаһын икән.
Тупраҡ йылытҡанда ғына,
Кеше матур, күркәм.

Кендек ҡаның тамған тупраҡ,
Ул - бишегең һинең.
Яраларыңды ямарлыҡ
Дауалаусың, имең.

Тартып торһон һине ул ер,
Торһон гел йылытып.
Оҙатмаһындар был ерҙән,
Йәнеңде илатып.

Һин атлап киткән ошо ер -
Һинең бейеклегең.
Ул - һин. Һинең оло
Һәм бәләкәй ереҥ.

Бер ҡасан да оло булма
Ошо бейеклектән.
Үрең юғары булһа ла,
Һаҡлан меҫкенлектән.

Тыуған тупраҡ йылыһын һин
Йөрөт уй-аңыңда.
Һин яулаған бына ошо
Бейеклек алдында.

### Ҡумыҙ сыңы

Ҡумыҙ сыңы сал Күк тыны микән,
Дала моңо микән:
Сың!.. Сың!.. Сың!..
Һәр бер өнө зиһенемдә тиртә,
Йөрәгемә сиртә был тылсым.

Ер - Әсәнең инрәүҙәре микән,
Әрнеүҙәре микән:
Сың!... Сың!.. Сың!..
Сулпы сыңдарында ошо һағыш,
Ҡашмауҙарҙа йәшәй был тылсым.

Аҡбуҙаттың текә тояҡтары
Шулай бейегәндер:
Сың!.. Сың!.. Сың!..
Ҡайһы быуаттарға алып осор -
Ҡанатлы ла икән был тылсым!..

Ә быныһы - булат ҡылыс сыңы,
Ҡая - ташты ҡайрай:
Сың!.. Сың!.. Сың!..
Ҡаным таный һине, аңым таный,
Азатлыҡтың йәне был тылсым!..

Сал Ҡуктәрҙән аҙан килә Ергә -
Рухым тере әле:
Сың!.. Сың!.. Сың!..
Халҡым моңо - Күктәр моңо бит ул,
Ҡумыҙ булып сиртә шул тылсым.

### Ҡалаҡ

Мин тәкәббер түгел, ипкә киләм,
Ҡайтыулайым, күндәм бисәмен.
Һин дә белә инең:
Ғүмер буйы,
Үҙ-үҙемде яҡлай алмайынса,
Һөмһөҙҙәрҙең ыуын эсәмен.

Белә инең, әйткәндәрең булды:
Артыҡ йыуаш, артыҡ илаҡмын.
Бына тағы, уйламаған ерҙән,
Һабы һынып сыҡты
(Яҙмышмы был?)
Минә генә тигән ҡалаҡтың...

Бер иш кенә ике ҡалаҡ ине,
Бүләк ине, һабы - көмөштән.
Хәйерләгә булһын...
Ул ҡалаҡтың
Булманысы бер ҙә тейенгәне
Харам малдан, харам өлөштән.

Туймаҫ тамағым юҡ.
Көсөм дә бар
Үҙ көнөмдө үҙем күрерлек.
Һөймәлекле һөйәгем дә бар ул,
Танһыҡтарың ҡанмай һөйөрлөк.

Шул һөйәкте килештермәнең бит,
Тамағыңа торҙо бер килеп...
Асыуыңдан ҡалаҡ һынып сыҡты,
Ырғып төшөп киткән өлөшөн дә
Их, алмаған булдың әйлеп...

Ҡалаҡты ни... яңынан алып була...
Рәнйеп ятмаҫ микән һынары?
Уныһын мин, ризыҡ тартһын, тиеп,
Нигеҙ ташы менән бергә күмдем...
Тейеп ҡуймаһын, тим, зыяны...

Хәләл ризыҡ таш яра ул барыбер,
Теге ҡалаҡ тартыр хәләлен.
Яңыһы йә харам көсәп торор...
Йөйө ҡалыр инде,
Йыйып ал да,
Эҙләп ҡара ямау әмәлен...

### Ҡалып

Өй йыйыштырам. Кәштәләр
Тултырылған тынҡыслап.
Яңыртайым, саң баҫайым,
Ҡаҡҡыслап та һуҡҡыслап.

Йыйыштырам, тигән булып,
Сығарып өйгән булам.
Һәр береһен, тотоп ҡарап,
Һағышҡа, нурға тулам...

Бында үлсәм берәү генә -
Юрғаным оҙонлоғо.
(Юрғанымдан оҙон ерҙә
Аяғым һуҙылманы...)

Бында зауыҡ берәү генә:
Ярағаны әйберҙең.
(Их, һин генә, мода, тиеп,
Донъяларҙы емерҙең!..)

Бында сама берәү генә:
Ярап торор быйылға.
(Их, һинең дә нәфсең шулай
Ярар, тиеп, тыйылһа!)

Береһе лә артыҡ түгел,
Һәр береһе бер хәтер:
Һинең йылың һеңгән бер ни
Күреп ҡуймаһын йәбер...

Һәр береһен, барлап, тәҫләп,
Киренән ҡуйҙым һалып.
Йән тартҡанға тоғролоғом -
Донъямды тотҡан ҡалып.

---

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ-ҙәренә эйәреп, донъяуи хә-ҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңыш-лы кеше булыр өсөн.**

# ИЛ АУЫҘЫНА...

## иләк ҡаплап булмай

Ҡул - ҡортһоҙ, донъя - телһеҙ, ил бо-лаһыҙ булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡулына яҡшы китап тотҡан кеше бер ваҡытта ла яңғыҙ булмай.

**(Карло Гольдони).**

Ҡурҡаҡ - ул иң хәүефле мәлдә аяҡта-ры менән уйлаусы.

**(Джозеф Аддисон).**

Мөхәббәттә хаталанмаған кеше бер ваҡытта ла мөхәббәттә аҡыллы була ал-май.

**(Теодор Рейк).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер бик бай һәм аҡыл эйәһе сауҙагәр ауырып китә. Үҙенең тиҙҙән теге донъяға күсәсәген аңлағас, янына берҙән-бер улын саҡырып ала һәм былай ти: "Улым, миңә был донъяны ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсергә ваҡыт килеп етте. Һуңғы үтенесем шул: мәйетемде кәфенгә төрә башлағас, хеҙмәтселәргә минең һул аяғыма иҫке башмағымды кейҙерергә бойороҡ бир". Ошо һүҙҙәрҙе әйтә лә, йән бирә сауҙагәр.**

**Уны һуңғы юлға оҙатырға бик күп халыҡ йыйыла. Мәйетте мосолман йолаһы буйынса тәрбиәләп, кәфенгә төрә башлағас, улы бер хеҙмәтсеһенә иҫке башмаҡ тоттора һәм атаһының һул аяғына кейҙерергә бойора. "Был мөмкин түгел, - ти хеҙмәтсе, - беҙҙә ундай йола юҡ!" "Был бит атайымдың һуңғы үтенесе, ул теләгәнсә эшләгеҙ, зинһар..." - ти егет илай-илай. "Мосолман ҡануны буйынса мәйет бары тик кәфенгә төрөләргә тейеш. Мин был ҡағиҙәне боҙа алмайым", - ти хеҙмәтсе. Егет кеше ни эшләргә лә белмәй, һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, атаһының мәйетен зыяратҡа алып китеүҙәрен теләмәй ул. Шунан мәйетте мосолманса ерләү ҡануңдарын ныҡлап белгән башҡа кешеләрҙе эҙләтә башлай. Ул кешеләр ҙә мәйеттең аяғына башмаҡ кейҙереүгә ҡаршы була. Шулай итеп, сауҙагәрҙе уның һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, әммә бар ҡағиҙәләрҙе күҙәтеп, зыяратҡа алып барып ерләйҙәр. Ҡәбер эргәһендә күҙ йәше түгеп ултырған егеткә атаһының яҡын дуҫы килеп өндәшә һәм уға хат тоттора. Был хатты уға атаһы тере сағында яҙған була: "Улым, мин һиңә бар байлығымды ҡалдырам, уларҙы аҡыл менән тотон, һаранланма, юҡҡа-барға туҙҙырма ла. Мин туплаған байлыҡ һиңә тормошта дөрөҫ юл һайларға ярҙам итһен. Ҡасандыр берәй ваҡыт һин дә минең эргәмә күсерһең - кеше мәңгелек түгел. Шуны хәтереңдә тот: ерҙәге юлың тамамланғас, һин ул тормоштағы бер байлығыңды ла, хатта бер нигә ярамаған иҫке башмаҡтарыңды ла үҙең менән алып китә алмаҫһың..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
23 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 851/10